✓ *Дәүләт хеҙмәтендәге берәүҙе батша бик тә мөһим вазифаһынан бушатып, түбән дәрәжәлерәк бер эшкә күсерә. Күпмелер ваҡыт үткәндән һуң был кеше батша менән осраша. "Хәлең нисек, эшең оҡшаймы?" - ти батша. "Аллаһы Тәғәлә батшабыҙға оҙон ғүмер бирһен. Кеше бит эшенең дәрәжәһенә ҡарап юғары күтәрелмәй, тыйнаҡ тәбиғәте, ғәҙел була белеүе, күпте өмөт итеп бармауы менән эштең үҙен юғары дәрәжәгә күтәрә", - тигән кеше. Батшаға был яуап бик тә оҡшай, һәм ул уны яңынан элекке вазифаһына ҡайтара.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№33 (607)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Әҙәм булайым тиһәң...**

аҡсаға йән һатма



3

**Эшҡыуарлыҡ ниңә йәлеп итмәй?**



6

**Хөбөтдин ҡарт һәм миллиардер Абрамович...**



8-9 икеһе лә натураль ризыҡ ашай

**Телең...**

теш артында булһын



12-13

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## "Айыҡ ауыл" конкурсы эскелек кеүек афәттән котолоу юлында бер һынау, һынылыш булды, тип уйлайһығыҙмы?

*Ирек ҒАРИПОВ, Салауат районы Көҫәпәй ауылы старостаһы:*
Айыҡлыҡ хәрәкәте беҙҙә был конкурс иғлан ителеүҙән күпкә алдараҡ уҡ бара ине инде, сөнки ғүмер-ғүмергә районыбыҙҙың Сыбаркүл ауылы менән тығыҙ аралашып, яҡшы башланғыстарға бергәләшеп нигеҙ һалып, ярышып-сәмләнеп йәшәнек. Конкурс беҙҙең бына ошолай сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыуыбыҙға артабан этәргес булды ла инде. Әбйәлилдәр өлгөһөн дә дәррәү күтәреп алдыҡ, үҙебеҙҙе айыҡ ауыл тип иғлан иттек. Айыҡ тормошҡа тәүге аҙымды, әлбиттә, ауылда иҫерткес эсемлектәр һатыуҙы тыйыуҙан башланыҡ. Милиция менән бәйләнеште нығыттыҡ, ә был үҙ сиратында көмөшкәселәр шөғөлөнә лә юлды ябыуға булышлыҡ итте. Тора-бара күмәк эште боҙоп ҡуйыуҙан, тәнҡит утына эләгеүҙән тартынып, кеше эсеүҙән тыйылды. Электән ошонда йәшәгән үҙебеҙҙең төп халыҡтың эсмәй, матур итеп донъя көтөргә тырышып ятыуы һөйөндөрһә, ситтән килеүсе бәғзе берәүҙәр менән иһә аңлатыу эштәре алып барырға тура килгеләй. Әйтеп китеүемсә, ауылдаштарым береһенән-береһе уҙҙырырға тырышып, сәмләнеп йәшәй: күп итеп мал көтәләр, умарта тоталар. Фермерҙарыбыҙ бар. Өй һайын трактор, машина. Бүлеп алған пай ерҙәрендә рәхәтләнеп бесән эшләйҙәр, йорт яны баҡсаларында үндырып картуф, йәшелсә-емеш үҫтереп алалар. Күреүегеҙсә, ике ҡулына мең төрлө мәшәҡәте - эше, шөғөлө булған кешелә эсеү ҡайғыһы булмай ул, эскелек - эшһеҙлек, битарафлыҡ, хатта, әйтер инем, ялҡаулыҡ, тормошҡа ҡул һелтәп ҡарау касафаты.

Республиканың йөҙгә яҡын ауылы ҡатнашҡан "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеүсе булыуыбыҙ тағы ла дәртләндереп ебәрҙе беҙҙе. Һынылыш, тигәндән, бая әйтеп китеүемсә, ауылдаштарым айыҡ тормош өҫтөнлөктәренә күптән инанған инде. Хәҙер йәштәребеҙҙе ана шундай тормош өлгөһөнә эйәртеү - беҙҙең бурыс. Конкурста яуланған приз аҡсаһына спорт ҡорамалдары, музыкаль үҙәк, башҡа кәрәк-яраҡ һатып алынды. Клубыбыҙ булмаһа ла, мәктәптең ҙур спорт залы кәрәк икән - сәхнәгә, кәрәк икән ярыш майҙансығына әүерелә. Йәштәр күп ауылда, ситтә уҡып йөрөүселәр ҙә ҡайтып тора, хатта күрше ауылдарҙан да йыйылып китәләр. Үҙебеҙҙең спорт командаларыбыҙ бар. Демографик хәл ярайһы тотороҡло, йәш ғаиләләр арта бара, айырылышыу, енәйәтселек кеүек күңелһеҙ күренештәр юҡ тип әйтерлек хәҙер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*КӨНАУАЗ*

# ТАЯҠ - ИКЕ БАШЛЫ,

## миҙал ике яҡлы була...

**Евросоюздың төрлө санкцияларына яуап итеп, Рәсәйҙең ҡайһы бер сит илдәрҙән аҙыҡ-түлек индереүҙе тыйыуы беҙҙе ас-яланғас ҡалдырыу урынына, киреһенсә, үҙебеҙҙә етештереү ҡеүәттәрен арттырып, яҡшы эштәргә генә юл асылыуға өмөт уята. Сөнки, шағир әйтмешләй, Рәсәйҙе аҡыл менән аңлап булмағандай, уның халҡы һәр осорҙа ла үҙенсә тормошҡа яраҡлашып, үҙенең стандарттары менән йәшәй. Аслыҡ, һуғыш афәттәре йылдарында ла ҡырылып бөтмәгән һәм артабан йәшәргә көс тапҡан халыҡ, бигерәк тә ауыл халҡы, был юлы ла аптырап ҡалмаясаҡ. Үҙебеҙҙә етештерелгән тәбиғи аҙыҡ менән туҡланыуын ул әле лә онотмаған һәм ташламаған, ә инде яңы технологиялар булдырыуға килгәндә, аҡыллы баштар беҙҙә лә етерлек.**

"Российская газета"ға биргән интервьюһында БР Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов был темаға ентекле туҡталды. "Импортты алмаштырыу ауырыраҡ барасаҡ сәнәғәт өлкәләренең береһе - машиналар эшләү, - тине ул. - Ләкин ғалимдарыбыҙҙың машиналар эшләүҙә иғтибарға лайыҡ яңылыҡтары ла юҡ түгел. Әммә уларҙы ҡулланылышҡа индереү өсөн заманса технологиялар кәрәк. Ә һуңғы йылдарҙа фәнгә аҡса аҙ бүленде, ҡайһы бер предприятиеларҙа фәнни-тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнеүсе бүлектәр юҡҡа сыҡты. Киләсәктә был хатаны төҙәтеп, һуңғы 15-20 йылда илебеҙ сумған импорт бәйлелегенә төшөргә ярамай. Был һәр яҡтан да хәүефле.

Идеаллаштырып ҡарағанда, беҙ барлыҡ тармаҡтарҙа ла үҙ аллы эшләй алабыҙ. Мәҫәлән, элемтә тармағында бөгөн сит ил тауарҙары яҡынса 95 процент тәшкил итә икән, Өфө предприятиелары был бәйлелекте 50 процентҡа кәметә ала. Ләкин был тармаҡ сит ил, шул иҫәптән Америка компаниялары тарафынан монополизацияланған. Беҙ үҙебеҙҙең элемтә ҡорамалдары баҙарында бөтөнләй юҡбыҙ тиерлек. Быға юл ҡуйырға ярамай.

Химия өлкәһендә лә шундай уҡ хәл. Бөгөн ил химия сәнәғәте өсөн сеймал запасының 20 процентына эйә, әммә химия продукцияһының донъя кимәлендәге күләмендә ни бары бер процентты алып тора. Сит илгә йөҙҙәрсә мең тонна беренсел эшкәртелгән продукция оҙатабыҙ, ә уларҙан медицина аппараттарының һәм көнкүреш техникаһының корпустарын, автомобиль тышлыҡтарын, ауыл хужалығы техникаһының комплектлаусы деталдәрен һ.б. алабыҙ. Ғәмәлдә, был импортты яртылаш ҡыҫҡартыу мөмкинлеге бар".

**(Дауамы 4-се биттә).**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңәлдергән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИҢ БОРСОҒАНЫ...

## уҡытыусылар һәм байҙар

**Миҙхәт МӘҒӘСҮМОВ, РСФСР-ҙың һәм РФ-ның атҡаҙанған уҡытыусыһы, пенсионер:** Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгән кеше булараҡ, мине бөгөнгө көндә иң борсоғаны, әлбиттә, мәктәп тормошондағы үҙгәрештәр. Ситтән күҙәтә йөрөгәндә лә уҡытыу һәм тәрбиә эштәренә иғтибар үҙгәрәүе һиҙелә. Уҡытыусылар күберәк баланың фекерләү ҡеүәһен үстерәүгә түгел, ә уның автомат рәүештә "тытылдап" яуап биреүенә өҫтөнлөк бирә. Тәрбиә йәһәтенән, мәктәптә, хатта ғаилә эсендә лә йәш быуын күңелендә рух, илһөйәрлек сифаттары үҫтерелмәй.

Бөгөнгө көндә мәктәп уҡытыусылары ла, мәғариф системаһында эшләүселәр ҙә профессиональ яҡтан минә оҡшап етмәй. Улар башҡорт милләтенең киләсәген тәшкил итәсәк кешеләргә белем бирә икән, үҙҙәре лә һәр яҡлап өлгөлө, эш һөҙөмтәләренең нимәгә алып киләсәген күҙаллай белергә бурыслы. Юғары исем йөрөтөүҙән бигерәк, халыҡ алдында абруйҙары юғары булырға тейеш, тип уйлайым. Ә улар балаларға нисек гөрләтеп йәшәргә, ең һыҙғанып эшләргә, етеш һәм матур тормош көтөргә, тәрбиәле һәм әхлаҡлы булырға икәнлекте үҙ өлгөһөндә күрһәтә аламы? Бөтәһе лә түгел, минеңсә. Ҡыҙғаныска күрә, хатта уҡыусының күңелен һүрелдермәй ҡанатландырып, уҡыуға ынтылышын арттыра белеүселәр ҙә йәш коллегаларым араһында һирәгәйҙе.

Шулай ҙа бөгөнгө заманда йәмғиәтебеҙҙең иң ҙур бәләһе, мәктәп системаһындағы проблемаларҙан да юғарыһы - ул синфи бүленеш. Илебеҙҙә берәүҙәр туймайынса байлыҡ туплай, икенселәр ярлылана һәм тормош упҡынына тәгәрәй. Байлыҡ йыйған кеше үҙ милләтенә, халҡына ярҙам итеп торорға тейеш икәнлеген бөтөнләй иҫенә лә алмай. Байҙарыбыҙ бөлгәнде бөлдөрөп ебәрә, дөйөм мәнфәғәттәр өсөн дә аҡсаһын йәлләй. Иң аяныслыһы, хатта дин әһелдәренең дә байлыҡ артынан ҡыуыуына шаһитбыҙ. Ислам динендәге кешене артыҡтан тыш матди етешлек ҡыҙыҡһындырырға тейеш түгел дә бит...

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Айыҡ ауыл" конкурсы эскелек кеүек афәттән ҡотолоу юлында бер һынау, һынылыш булды, тип уйлайһығыҙмы?

(Башы 1-се биттә).

***Илһам ИМАЕВ, Иглин районы Үктәй ауыл биләмәһе башлығы:*** Нисәмә йылдар буйына бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ эскелек менән ағыуланыу шарттарында йәшәгән халыҡты ҡыҫҡа ғына ваҡытта был зыянлы ғәҙәттән айырыу, ай-һай, ҡатмарлы мәсьәлә. Кеше аңында һынылыш барлыҡҡа килһен өсөн йә берәй тетрәнеү, йә даими ынғайға көйләнеү халәте кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Шуға ла мин ниндәйҙер тыйыу, мәжбүр итеү, йә булмаһа, мир алдында кемделер рисуай итеп, эскелеккә ҡаршы көрәшеү ысулын әллә ни хупламайым. Минең эш алымы - кешене шәхси өлгө нигеҙендә инандырыу. Шул маҡсаттан сығып, иң тәүҙә үҙем үҙгәрергә ҡарар ҡылдым: тулыһынса айыҡ тормошҡа күстем. Элек һирәк-мирәк ниндәйҙер тантана, байрам мәлдәрендә рюмка күтәреү ғәҙәте булһа, хәҙер ул юҡ. Ғөмүмән, хәҙер ауылдағы барлыҡ мәҙәни-социаль саралары эскеһеҙ үткәреүгә күстек. Тора-бара был тулыһынса айыҡ йәшәү рәүешенә әйләнер, тигән өмөттәмен. Хәҙер ауылдарҙа иҫерткес эсемлектәр һатыуҙы бөтөнләй тыйыу тураһында һүҙ күп бара. Бәлки, кемдәргәлер сәйер тойолор, ләкин мин быңдай тыйыуҙы ла хуп күрмәйем. Кеше үҙ яҙмышын үҙе һайларға, ә иң мөһиме - алдатҡыс "йылтыр" күҙ алдында ултырған хәлдә лә унан баш тарта алырға үҙендә көс табырға тейеш, юғиһә, бында тыйҙың икән, ул күрше ауылға йүгерәсәк һәм күңеле көҫәгәнен барыбер һатып аласаҡ. Тыйылған емеш татлы була, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит. Кеше һатып алмай башлаһа, араҡы үтмәҫ тауарға әйләнһә, уны ташып һатыусылары ла уйлана төшөр, күрәләтә кешене ағыулау шөғөлөндә ҡатнашыуы бер гонаһ эйәләре булыуы аңдарына барып етер ине, бәлки. Һәм ул барып етәсәк, әлбиттә, сөнки бөтөн мир ҡатнашлығында башланған эш күптәрҙе битарафлыҡ һаҙлығынан тартып сығарҙы. Беҙҙең ауыл биләмәһенең "Айыҡ ауыл" конкурсында призлы урын яулау факты үҙе үк күптәрҙә үҙе, ғаиләһе, ауылдаштары алдындағы яуаплылыҡ тойғоһон арттыра төштө, элеккесә йәшәү рәүешенә мөнәсәбәтен үҙгәртте. Иң мөһиме - тәғәйен урынына орлоҡ төшөп ятты, тик бына ул шытып сығып, көтөлгән уңышты бирһен өсөн һис туҡтамай көс түгәһе лә түгәһе...

***Лениза СӘҒӘҘИЕВА, Әбйәлил район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы:*** "Айыҡ ауыл- 2014" республика конкурсын ойоштороуға арналған Хөкүмәт кәңәшмәһендә был сараның йылдар дауамында ныҡышмалы алып барылырға, айыҡ тормоштоң көндәлек йәшәү рәүешенә әүерелергә тейешлегенә баҫым яһап әйтелде. Ә бит тап ана шундай беҙ күрергә теләгән сәләмәт йәшәү рәүешен күптән үҙ итеп йәшәгән һәр яҡлап өлгөлө ауылдарҙың Әбйәлил районында хатта бер нисәү икәнлеге республикабыҙҙа айыҡлыҡ хәрәкәте йәйелдерелеп, конкурсҡа әҙерлек башланғас, ныҡлап асыҡланды. Хәйер, районыбыҙҙа ул ауылдар һәм шул биләмәләрҙең етәкселәре хаҡында яҡшы билдәле ине инде. Буранғол ауыл биләмәһендә, мәҫәлән, уҙған быуаттың 80-се йылдарында уҡ әле ул ваҡыттағы ауыл Советы рәйесе, ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы етәксеһе Мәүҙиға Ғәбитова, Һәйетҡол ауыл клубы мөдире Вәсилә Садиҡова апайҙар тарафынан "Өлгөлө ғаилә", "Татыу килен һәм ҡәйнә" тигән саралар, ауылдаштар осрашыуҙары, аралар байрамдары һәм башҡа шундай эш алымдары халыҡты айыҡ тормошҡа йәлеп итеүсе, уларҙы рухиәтебеҙгә, мәҙәнилеккә яҡынайтыусы бик мөһим этәргес, әлеге етәкселәрҙең ойоштороу эштәрендә үҙе бер яңылыҡ булып торҙо. Айыҡ тормошҡа йәҙ бороу, халыҡ аңында ошо йәһәттән һынылыш яһарҙай яңыса эш алымдары шул йылдарҙан башланғыс алды ла инде. Бөгөнгө көндә ана шундай көслө лидерҙарыбыҙ йүнәлеш биреп башлап ебәргән эштәр уңышлы дауам ителә. Беҙҙең район ауылдарының йыл һайын "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеүсе булыуы ла шуға асыҡ дәлил. 2011 йылда был сарала ике ауыл ҡатнашып, Ҡырҙас ауылы еңеүсе булһа, 2013 йылда дүрт ауыл ҡатнашты, Рәхмәт ауылы еңеүселәр сафына сыҡты. Быйыл айыҡ ауылдарыбыҙ һаны тағы ла артты. Айыҡлыҡ конкурсында 7 ауыл ҡатнашасаҡ!

Әйтеүемсә, урындарҙа халыҡты ойоштороусы көслө лидерҙарҙың булыуы кәрәк. Был эште беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары, ауылдарҙың абруйлы ир-уҙамандары, ағинәйҙәр башлап йөрөй. Шул уҡ ваҡытта йәмәғәтселектең ошондай изге башланғыстарын ваҡытында күреп, баһалап, кәрәк урында закон-ерелә еткереп, күтәрмәләп тә торһон ине етәкселәребеҙ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы башлаған "Айыҡ ауыл" акцияһын бына икенсе йыл инде республика Хөкүмәте лә хуплап, уны финанс яғынан тәьмин итеүе, әлбиттә, оло баһаға лайыҡ. Башланған эште артабан да дауам итергә генә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноттҡандар барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе әле: гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Уның өсөн 17 августҡа тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индекслы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйһындар. Дүрт айға яҙылыу хаҡы 338 һум 40 тингә генә төшәсәк.**



● Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылырға мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы барлыһын да беләһегеҙ: был юлы ла **"Башҡорт халыҡ мәкәлдәре һәм әйтемдәре"**; **"История башкирского народа"**; **С. Руденконың "Башкиры"**; **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**; **2015 йылға "Башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Баш ҡалала Бөтә Рәсәй Дәүләт автомобиль юлдарын күҙәтеү территориаль идаралыҡтары кәңәшмәһе булып үтте. Унда Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, был өлкә хеҙмәткәрҙәренең төп бурысы - транспортта йөрөгән халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү. Ҡыҙғаныска ҡаршы, республикала ла, тотош Рәсәйҙә лә пассажирҙар ташыу сифаты маҡтанырлыҡ түгел. Республика юлдарында, мәҫәлән, йыл да 600-650 кеше һәләк була. Төп сәбәбе - юлдарҙың насар булыуы, пассажирҙар ташыусы транспорттың тейешле талаптарға яуап бирмәүе, уларҙың водителдәренең яуапһыҙлығы. Шуға ла контроль-күҙәтеү хеҙмәтенең һөҙөмтәлелеген күтәреү көн үҙәгендә тора.

✓Баш ҡалалағы Башҡортостан Урман паркында ремонт эштәре тамамланыуға табан бара. Унда әле йәйәүлеләр йөрөй торған һукмаҡтарға асфальт түшәлә. Электр бағаналарына фонарҙар элеү, балалар майҙансыҡтары, спорт ҡоролмалары урынлаштырыу кеүек эштәр ҡалған. Уларҙы 1 сентябргә тамамларға планлаштыралар.

✓РФ Хеҙмәт министрлығы инвалид балалы ғаиләләргә бирелгән әсәлек капиталы аҡсаһын улар йәшәгән фатирҙы йыһазландырыуға тотонорға рөхсәт бирергә тигән инициатива менән сығыш яһаны. Бөгөнгө көндә әсәлек капиталы 429,4 һум тәшкил итә. Был аҡсаны тулыһынса йә өлөшләтә әс маҡсатта - ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, балаларға белем биреү һәм әсәнең пенсия тупламаһын булдырыу өсөн файҙаланырға мөмкин.

✓Өфө Рәсәйҙең иң оптимистик ҡалалары рейтингында лидерҙар иҫәбенә ингән. Был хаҡта "Росгосстрах" Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге төҙөгән мәғлүмәттәр хәбәр итә. Өфөләләрҙең 85 проценты үҙ тормошо менән ҡәнәғәт булыуын һәм 68 проценты иртәгәге көнгә ышаныс менән йәшәүе тураһында белдергән. Иң пессимистик ҡалалар иҫәбендә -Омск, Волгоград һәм Барнаул.

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Хәсәнов белдереүенсә, баш ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөн бәйләүсе тиҙ трамвай линияһының һуңғы варианты 2015 йылда билдәле буласаҡ. Тиҙ трамвайҙың проекты ике өлөштән тора: беренсеһе - булған юлдарҙы реконструкциялау, икенсе этап - яңы юл төҙөү. Әле Зорге, Володарский, Минһажев урамдарындағы юлдарҙы реконструкциялау бара.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ӘҘӘМ БУЛАЙЫМ ТИҺӘҢ...

## аҡсаға йән һатма



*Алтын ҡағыҙ, көмөш конверт -*
*Ҡиммәт түгел,*
*Һөйгән йәрҙең яҙғаны ҡиммәт,*
*Күҙ-йәш түгеп.*

**Яңыраҡ бер таныш апай: "Илдар, тиҙҙән кафедрабыҙ коллективы менән байрам итәбеҙ. Һин миңә шунда әйтер өсөн матур ғына тост әҙерләп бир әле", - тип мөрәжәғәт итте. Апай бик яҡшы кеше булғас, ризалығымды бирҙем. Әммә бер аҙ уйланып йөрөгәндән һуң, апайға шылтыратып, уның тәҡдименән баш тарттым. Сөнки ул ҡотлаясаҡ кафедра ағзаларын яҡындан белмәйем, тимәк, ҡотлау өсөн ниндәй генә матур, яғымлы һүҙҙәр тапһам да, барыбер улар эскерһеҙ йылылыҡ, ысын мөнәсәбәтте сағылдыра алмаясаҡ.**

Был хәлдән һуң байтаҡ уйланып йөрөнөм: нишләп ошо байрам, юбилей, туй мәжлестәренән элекке алсаҡлыҡ, инсафлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, киң күңеллелек, яҡты сырайлыҡ китте һәм формаль ҡотлауҙар менән алышынды әле? Әллә әҙер тостар, ҡотлауҙар яҙылған баҫмалар, открыткалар шундай яһалмалыҡҡа килтерҙеме? Һатыуҙа хәҙер үҙ ҡулдарың менән ултырып яҙырлыҡ аҡ битле открыткалар ҙа юҡ шикелле - һинең өсөн матур һүҙҙәр яҙылып, ташҡа баҫылған, үҙең әйтергә теләгәнеңә яҡын яҙыулыһын һайлап ҡына алырға ҡала. Уларҙың рус телендә булыуы ла ҡамасау түгел. Үҙеңдең әсәйеңде йә яҡын туғаныңды шул телдә яҙылған открытка менән ҡотлайһың да ҡуяһың инде...

Ысынлап та, хәҙерге баҙар иҡтисады үҙенең "ҡулын" был өлкәгә лә тығып, ундағы төп сифатты - ихласлыҡты юҡҡа сығара бара шул. Ә баҙар иҡтисадының ысын тауар урынына йыш ҡына суррогат, эрзац тотторғанын беләбеҙ. Бында ла шулай: яҡындарыңа үҙеңдең ихлас хистәреңде һатып алынған "ялған тойғолар" теркәлгән текстар менән генә белдерәһең дә ҡуяһың. Интернетта, мәҫәлән, туйҙарға тостар, ҡотлауҙар әҙерләп биреүсе фирмаларҙы еңел генә табырға була: уларға кейәү менән кәләш тураһында мәғлүмәт бирәһең дә, кәрәкле тексты тейешле суммаға һатып алаһың. Был текст мотлаҡ кейәү менән кәләшкә, уларҙың ата-әсәләренә оҡшаясаҡ. Һәр хәлдә, үҙ һүҙҙәре менән ҡотлаған кешенекенән матурыраҡ яңғыраясаҡ, сөнки, беләһегеҙ, беҙҙең арала барыбер ҙә матур итеп һөйләй белгән кешеләр күп түгел. Тик шуныһы әҙерәк хәүефләндерә: адресаттың был һүҙҙәрҙең ҡайҙан килгәнен белеп ҡалыуы, һинең уңайһыҙ хәлгә ҡалыуың да бик ихтимал бит.

Ошондай ихласлыҡтан азат ялған мөнәсәбәттәр ишәйә, һиҙәһегеҙме, йәмәғәт? Мәҫәлән, торлағы, машинаһы булған өсөн генә "мөхәббәт" уйлап сығарып, ғаилә төҙөгән замандаштарыбыҙ ҙа ошо ялғанлыҡ өлгөһөн тарата түгелме? Мине яңыраҡ ишеткән бер ваҡиға аптыратты. Бер-береһен яратып, өйләнергә йөрөгән егет менән ҡыҙ араһында булған был хәл. Ҡыҙға күҙе төшкән икенсе бер Кавказ егете тегегә "Әйҙә, бергә булайыҡ" тип тәҡдим яһаған. Ҡыҙ баш тартҡас, теге аптырап ҡалмаған, уның егетенә мөрәжәғәт иткән. Егете лә баш тартҡас, Кавказ егете уға: "Ҡыҙыңдан баш тартһаң, мин һиңә яңы иномарка бүләк итәм", - тип тәҡдим иткән. Егет күп тә уйлап тормаҫтан, ризалашып, иномаркалы булып киткән. Бахыр ҡыҙыбыҙ бына шулай һемәйеп, әммә намыҫына, мөхәббәтенә тоғро булып ултырып ҡалған... Был ниҙе аңлата: егеттең мөхәббәте ысын булмағанмы, әллә ул үҙ нәфсеһе ҡоломо?

Ихласлыҡтан яҙа барыуыбыҙға тағы бер миҫал. Яңыраҡ таныштарыбыҙ ҡыҙҙарының туйына саҡырҙы. Үҙҙәре ауылдан булһалар ҙа, туйҙы Өфөнөң бер кафеһында үткәрергә булғандар. Хәҙер барыһы ла шулай итә шул. Бер яҡтан, әҙерләнеү, һауыт-һаба йыуыу кеүек мәшәҡәттәре юҡ. Икенсенән, профессиональ тамада саҡырып, мәжлесте ойоштороуҙың яуаплылығын бер аҙ өҫтөңдән төшөрәһең. Әммә... бындай туйҙарҙа, улар нисек кенә оҫта үткәрелмәһен, ниндәйҙер мөһим бер нәмә юғала. Туй ғүмерҙә бер генә була торған ысын байрамға түгел, ә күңел асыуға, кәйеф-сафа ҡороуға нигеҙләнгән шоуға, формаль бер сараға әйләнә. Ата-бабаларҙан ҡалған туй йолалары атҡарыу урынына йәштәрҙе бер туҡтауһыҙ "Әсе!" тип ҡысҡырып үбештереү менән ялҡыта торған мәжлестә ултырыу ҡунаҡтарҙы ла арыта. Ҡоҙалар бер-береһе менән танышып та өлгөрә алмай ҡала. Ошондай "еңел" үткәрелгән туйҙар менән төҙөлгән ғаиләләр еңелерәк һәм йышыраҡ тарҡалмай микән?

Мин килешә алмаған тағы бер күренеш. Туйҙарҙа ла, тыуған көндәрҙә лә хәҙер бүләк урынына аҡса һалалар. Совет осоронда, дефицит булыуға ҡарамаҫтан, кеше бүләккә берәй иҫтәлекле әйбер алырға тырыша, уны алдан уҡ донъя ҡыҙырып әҙләй торғайны. Хәҙер иһә баш ватаһы ла, алдан әҙерләнәһе лә юҡ: аҡса - конвертта, әйтәһе ҡотлау һүҙең - открыткала. Иҡтисадсылар иҫәпләүе буйынса, аҡсалата бирелгән бүләк әйберләтә бирелгәненә ҡарағанда 20 процентҡа отошлораҡ һәм файҙалыраҡ. Әммә, аҡсалата бүләк отошлораҡ, тип уйлағандар бүләктең ихласлыҡҡа төрөп бирелгән мәғәнәһенән мәхрүм ҡалыуын аңлаймы икән? Бүләктең бит ниндәйҙер мәғәнәһе була, ул бүләк итеүсенең уға булған ихлас мөнәсәбәтен, хистәрен сағылдыра. Быйыл Владимир Путин Геннадий Зюгановтың юбилейына В.И.Чапаевтың тачанкала ултырған һынын бүләк итте - быны нимәгә ишаралағанын сырамыҡандайбыҙ. Ә В.Путиндың үҙенә "Артҡа сигенә белмәгән берҙән-бер йән эйәһе", тигән һүҙҙәр әйтеп, гәлсәр крокодил һынын бүләк иткәйнеләр. Эйе, кемдер берәү, Зюганов менән Путинға аҡса бүләк итеп булмай бит инде, тип ҡаршы төшәсәк. Әммә барыбер аңлағанға ишара: аҡсалата бирелгән бүләктең бындай ҡиммәте, мәғәнәһе булмай. Ул тик бүләк итеүсенең битарафлығын ғына сағылдыра, минән бурыс төштө, йәнәһе. Һатып алынған тостарҙың да, радио, телевидение аша белдерелгән ҡотлауҙарҙың да шул уҡ бурыс үтәү өсөн генә икәне аңлашыла. Ысын күңелдән әйтелгән һүҙҙәр, ябай ғына бүләк аҡса менән иҫәпләп булмаҫлыҡ ҡиммәткә эйә барыбер.

Шулай итеп, көнсығыш дәүләттәрендә айырым сәнғәт булған бүләк биреү йолаһы беҙҙә ябай алыш-бирешкә ҡорола башланы, йәғни бөгөн һин миңә күпмелер сумма бүләк иттең, иртәгә уны мин һиңә кире ҡайтарып бүләк итәсәкмен. Тимәк, бүләк - түләп алыуҙың бер төрөнә әйләнә бара. Ошо ла сәбәпсе ихласлыҡтан яҙыуыбыҙға. Кешеләр менән кешеләр, туғандар менән туғандар, дуҫ менән дуҫ араһының һыуыныуы ла ошонан килмәйме ни?..

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТҮРӘЛӘР КИЛМӘҺӘ ЛӘ ҠЫЙЫН

Гәзитегеҙҙең бер һанында "Һабантуйҙар түрәләр өсөн генәме?" тигән мәҡәлә баҫылғайны. Дөрөҫ сырамыта автор. Район кимәлендәге байрамдар булһынмы, республика кимәлендәгеме, улар, ғәҙәттә, ниндәйҙер ҙур түрәнең килеүенә иҫәп тотоп ойоштороla. Элек-электән ата-бабаларыбыҙҙың яҡшы ҡунаҡты оло байрам үткәреп хөрмәт итеүен иҫкә төшөрһәк, хәҙер ҙә халҡыбыҙ йолаһы дауам итә, тип раҫларға урын бар барлыҡҡа. Әммә...

Мәҫәлән, йыл да тиерлек булам республика кимәлендәге иң матур байрамыбыҙҙа - Салауат йыйынында. Ике көн алдан килеп, райондар байрам үтәсәк майҙанға үҙ тирмәләрен ҡуя, уларҙы биҙәй, һый-ризыҡтар әҙерләй. Байрам башланған көндө иһә хужалар, тирмә тирәһенән бер аҙым да китә алмайынса, түрәләрҙең йә баһалама ағзаларының инеп сыҡҡанын көтә. Улар шулай байрамдың үҙен күрмәй ҙә ҡала.

Район һабантуйҙарында ла шул уҡ хәл. Йыйылған халыҡ райондың үҙенең етәкселәре менән ошонда ғына күҙмә-күҙ аралашыуға, күрешеүгә, хәл-әхүәл белешеүгә өмөт итә ала. Тик ул етәкселәр ҙә ҡунаҡҡа килгән ҙур түрәләр тирәһендә бөтөрөлә, хатта эргәһенә килеп сәләм биргәндәргә йүнләп яуап ҡайтарыр форсаты ла булмай.

Әйткәндәй, оло байрамдарға түрәләр килмәһә лә ҡыйын икән. Июль урталарында Күгәрсен районында "Байыҡ" балалар конкурсы үтте. Республиканың мәҙәниәт донъяһындағы иң сағыу, иң әһәмиәтле сара тип ҡабул итәм мин был бәйгене. Әммә был юлы унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәкселәре, бер нисә район хакимиәте башлыҡтарынан башҡа түрәләрҙе күрмәнек. Иң аптыратҡаны, унда республиканың мәҙәниәт министры булманы.

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан биләмәһендә файҙалы ҡаҙылмаларҙы законһыҙ үҙләштереү осраҡтарын асыҡлау буйынса рейдтар бара. Йыл башынан алып БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы инспекторҙары тарафынан Илеш, Миәкә, Дүртөйлө, Мәләүез, Тәтешле һәм Саҡмағош райондарында ошондай 96 осраҡ асыҡланған, физик һәм юридик шәхестәргә һалынған штраф күләме 6 млн һум тәшкил иткән.

✓ Украина ҡасаҡтарына ярҙам итеү өсөн Башҡортостан юлдаш каналы үткәргән "Беҙ бергә" мәрхәмәтлек марафонында 270 мең һумлап аҡса, 2 млн һумлыҡ әйберҙәр йыйылған. Гуманитар йөктә гигиена әйберҙәре, кейем-һалым, канцтауарҙар, мәктәп әйберҙәре тупланған. СМС-акция аша аҡса йыйыу дауам итә. Быының өсөн кеҫә телефонынан 3443 һанын йыйып, "Беҙ бергә" (русса) тигән һүҙҙәрҙе яҙырға кәрәк. СМС хаҡы 50 һум.

✓ Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжы урта мәктәптең 4-се класын тамамлаған 10-11 йәшлек малай һәм ҡыҙҙарҙы уҡырға саҡыра. 27 августа махсус комиссия "Балет сәнғәте" бүлегенә уҡырға инергә теләүселәрҙе ҡабул итәсәк. Ҡабул итеү һынауҙары өс турҙан торасаҡ. Беренсе турҙа һөнәр өсөн кәрәкле сифаттар баһаланһа, икенсе тур медицина комиссияһынан торасаҡ. Иң тәүҙә буласаҡ бейеүселәргә хирург менән кардиологтың ыңғай баһаламаһы кәрәк буласаҡ. Өсөнсө турҙа ижади һәләттәр тикшерелә. Шулай уҡ дөйөм предметтар буйынса тест була.

✓ Беренсе ярты йыллыҡта Өфөлә эшһеҙҙәр һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 583 кешегә (8,9 процент) кәмегән. Йәғни Өфөнөң мәшғүллек үҙәгендә 5968 эшһеҙ кеше теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта үҙәктә 22 мең вакансия бар. Уларҙың 83 проценты - эшсе һөнәрҙәре буйынса. Эшһеҙҙәрҙең 60 проценты юғары һәм урта профессиональ белемле һәм инженер-техник вазифаларға дәғүә итә. Уларҙы эш биреүсе тәҡдим иткән эш хаҡы ла ҡәнәғәтләндермәй.

✓ Быйыл алты айҙа Өфөлә 8481 бала тыуған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 6,7 процентҡа күберәк. Ярты йылда халыҡтың тәбиғи артыуы 2109 кеше тәшкил иткән. Мәғлүмәттәр буйынса, яҡын йылдарҙа мәктәпкәсә йәштәге балалар һаны артасаҡ. Әлеге динамика буйынса иҫәпләһәк, 2020 йылда уларҙың һаны 37 меңгә барып етәсәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: Өфө халыҡ һаны буйынса Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында 11-се урында бара - 2014 йылдың башына баш ҡалала 1,1 млн кеше йәшәй ине.

КӨНАУАЗ

# АЛМА, ИТ, ҺӨТ...

## бары тик үҙебеҙҙеке!

**Көнбайыш Рәсәйгә ҡарата санкциялар индереүҙе бер ғәҙәткә әйләндерҙе, буғай. Исемлек йыш тулылана һәм унда Рәсәй сәйәсмәндәре, эшҡыуарҙары, төрлө ойошма һәм предприятиелар, банктар ҙа бар. Бындай тупаҫ мөнәсәбәткә оҙаҡ түҙгәндән һуң, Рәсәй яуап биреүҙе кәрәк тип тапты. Ил хөкүмәте, Владимир Путин ҡушыуы буйынса, Евросоюз илдәренән, АҠШ, Австралия, Канада һәм Норвегиянан Рәсәй биләмәһенә индерелмәҫкә тейешле сит ил тауарҙары исемлеген раҫланы. Шулай уҡ ил башлығы ҡарарына ярашлы, Украина авиакомпанияларының транзит рейстарына Рәсәй һауаһы территорияһында осоу тыйылды.**

Ағымдағы йылдың 7 августынан һанап үтелгән илдәрҙән Рәсәйгә һыйыр ите, сусҡа ите, балыҡ, йәшелсә һәм емештәр, сыр һәм һөт аҙыҡтары индереү туҡтатыла. Сикләүҙәр бер йылға иҫәпләнгән. Ләкин, премьер-министр Дмитрий Медведев белдереүенсә, "әгәр ҙә Көнбайыш партнерҙар хеҙмәттәшлек итеү буйынса конструктив мөнәсәбәт күрһәтһә, Рәсәй был ваҡытты киренән ҡарарға әҙер". Шул уҡ ваҡытта балалар өсөн аҙыҡҡа һәм Рәсәй граждандары сит илдә үҙҙәре һатып алған тауарҙарға сикләү ҡағылмай.

Рәсәй Хөкүмәте Көнбайышҡа ҡарата тағы ла бернисә яуап һүҙе әҙерләй. Мәҫәлән, Украина авиакомпаниялары өсөн ҡулланылған саранын Европа һәм Америка һауа компанияларына ҡарата ла ҡулланылыу мөмкинлеге юғары. Шулай уҡ Европа авиакомпанияларының даими һәм чартер рейстарына Рәсәй һауа киңлегенә инеү һәм сығыу нөктәләрен һәм Транссебер маршруттын ҡулланыуҙа үҙгәрештәр индереү тураһында ла мәсьәлә тикшерелә.

Эксперттар фекеренсә, был ҡарар Рәсәй өсөн тик файҙаға ғына. Тәү сиратта, ил аграрийҙарына үҙ тауарҙарын ҡулланыусыларға алып барып еткереү өсөн юл асыла. Шулай уҡ ҡулланыусылар ҙа төрлө зыянлы өҫтәлмәләр ҡушылмаған сифатлы аҙыҡ-түлек һатып алыу мөмкинлеге ала. Ләкин халыҡты исемлеккә индерелгән аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыу мөмкинлеге борсой. Был йәһәттән, ил Хөкүмәте "хәл контролдә тотоласаҡ", тип белдерҙе. Ауыл хужалығы, Иҡтисади үҫеш, Сәнәғәт министрлыҡтарына һәм Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәтенә һатыу нөктәләре вәкилдәре менән эште яйға һалырға һәм килеп тыуған хәлдән файҙаланып ҡалырға тырышҡан алыпһатарҙар эшмәкәрлеген ҡырҡа туҡтатырға ҡушылды.

Евросоюз санкцияларҙы нигеҙһеҙ тип һанай. Көнбайышта уларҙы ВТО (Бөтә донъя сауҙа ойошмаһы) аша ғәмәлдән сығарыу тураһында һүҙҙәр ҡуйыра. Рәсәйҙең дә тап ошо юл менән үҙенә ҡарата нигеҙһеҙ индерелгән санкцияларҙы юҡ итеү тураһында талап итеү мөмкинлеген улар уйламай шикелле. Йәки уйларға теләмәй. Хөкүмәт башлығы: "...партнерҙарыбыҙҙың иҡтисади прагматизмы йәмһеҙ сәйәси уйҙарынан өҫтөнлөк алыр, тип ихлас ышанам", - тине. Бығаа премьер-министр ғына түгел, ә бар Рәсәй халҡы ышана. Ни тиһәң дә, был санкциялар үҙ артынан аҙыҡ-түлек менән алыш-биреш итеүҙе генә туҡтатып ҡалмай, күпкә тәрәнерәк, хәүефлерәк һәм ҡырҡыурaҡ эҙемтәләргә әйәртергә мөмкин.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ТАЯҠ - ИКЕ БАШЛЫ,

## миҙал ике яҡлы була...



(Башы 1-се биттә).

Әлеге ваҡытта Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк штабы ошо мәсьәләне үҙенең ҡуҙәтеүе аҫтына алды. "Башинформ" агентлығында үткән бәхәс ҡоронда улар был мәсьәләнең дәүләт власы органдарына һәм бизнесҡа ғына ҡағылмауын, ә үҙҙәренең тәҡдимдәрен йәмәғәт ойошмалары ла индерергә тейешлеген билдәләне. Икенсе мөһим мәсьәлә - Башҡортостанда производство торошоноң мониторингы буйынса эш башланған һәм ул халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү мөмкинлеген асыҡларға тейеш. Шулай уҡ аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың ҡапыл артыуына ла юл ҡуйырға ярамай.

БР Ауыл хужалығы министры Николай Коваленко белдереүенсә, республика күпселек аҙыҡ-түлек төрө буйынса үҙ-үҙен тәьмин итә ала. "Сит ил аҙыҡ-түлеген индереүҙе тыйыуҙы беҙ аҙыҡ-түлек етештереү күләмен арттырыу һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә сығыу мөмкинлеге тип ҡарайбыҙ", - ти ул. Бөгөнгө хәл-тороштан сығып фекер йөрөткәндә, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәр сусҡа ите, һарыҡ ите, йылҡы ите, шулай уҡ һөт, һөт ризыҡтары, йәшелсә менән баҙарҙы тултырыу мөмкинлегенә эйә. Тиҙҙән магазин кәштәләре үҙебеҙҙә етештерелгән аҙыҡ-түлек менән тулыланасаҡ. Ләкин уларҙың сифаты юғары булып ҡаласаҡ. Сөнки етештереүселәр урындағы сеймалдан премиум-класс сифатына тап килгән аҙыҡ-түлек сығарасаҡ. Мәҫәлән, Бәләбәйҙә "Бельфор", "Бельстер" ҡаты сырҙарын сығарыуҙы үҙләштергәндәр ҙә инде. Әйткәндәй, милекселе сит ил инвесторы булған предприятиелар республикала эшләүен артабан да дауам итәсәк. Сөнки эмбарго бары тик продукцияға ғына ҡағыла, ә предприятиеларға түгел. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда малсылыҡ буйынса эре инвестпроекттар тормошҡа ашырыла. Килеп тыуған хәл-торош инвесторҙарҙан эште тиҙерәк тамамлауҙы талап итә. Шундай төҙөлөштәрҙән Бүздәк районындағы "Дамате" агросәнәғәт холдингын һәм Ишембай районындағы "Асдор" компанияһы төҙөгән комплексты миҫал итеп килтерергә мөмкин. Улар йылына 48-50 мең тонна һөт эшкәртеү мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Шулай уҡ республикала "500 ферма" республика программаһы ла тормошҡа ашырыла. Унда 178 ферма ҡатнаша, йыл һуңына тиклем был һан 230-ға етеүе мөмкин. Тулыр-тулмаҫ өс йылда 103 ферма замансa йыһазландырылып, уларҙа һөт етештереү - 8, һыйырҙарҙың продуктлылығы 9 процентҡа артҡан. Модернизациялауға тиклем ауыл хужалығы предприятиелары уртаса 9 процент юғары сифатлы һөт алһа, бөгөнгө был күрһәткес 46 процент тәшкил итә.

Ҡошсолоҡҡа килгәндә, әлегә тиклем ҡаҙ һәм өйрәк ите Франциянан, Чехиянан һәм Венгриянан индерелһә, бөгөн "Благовар" ҡоҡомло ҡошсолоҡ заводы яңы ҡош-ҡорт һуйыу цехы төҙөй. Ул бер сменала 1,5 миллион, икесменала 2,5 миллион ҡош-ҡорт эшкәртеү мөмкинлеге бирәсәк. Тимәк, фермерҙар һәм шәхси хужалыҡтар менән берләшкәндә, Башҡортостан был өлкәлә сит ил продукцияһын үҙенекенә уңышлы алмаштыра аласаҡ. Шулай уҡ республиканың алдағы 2-3 йылда ҡош итен сит өлкәләргә сығарыу мөмкинлеге лә бар. Сөнки М. Ғафури исемендәге Башҡортостан ҡошсолоҡ комплексы быйыл ҡүркә ите етештереүҙе тағы ла 10 мең тоннаға арттырып, 30 мең тоннаға еткермәксе. Бройлер тауыҡтарының итен етештереү күләмен Урал-Волга буйы агросәнәғәт төркөмөнә ингән предприятиеларҙың, шулай уҡ Әлшәй районындағы "Башҡорт бройлеры" проекты сиктәрендә арттырыу көтөлә. Республиканың бәләкәй эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәре лә был йүнәлештең үҫешенә ҙур өлөш индерә.

Сусҡасылыҡ өлкәһендә инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу республикала өҫтәмә рәүештә 70 мең тонна ит етештереү мөмкинлеген бирәсәк. Әлеге ваҡытта "Башҡортостан ит компанияһы" яуаплылығы сикләнгән ширҡәте заманса сусҡа комплекстарын төҙөү буйынса проекты тормошҡа ашыра. Быйыл предприятие 5 мең тонна ит етештерһә, беренсе сираттың проект ҡеүәтенә сығыуы менән етештереү күләме 42 мең тоннаға етәсәк. Икенсе сират ҡеүәтте тағы ла 28 мең тоннаға арттырасаҡ. Бынан тыш, "Рощинский" совхозының, "Максимовский" агросәнәғәт комплексының етештереү ҡеүәтен арттырыу мөмкинлеге ҡарала. Ә инде Благовар районындағы селекция-генетика үҙәге сусҡасылыҡ предприятиеларын юғары сифатлы нәҫел хайуандары менән тәьмин итеү мөмкинлеге бирәсәк.

Һыйыр малы итенә килгәндә инде, республика был йәһәттән тулыһынса тәьмин ителгән. Бөгөн Башҡортостанда ит мәсьәләһе тоҡомло малсылыҡты үҫтереү буйынса программа менән тормошҡа ашырыла, эре ауыл хужалығы предприятиелары менән бер рәттән, фермер хужалыҡтарына ла дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Йыл һайын республикала 230 мең тонна ит етештерелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ашау өсөн йәшәмәйем, йәшәү өсөн ашайым, тигән берәү. Элегерәк иһә, икмәк булһа, йыр ҙа була, ти торғайнылар. Шуның кеүек, тамағың туҡ булһа, башҡа яңы, матур фекерҙәр ҙә килә. Тимәк, иң мөһиме - халҡыбыҙ аҫ булмаһа, яңы технологиялар ҙа уйланылыр, заманса ҡоролмалар ҙа эшләнер. Юҡһа, ярымфабрикат ризыҡтар ашап, ярым һәм тулыавтомат техникаһы менән эш итеп, бигерәк ялҡаулана башлағайныҡ, шикелле. Ә ялҡаулыҡ, мәғлүм булыуынса, прогресты алға этәрә. Күрәһең, шул ваҡыт етте...**

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө Ҡала мәҙәниәт һарайы вокал, хореография, театр кеүек үҙешмәкәр коллективтарға, спорт һәм мәктәпкәсә йәштәге мәғариф төркөмдәренә ағзалар йыя. Түңәрәктәргә 25 августан 5 сентябргә тиклем 16 сәғәттән мәҙәниәт һарайының беренсе ҡатында яҙылырға мөмкин буласаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: 284-28-50.

✓Дим районының Баланово урман зонаһында велосипед юлының икенсе сираты төҙөлә башланы. Юлдың оҙонлоғо 800 метр буласаҡ. Әлеге көндә Өфөлә 25 км велосипед юлы бар. Бындай юлдарҙы Мәжит Ғафури паркында, "Олимпик-парк"тан "Аҡбуҙат" ипподромына тиклемге арала, СССР-ҙың 50 йыллығы, Академик Королев, Йәштәр бульвары урамдарының, Октябрь проспектының айырым өлөштәрендә лә төҙөү планлаштырыла.

✓"Өфө-Арена"ла башланған "Башҡортостан Республикаһы кубогы"нда КХЛ-дың иң көслө командалары - "Салауат Юлаев", "Атлант" (Мәскәү өлкәһе), "Динамо" (Рига), "Металлург" (Магнитогорск), СКА "Санкт-Петербург" ҡатнаша.

✓Рәсәй футболы Премьер-лигаһының "Өфө" һәм Мәскәүҙең "Динамо" командалары араһындағы уйыны Өфөнөң "Динамо"стадионында булды һәм ул 0:2 иҫәбенә беҙҙекеләрҙең еңелеүе менән тамамланды. "Өфө"ләр сираттағы уйынын бөгөн Санкт-Петербургта "Зенит" менән үткәрә.

✓Йыл башынан әлеге көнгә тиклем Башҡортостанда 177 бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәк менән зарарланыу осрағы асыҡланды. Уларҙың 93-ө Өфөлә теркәлгән. Шулай уҡ вируслы талпан энцефалиты менән ауырыу осраҡтары ла былтырғы менән сағыштырғанда арта төшкән. 1 апрелдән алып БР Гигиена һәм эпидемиология үҙәгендә 7668 талпан тикшерелгән, уларҙың 439-ында вирус булыуы асыҡланған.

✓23 августа Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында "Бөйөк дала" республика башҡорт рок-фестивале үтәсәк. Маҡсаты - милли рок мәҙәниәте традицияларын популярлаштырыу һәм үҫтереү. Ойоштороусылар әйтеүенсә, тамашасыларға музыкаль сығыштарҙан тыш, парашютсылар шоуы, ут менән шоу, байкерҙар сығышы тәҡдим ителәсәк. Өсөнсө тапҡыр үткәрелгән был сара 2011 йылда башҡорт рок музыкаһына нигеҙ һалыусы "Рух" төркөмөнә бағышлап үткәрелә башлағайны.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ултырышында районды "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы ойошторолдо. Ауыл биләмәләре башлыҡтары, төрлө йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашҡан сарала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаилә, әсәлек, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе Гөлфиә Янбаева сығыш яһаны һәм республикабыҙҙың көньяҡ райондарында киң ҡолас йәйеп эшләй башлаған "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһының эш тәжрибәһе менән таныштырҙы.**

# ЫСЫН АҒИНӘЙҘӘР БУЛҒАН,

## әле лә барҙар...

Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы билдәләүенсә, бөгөн ауылдарҙа әҙәпле, тотанаҡлы, йәшенә лә, олоһона ла ихтирамлы, иғтибарлы, кеселекле һәм кешелекле, үҙенән өлкәндәргә лә һүҙе үткән, кәңәше береккән ағинәй дәрәжәле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ йәштәрҙе тәрбиәләү, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, телен, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалыу бурысын үҙ иңенә ала. Беҙҙең арала ил, республика яҙмышын ҡайғыртыр битараф булмаған ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар һәр ваҡыт булды, барҙар. Тик һуңғы йылдарҙа улар йәмәғәт эштәренә бик ҡыҫылып бармайынса, башлыса өйҙәренә бикләнде. Әммә бөгөн улар юғарынан йә урындағы етәкселәр ҡушыуы буйынса түгел, ә үҙ белдектәре менән, намыҫ ҡушыуы буйынса үҙ тауыштарын ишеттерә башланы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәр район, ҡала ҡоролтайҙары янында тап шундай кешеләрҙе аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙарына берләштереү маҡсатын ҡуя ла инде. Республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарында бындай ойошмалар бик әүҙем эшләп китте һәм дәүләт структураларына оло ярҙамсы-таяныс булып тора.

- Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла райондары ағинәйҙәре тәжрибәнән һеҙҙең төбәккә лә күсерәйек, был эште Асҡындан башлайыҡ, тигән тәҡдимде шатланып ҡабул иттек, - тине үҙ сығышында Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Фуат Фәтхуллин. - Беҙҙең ағинәйҙәр был хәрәкәт тураһында күптән ишетеп, үҙҙәре үк ошондай ойошма ойоштороу тураһында тәҡдим итеп йөрөй ине инде... Ҡашҡа ауылынан килеүсе әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, биш бала әсәһе Сания Сәлихова, район гәзиттәренең баш мөхәррире Фәйрүзә Юнысова, район Советы секретары Рима Нәбиуллина, пенсионер-уҡытыусы Йәриә Йәләлетдинова Фуат Нурулла улының һүҙҙәрен йөплән, был ойошманың үҙҙәре көҙәллаған өлгөһөн һөйләп тә ишеттерҙе.

- Бала саҡ хәтирәләренән сығып, үҙемдең инәй, апай, еңгәләрҙе ысын ағинәйҙәр булғандар икән, тип күҙ алдыма килтереп ултырам, - тип һүҙ башланы Йәриә Йәләлетдинова. - Улар шул тиклем ҡупшы, бөхтә итеп кейенер, ҡолаҡтарын, муйындарын ҡаплаған ап-аҡ ситса яулыҡ ябыныр ине. Һөйләгән һүҙҙәре ипле, тыйнаҡ булды. Уларҙың әйткәненә бер кем ҡаршы килмәне, кәңәштәренә ҡолаҡ һалды. Бер-береһенә хәл белешергә йөрөгәндә бер ҡасан да гәйбәт һөйләп ултырманылар. Беҙ, балалар, берәй ағинәйҙең килеүен көтөп алып, уның аҡыллы һүҙҙәрен йотлоғоп тыңлай торғайныҡ. Ошо рәүешле улар балаларҙы тәрбиәләгән, уларға халыҡ аҡылын һеңдереп үстергән. Эйе, оло ағинәйҙәрҙә - тормош тәжрибәһе. Улар халыҡ педагогикаһы өлгөһөндә тәрбиәләнгән быуын. "Оло кешенең юлын ҡыйма; ҡояш байығас, һыуға йөрөмә; атайҙы "атай" тип әйт, инәйҙе "инәй" тип әйт; иленә хеҙмәт ит, үҙеңде лә хөрмәт ит", тип өйрәтте беҙҙе өләсәйҙәр...

- Был сарала ҡатнашҡан һәр кем үҙ халҡының ысын патриоты. Әле ил-йортобоҙҙа бындай илһөйәрҙәр, йәш быуынға халҡыбыҙҙың ҡиммәтле ҡомартҡыларын тапшырыр ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар бар һәм улар тарафынан киләсәк быуын, йәшәйешебеҙ тураһында хәстәрлек күрелә икән, тимәк, халҡыбыҙ артабан да үҙҙен һаҡлап ҡаласаҡ. Бергә булғанда беҙҙең ниндәй ҙур көс хасил итеүебеҙҙе бөгөн тағы ла ныҡыраҡ аңланыҡ, - тине район Советы секретары Рима Нәбиуллина һәм ошо йыйылышта уҡ ағинәйлек танытмаһы алған ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотлап, изге эштәрендә уңыштар теләне.

Сара һуңында Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе итеп бер тауыштан абруйлы ағинәй Йәриә Йәләлетдинова һайланды.

- Йәмәғәт эше бик ҙур күңел көсө талап итә. Беҙҙең хәрәкәткә яуаплы, рухлы ҡатын-ҡыҙҙар, әсәйҙәр, өләсәйҙәр ҡушылыр, тип ышанам. Һәр ауылда ысын ағинәй һәм аҡһаҡалдарҙың һүҙе һәм шәхси өлгөһө бик фәһемле. Халҡыбыҙҙың быуаттар буйына бөртөкләп йыйылған ғөрөф-ғәҙәттәрен, матур йолаларын, аҡыл ғилемен йәштәргә еткереүсе сылбыр булырға һәм халыҡ педагогикаһына таянып, йәштәрҙе тәрбиәләргә тырышырбыҙ, - тип, күрһәтелгән ышаныс тиңә аҡларға ынтылышын белдерҙе Йәриә Ғафур ҡыҙы.

Шулай итеп, йыйылышта ҡатнашыусы ағинәйҙәр ауыл тормошон йәнләндереү, уға ҡот өҫтәү, йәш быуынды тәрбиәләү, башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен һаҡлау, эскелеккә ҡаршы көрәшеү, ауылдаштарын "Айыҡ ауыл" акцияһында ҡатнашыуға йәлеп итеү, экологик өмәләрҙе әүҙемләштереү, аҙ тәьмин ителгән, күп балалы ғаиләләрҙең, пенсионерҙар, һуғыш һәм хәрби хәрәкәт ветерандарының, ҡараусыһыҙ ҡалған ҡарттарҙың социаль-донъяуи проблемаларын хәл итеүгә булышлыҡ күрһәтеү, дини йолаларҙы өйрәнеү, кеүек бурыстарҙы йөкмәп, уларҙы яҡын арала тормошҡа ашыра башларға тигән ашҡыныу менән таралышты.

**Наилә ИМАЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӨФӨ ӨҪКӘ СЫҒЫРМЫ?



**Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙең ИТАР-ТАСС Мәғлүмәт агентлығында Өфөнөң XI Бөтөн донъя уйындарында ҡатнашыу өсөн тәҡдим иткән ғариза китабының исем туйын үткәрҙе.**

Ул федераль киң мәғлүмәт сараларына республиканың спорт өлкәһендәге ҡеүәте хаҡында һөйләне, халыҡ-ара спорт форумына әҙерлек буйынса нимәләр эшләнеүе менән таныштырҙы, баш ҡала еңеү яулаған осраҡта уйындарҙың уңышлы үтәсәгенә ышаныс белдерҙе. "Яҡынса күҙаллауҙар буйынса, беҙҙә талап ителгән 25 ҡоролманың 21-е бар, - тине республика башлығы. - Тағы ла дүрт объект ҡына төҙөргә ҡала. Был ярыштар түбән бюджетлы, демократик, әммә бик абруйлы. Шуға ла беҙ бөгөн ошо йүнәлештә эшләйбеҙ, әҙерлекте киң йәйелдерәбеҙ".

## БЕЙЕК ЫҘМАЛЫ...



**Өфөнөң Октябрь проспектында 42 ҡатлы бейек йорт төҙөләсәк. "Дүрт миҙгел" тигән атама алған торлаҡ комплексы территорияһының дөйөм майҙаны 75 мең квадрат метр буласаҡ.**

Унда торлаҡ йорттар һәм офистар урынлашасаҡ. Шунда уҡ супермаркет, фитнес клубы, балалар баҡсаһы, медицина, сауҙа үҙәктәре, В+ класындағы бизнес үҙәге буласаҡ. Йорт ихатаһында ял итеү зонаһы, балалар майҙансығы, саф һауала йөрөү юлдары эшләнәсәк. Төҙөлөштөң беренсе сираты 2017 йылдың беренсе кварталында тапшырылырға тейеш, ә инде икенсе сиратын шул уҡ йылдың һуңында тапшырыу планлаштырыла. Бейек йорт төҙөлөшө барышында уның эргәһендәге биш ҡатлы "хрущевка"ларҙағы милекселәр яйлап икенсе фатирҙарға күсереләсәк һәм был йорттар урынына күп ҡатлылары төҙөләсәк.

## ЙӘШЕЛ ҠАЛҠАН

**Өфө икенсе тапҡыр киң масштаблы "Йәшел Рәсәй" Бөтөн Рәсәй экологик өмәһе" акцияһына ҡушылды.**

Был сара 30 августа Рәсәй ҡалаларының экологик хәл-торошон яҡшыртыу маҡсатында ҡайһы бер төбәктәрҙә үтәсәк. Акцияға халыҡтың иғтибарын йәлеп итеү өсөн төрлө конкурстар ҙа ойоштороло - иң күп ҡатнашыусы (төбәктәр һәм предприятиелар араһында), өмәне үткәреү буйынса иң яҡшы төбәк программаһы, өмәлә иң яҡшы балалар йырын башҡарыусы һәм иң яҡшы хор, шулай уҡ иң үҙенсәлекле флешмоб. Конкурстарҙы үткәреү тәртибе менән "Зеленая Россия" Дөйөм Рәсәй экологик хәрәкәтененң сайтында танышырға мөмкин. Былтыр акцияла 77 төбәктән 2,5 миллион самаһы кеше ҡатнашҡан. Башҡортостанда 6 мең самаһы кеше 339 тонна сүп-сар йыйған.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Авитаминоз

❖ 1 ҡалаҡ мышар емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡара ҡарағатҡа 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә, 5 минут дауамында талғын утта ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, термосҡа 2 сәғәт төнәтергә. Көнө буйы ашарҙан алда ярты стакан эсергә.

❖ 0,7 кг иҙелгән ҡара ҡарағатҡа 0,5 л һыуытылған ҡайнар һыу ҡойорға, 6 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Ошо төнәтмәне 2 көн эсендә эсеп бөтөргә кәрәк.

### Гастрит, ашҡаҙан-эсәк тракты сирҙәре

Яңы ғына һығып алынған 2-3 ҡалаҡ картуф һутына ярты балғалаҡ бал ҡушып, көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан эсергә.

Ашҡаҙанда, эсәктә сей яра булғанда төп дауаға ҡушып 5 йәки 7 көн иртән ас ҡарынға 1 ҡалаҡ, йәки ашар алдынан 1-әр балғалаҡлап өс тапҡыр һығанаҡ майы эсһәң, тиҙерәк йүнәләһең.

### Һипкелдәр

❖ 2 ҡалаҡ ваҡланған бәпембә сәскәләренә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һауытта 30 минут тоторға, һөҙөргә. Иртәле-кисле йыуыныу өсөн ҡулланырға.

❖ Ҡауын да һипкелдәр һәм биттәге таптарҙы яҡшы бөтөрә. Бының өсөн ҡауынды бер нисә минут бешереп, һөҙөп, битлек итеп ҡулланырға. Ҡалған һыуы менән йыуынырға, ә ҡабығын тиренең проблемалы өлөштәренә һалырға була.

### Ангина

❖ 100 мл кишер һутына 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә, 1:1 күләмендә йылы һыу ҡушырға. Ангина ваҡытында көнөнә бер нисә тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

### Анемия

❖ Бал ҡанды тимер менән байыта, балдың төҫө ни тиклем ҡарараҡ булһа, шул тиклем файҙалыраҡ. Ныҡ бешкән бананды 1 ҡалаҡ бал менән бутап, көнөнә 1-2 тапҡыр ашарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Күпселек эшҡыуарҙарҙың тап алып-һатыу юлында икәнен күреүе ауыр түгел. Ә бына халыҡты хеҙмәтләндереү өлкәһендә - торлаҡ-коммуналь, юридик, туризм, ял һәм һаулыҡты нығытыу буйынса үҙ эшен асырға теләүселәр күренмәй.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАҘ ӨМӘҺЕ

**Ҡаҙ өмәһе - ҡаҙҙарҙы күпләп көткән йорттарҙа йыш башҡарыла торған йолаларҙың береһе булып тора. Бигерәк тә Дим буйында ултырған ауылдарҙа борондан ҡаҙҙы күп көткәндәр. Ҡаҙ өмәһенә ҡаҙ йолҡа белгән сосораҡ ҡатын-ҡыҙ - ҡыҙ туғандар, күршеләр саҡырыла. Ҡаҙҙы йорт хужаһы үҙе йәки өлкән улдары сала.**

Ҡаҙ өмәһенә барыһы ла теләп, матур кейемдәрен кейеп йөрөгән. Һәр эштә оҫта ҡуллы ғына түгел, күңел аса белгән дә кешеләргә өҫтөнлөк бирелгән. Өмә иртә таң менән, сәй эсеүҙән башланған. Төшкә ҡарай, ҡаҙҙар йолҡолоп бөткәс, түшкәләрен көйәнтәгә элеп, йылға буйына мәкегә йыуырға алып төшкәндәр. Әгәр ҙә йылға алыҫ булһа, унда сигелгән таҫтамал, таҫмалар менән биҙәлгән арба йә санаға ултырып барғандар. Өмәлә көнө буйы йырмоң яңғырап торған.

Хужабикә өмәселәр йылғанан ҡайтҡансы табын әҙерләп тора. Көньяҡ-көнбайышта ҡаҙ майында тары бутҡаһы, ҡоймаҡ бешерәләр. Сәйгә яңы бешкән икмәк, һөт ризыҡтары, тәм-том ҡуялар. Сәй эскәс, өмәлә ҡатнашыусылар өйҙәренә таралыша. Кисен уларҙы был йортта ҡаҙ ите бешереп, ҙур табынға көтәләр. Көньяҡ-көнбайышта ҡуйы итеп аш бешерәләр, көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарҙа итте һалмаға һалалар. Ҡаҙ түшкәһен 12 өлөшкә бүлеп, нисек эшләүенә ҡарап, һәр кемгә бүлеп сығалар.

*Был ҡаҙ ҡайҙа ултырған,*
*Бото - өрөп тултырған?*
*Өлөшөң ҡулыңдан төшмәһен,*
*Иппәп!*

*Ауыҙың бешмәһен!* - тип һамаҡлағандар. Ҡыҙҙарға, ҡанатланып өйөңдән тиҙерәк осоп сыҡ, тип, ҡанат, өлкән ҡатындарға бот биргәндәр. Ҡаҙ бото кемгә эләгеүен билдәләү өсөн, кем элек, тип һорағандар. Кем дә кем: "Мин!" - тип ҡысҡыра, уны: "Ҡаҙ шикелле бейеп тор!" - тип бот менән һыйлағандар. Ҡаҙҙың башы - аҡыллы ҡатын-ҡыҙға, ҡойроғо - яҡшы хужабикәгә эләккән. Ҡаҙ өмәһенә ҡайһы берҙә ҡаҙ итенән бәлеш бешергәндәр, унда иттән тыш ҡаҙҙың башын, муйынын, тәпәйҙәрен, ҡанаттарын, бүтәрләүен, бауырын һалалар. Сәйгә ҡаҙ майында ҡоймаҡ ҡоялар, уны киләһе йылда ҡаҙ унһын өсөн бөткәнсе ашарға кәрәк. Бауырһаҡ, ҡаймаҡ, шәкәр, бал менән сәй, буҙа, ҡымыҙ менән өмәселәрҙе һыйлағандар.

Ҡаҙ өмәһе, һуғым ашындағы табындың муллығы, шулай уҡ был табындан һуң яуап ашына саҡырыу йолаһы киләсәк муллыҡҡа нигеҙ булып тора, тип иҫәпләнгән. Ҡаҙ мамығы һәм ҡауырыйы менән дә төрлө ырымдар һаҡланған. Мәҫәлән, ҡаҙ мамығына, һыҙламаһындар өсөн, ҡул-аяҡтарҙы батырып алғандар. "Беләгең һимеҙ булһын, күңелең наҙлы булһын, йортоң ҡаҙлы булһын!" тип теләк әйтелгән. Кисен ҡояш байығанда йылғаға барып, иң матур ҡауырыйҙарҙы ағыҙғандар. Был киләһе йыл да ҡаҙ уңыуын теләү менән бәйле. "Ҡаҙ булып ҡайтығыҙ!" тип теләк тә теләгәндәр.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ФЕКЕР ТӨЙӨНӨ*

# ЭШҠЫУАРЛЫҠ НИҢӘ ЙӘЛЕП ИТМӘЙ?



**Юғары менеджмент мәктәбе белгестәре ике мең рәсәйленән һорау алыу ойошторған. Һөҙөмтәлә 2013 йылда үҙ эшен ябыусылар һанының 2012 йыл менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк булыуы асыҡланған. Яуап биреүселәрҙең 40 проценты эшҡыуарлыҡтың килемһеҙ булыуын билдәләгән. Шул уҡ ваҡытта үҙ эшен аса алмауҙың сәбәбен аҡса юҡлыҡҡа һылтаусылар кәмегән. Тимәк, бөгөнгө көндә капитал юҡлығы үҙ эшеңде башлап ебәреүгә тотҡарлыҡ түгел. Шулай ҙа халыҡ эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә атлығып тормай. Сөнки бөгөнгө баҙар иҡтисады шарттарында уңышлы бизнес алып барыуға улар ышанмай. Был тап ошо һорау алыу барышында асыҡланған.**

## Күптәр хыяллана хыялланыуға

Ни тиһәң дә, эшҡыуарлыҡ һәм уның үҫеше һәр ваҡыт актуаль темаларҙың береһе, сөнки тап ул иҡтисадты алға әйҙәүсе көс булып тора. Ә һандарға күҙ һалһаң, был көстөң кәмеүе, етерлек булмауы асыҡ күренә. Был хаҡта бар иҡтисад белгестәре яу һала, әммә әлегә хәлде төҙәтерлек саралар күрелгәне һиҙелмәй. Бер ҡарағанда, дәүләт эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн бар яҡлап ярҙам итә кеүек, әммә ни өсөн эшҡыуарҙар һаны артмай һуң? Ни өсөн халыҡ ялланып эшләүҙе, йә булмаһа бөтөнләй эшләмәүҙе хуп күрә? Ошо һорауҙарға яуап бирергә тырышып ҡарарға ине был мәҡәләмдә.

Күптәр үҙ эшен асырға хыял итә. Ләкин ысынбарлыҡта күптәребеҙ, эш хаҡы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, ялланып эшләүҙе ҡулай таба. Уға тотороҡлолоҡ, ай һайын ниндәйҙер күләмдә эш хаҡы алыу бойондороҡло булыуҙан ҡәҙерләрәк. Сөнки эшҡыуарлыҡ һәр ваҡыт билдәһеҙлек бизмәнендә: бөгөн уңһаң, иртәгә туңырға мөмкинһең. Эшҡыуарлыҡ - ул аҡыл һәм күңел көсөргәнешлеген үтә ныҡ талап иткән шөғөл. Нимә булһа ла, яуаплылыҡ һинең өҫтә. Ошоно аңлағандар ғына эшҡыуарлыҡҡа киләләр ул. Ә халыҡтың күпселегә ундай яуаплылыҡтан ҡурҡа. Уға билдәле бер эш менән мәшғүл булып, уның өсөн эш хаҡы алып ятыу уңайлыраҡ. Беҙҙең йәмғиәттең менталитеты, совет осоронан ҡалған ҡалып шундай.

Билдәле, бөтәһе лә эшҡыуар була алмай, заводтарға - эшселәр, кибеттәргә - һатыусылар, балаларыбыҙҙы уҡытырға уҡытыусылар, халыҡты дауаларға табиптар кәрәк. Шулай ҙа, дөйөм алғанда, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәр бик аҙ, беҙҙең илдә эшкә яраҡлы халыҡтың әте проценттын ғына тәшкил итә улар. Ә һуңғы арала был һандың тағы ла кәмеүе күҙәтелә. Сөнки Рәсәй шарттарында бизнес асыу һәм уны уңышлы алып барыу бик ауырға төшә. Һәм бында эш башланғыс капитал булмауҙа ғына ла түгел, ә ҡағыҙ, бюрократия волокитаһы, юғары һалымдар, башҡа түләүҙәр, күҙәтеү органдарының "әрһеҙлеге" лә кире ролен уйнай. Шуға ла "конверттағы" эш хаҡтары, ике ҡатлы бухгалтерия, теркәлмәйенсә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү беҙҙең илдә ныҡ үҫешкән.

## Ҡоро һүҙҙән - факттарға

Районыбыҙҙың халыҡ иҫәбен алыу материалдары борсоуға һалды мине. Һуңғы йылдарҙа, айырыуса кризислы 2008-ҙән һуң халыҡ һаны йыл һайын уртаса бер меңгә кәмегән. Мәҫәлән, 2002-нән 2008-гә тиклем халыҡтың 25484-тән алып 28149-ға тиклем артыуы күҙәтелһә, унан һуң районда йәшәүселәр һаны 24987-гә тиклем төшкән. Үлем факторын да күҙҙән ысҡындырмайыҡ, шулай ҙа халыҡ иҫәбенең кәмеүен күптәрҙең, айырыуса йәштәрҙең республиканың бүтән тарафтарына, перспективалы яҡтарға юл алыуында күрәм. Сөнки беҙҙә йәштәргә үҙҙәренең һәләттәрен тормошҡа ашырыу мөмкинлеге юҡ. Уларҙы аңларға мөмкин. Дәүләт, әлбиттә, был проблеманы төрлө дәртләндереү программалары менән хәл итергә тырыша, әммә хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрмәй, ахыры. Мин йәшәгән Мөрсәлим ауыл биләмәһендә лә халыҡ иҫәбе кәмеү юлында. Мәҫәлән, 2002 йылда бында 3404 кеше көн күрһә, 2009 йылда 3700-гә тиклем артһа, 2010 йылда кинәт кәмегән - 3024-кә генә ҡалған. Артабан тағы ла кәмеү бара: 2012 йылда - 2911, 2013 йылда - 2821-гә тиклем төшкән халыҡ һаны. Был, әлбиттә, ҡыуандырған факт түгел. Йәштәр киткәс, балалар һаны ла кәмей, балалар һаны кәмегәс, мәктәптәр ябыла.

Бындай демографик һәм иҡтисади көсөргәнеш, шулай уҡ бар ерҙә оптималләштереү барған шарттарҙа ауылда эшҡыуарлыҡ үҫеше һорау аҫтында ҡалыуы тәбиғи. Әле булғандары ла үҙ эшен күптән асҡан эшҡыуарҙар. Ә яңылары әлегә күренмәй. Ошо ғына ла күпте һөйләй. Бөгөн ауыл эшҡыуарҙарының төп борыс - баҙар иҡтисады тулҡындарында нисек тә туңкәрелмәй тороп ҡалырға!

## Барыһы ла алып һата

Бөгөнгө көндә Мөрсәлим ауыл биләмәһендә ни бары ике тиҫтәләп кенә эшҡыуар иҫәпләнә. Дөйөм алғанда, уларҙың эшмәкәрлеге күберәк аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һатыу өлкәһенә бәйләнгән. Тотош районды миҫал итеп алғанда ла, күпселек эшҡыуарҙарҙың тап алып-һатыу юлында икәнен күреүе ауыр түгел. Ә бына халыҡты хеҙмәтләндереү өлкәһендә - дөйөм туҡланыу, торлаҡ-коммуналь, юридик, туризм, ял һәм һаулыҡты нығытыу буйынса үҙ эшен асырға теләүселәр күренмәй. Ә бит төрлө хеҙмәттәр тәҡдим итеү - иҡтисадты ғына түгел, халыҡтың йәшәү кимәлен дә күтәрә. Тик беҙҙә әле был өлкәләү мөмкинлектәр файҙаланылмай. Был тәңгәлдә эшҡыуарҙарҙың инициативаһынан тыш, власть вәкилдәренең дә ярҙамы кәрәк. Шул уҡ күңел асыу һәм ял итеү нөктәләрен генә алайыҡ. Балаларға аттракциондар, парктар, ғаилә менән ял итерлек кафелар, спорткомплекстар бит халыҡҡа һыу һымаҡ кәрәк. Хатта сәс ҡырҡтырыу өсөн заманса бөҙрәханалар ҙа юҡ. Минең уйымса, халыҡ ауыл тирәһенән эш булмағанға ғына түгел, ә ауылда күңелһеҙ булғанға "каса".

Районда туризм буйынса инвестицион паспорт ҡабул ителгән, әммә был йәһәттән эш алып барылғаны тойолмай. Ә бит районыбыҙ милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың, халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуған яғы. Мәҫәлән, ниңә "Салауат эҙенән" тигәнерәк маршрут эшләмәҫкә, "Янғантау"ға бит бөтә Рәсәйҙән һаулыҡтарын нығытырға киләләр, уларға беҙҙең батырыбыҙ менән яҡындыраҡ танышыу файҙалы булыр ине. Был һис тә утопик идея түгел. Бында тик маршрут булдырырға, туристар йөрөтөү өсөн автобус булерға, гидтар әҙерләргә генә кәрәк. Шул уңғайы мизгелгә ярашлы халыҡ йолалары, байрамдары менән таныштырырға ла мөмкин булыр ине. Юҡһа, беҙгә килгән ҡунаҡтар Салауат Юлаев музейынан башҡа иҫтәлекле урындарҙы белмәйҙәр ҙә.

Был, әлбиттә, һүҙ уңғайы тыуған уйҙар. Ни тиһәң дә, эшҡыуарлыҡ - алып һатыуға ғына ҡоролмаһын ине. Һуңғы арала экотуризм тигән йүнәлеш үҫешә. Ҡала кешеләре ауыл һауаһын танһыҡлай: күптәр сит илгә барғансы, тип, тәбиғәт ҡосағына ынтыла. Был йәһәттән дә беҙҙең район экологик яҡтан иң саф төбәктәрҙең береһе. Ҡала кешеләре ошондай матур тәбиғәт ҡосағында ҙур булмаған коттедждарҙа ла бик теләп ял итер ине. Ҡалай ғына ҡараһаң да, был мөмкинлек районды үҫешенә булышлыҡ итер ине. Районды инвестицион мөмкинлектәрен ауыл хужалығы тармағын үҫтереү йәһәтенән генә ҡарау дөрөҫ түгел. Әлбиттә, аграр район булараҡ, был алдынғы йүнәлеш. Әммә был йәһәттән дә беҙҙең районда эштәр һүлпән бара кеүек. Мәҫәлән, ауыл хужалыҡ, тигәндә,ниңә беҙ тик игенселек һәм малсылыҡты ғына күҙ алдына килтерәбеҙ, ниңә йәшелсә үҫтереү кеүек шөғөл ситтә ҡала? Ул рентабелле йүнәлештәрҙең береһе булыр ине, моғайын. Әлеге мәлдә күп йәшелсәләр сит өлкәләрҙән килтерелә. Ниңә үҙ теплицаларыбыҙҙа асмаҫҡа, баҫыуҙарҙа кишер, бәрәңге, ҡыҙыл сөгөлдөр, һуған үҫтермәҫкә?

## Тағы шундай мәғлүмәт…

Районда эшҡыуарлыҡ тураһында мәғлүмәт туплағанда, бик ҡыҙыҡлы асыштарға ла юлығылды. Мәҫәлән, райондағы эшҡыуарҙарҙың һаны биш йәҙгә лә етмәй. Эшкә яраҡлы ун ете мең тирәһе кешенең өс-дүрт проценты ғына был. Һуңғы ике-өс йылда уларҙың һаны бөтөнләй үҙгәрмәгән тиерлек. Мәҫәлән, шундай үҫеш күҙәтелә: 2010 йылда ун мең кешегә - 237, 2011 йылда - 259, 2012 йылда 293 эшҡыуар тура килһә, 2013 йылда был һан 315-кә еткән. Ә бына ағымдағы һәм киләһе йылда ошо уҡ кимәлдә ҡалыу күҙаллана. Һәр хәлдә 2015 йылға план графаһында 315 тигән һан тора.

Ғөмүмән, хакимиәт сайтында эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса аныҡ мәғлүмәт юҡ. Ә ауыл хужалығы буйынса бер ниндәй мәғлүмәт тә тапманым.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Эшҡыуарлыҡ - ул киләсәкте тойоу һәм унан файҙа алыу, тигән бер иҡтисад белгесе. Ә икенсе берәү бизнесты велосипедта йөрөү менән тиңләгән, туҡтаһаң - мотлаҡ йығылыу янай, тигән. Минең уйымса, киләсәктә уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барыу өсөн тотҡарлыҡтар кәмейәсәктәр, сөнки иҡтисадты кесе һәм урта эшҡыуарлыҡтан тыш алға этәреп булмаясағы тураһында хәҙер ил кимәлендә оран һалалар. Мин оптимист: шуға бөгөнгө мәҡәләм пессимистик йөкмәткеле булһа ла, барыһы ла алда әле, тип, күтәренке нотала тамамлағы килә.**

**Гөлшат ХАЖИЕВА.**
**Салауат районы.**

*ХӘТЕРКИТАП*

**Әбйәлил районы Хәлил ауылы егете Моталлап Әлибаев 1938 йылдың көҙөнән алып 1941 йылдың башына тиклем Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә. Тәүҙә Хәсән күле, аҙаҡ Халхин-Гол йылғаһы янында япон милитаристарына ҡаршы һуғышҡан һалдаттарға складтан ҡорал оҙатыу менән шөғөлләнһә лә, шул автоматтарҙан үҙенә атырға тура килмәүенә ҡыуана-ҡыуана тыуған ауылы Хөсәйенгә ҡайтып төшкән саҡта ул биш айҙан тағы һалдат шинеле кейәсәген һәм оҙон биш йылға "хәбәрһеҙ юғаласағын" белмәй әле.**

# ӘСИРЛЕКТӘН ҺУҢ...

## иң ҙур бәхет азатлыҡ кисереү



Әлмөхәмәт МТС-ында тракторсылар курсында уҡығанда Зөләйха исемле ҡыҙ менән танышып, туй яһап, ике ай ғына йәшәп өлгөрәләр. 1941 йылдың 1 июнендә М. Әлибаев 45 көнгә Әлкәгә хәрби әҙерлек үтергә саҡырыла. Ун ете көндән эшелондарға тейәп, бер ни ҙә әйтмәй, көнбайышҡа оҙатҡанда ла артыҡ борсолмай. Тик Ярославль өлкәһенең Рыбинск станцияһында һуғыш башланыуын ишетеп, ул йәш кәләше менән бәхетле тормош көтөү тураһында хыялдарының юҡҡа сығыуын аңлай.

Тиҙҙән рядовой Әлибаев Белоруссия ерендә уҡсы сифатында илбаҫарҙар менән тәүге алышҡа инә. Ике айҙан Витебск янында снаряд ярсығы ҡаҙалып, ауыр контузия алып, немецтар ҡулына эләгә. Яралыларҙы ат арбаларына тейәп, иҫәндәрен йәйәү килеш, Гродно ҡалаһындағы әсирҙәр өсөн лагерға алып китәләр. Ул күктән яуған бомбаларҙан емерелмәй ҡалған, сәнскеле тимерсыбыҡтар менән уратып алынған, аҙым һайын овчарка менән һаҡсы ҡуйылған урын була. Тотҡондарҙың иҫәбе-һаны булмай. Тәүҙә һорау алалар, фотоға төшөрәләр һәм берәрен үҙҙәренә лә тараталар. Ветеран фотоһүрәтте һаҡлаған: унан башы-муйыны бинт менән уралған, түшенә таҡта kиҫәге эленгән М. Әлибаевтың 324-се лагерҙың 330-сы тотҡоно икәнен белергә була.

М. Әлибаевты лазаретҡа һалалар. Яралыларҙы әсиргә төшкән совет медиктары дауалай. Тик уларҙың ҡулында рәтле медикаменттар булмай: марля урынына төргәкле ҡағыҙ ҙа осһоҙло таблеткалар. Моталлаптың елкәһендәге яра һыуыҡ үтеүҙән шешеп, боҙола башлай. Туберкулез тигән диагноз да ҡуйыла. Аслыҡ, үҙәккә үтеп, хәлде ала. Йыуылмаған, әрселмәгән картуф менән сөгөлдөрҙән бешерелгән аштың "һурпаһы" ҡап-ҡара, ә йәшкелт бысый икмәктең нимәнән бешерелгәнен аңларлыҡ түгел. Уларҙы ла телгә тейерлек кенә эләгә. Йонсоған, бысранған әсирҙәрҙе бет, бөрсә баҫа. Араларындағы һау кешеләрҙе ҡара таңдан ҡояш байығансы ҡайҙалыр эшкә алып йөрөйҙәр. Уларҙың күбеһе ауырлыҡтарға сыҙамайынса ҡаса. Көн һайын кемделер тотоп килтереп, эшлектән сығарғансы туҡмайҙар...

- Улай әҙмәүерҙәй ирҙәрҙе юҡ итер булғас, һеҙҙең кеүек имгәктәрҙе нисек үлтереп бөтмәнеләр һуң? - тип һорайым Моталлап Абдулла улынан.

- Ҡасып барыусыларҙы күрһәләр, һаҡсылар уларҙы мотлаҡ ата ине. Ә былай ниместең тиктомалға әсирҙәрҙе атҡанын күрмәнем, - тип яуап бирҙе ул. - Минең яндағы һәндерәлә ике ҡулы, ике аяғы ла өҙөлгән, һыңар күҙе һытылған берәү ятты. Ул да йәне үҙе сыҡҡансы яфаланды... Ә инде 1942 йылдың һыуыҡ ҡышында совет һалдаттары немецтарҙың үҙҙәрен пленға ала башлағас, әсирҙәргә бер аҙ миһырбанлыраҡ булып киттеләр. Һигеҙ ай тигәндә мунса күрҙек, ашау бер аҙ яҡшырҙы...

Һуғыш тамамланыуға барып, артҡа сигенгәндә лә, дошмандың яралы әсирҙәрҙе ташлап китмәй, үҙҙәре менән көнбайышҡа күсерә барыуҙары аптырата. Шулай, Әлибаевтарҙың лагеры Белосток, унан Сокулка ҡалаларына күсә. Күрәһең, яҡташыбыҙҙың организмы ныҡ булғандыр, контузиянан бик яй арынһа, яраһы уңалмай ыҙалатһа ла, йәне кәүҙәһен ташларға ашыҡмай. Иҫән ҡалып, тыуған ерҙәрҙе, яҡындарыңды күрһәң ине, тип хыялланған сағында Моталлап менән бер тетрәткес ваҡиға була.

Яра бәйләү пунктына инеп барышлай ул ҡулдары менән тирә-яғын һәрмәп, ҡайҙа баҫырға белмәй, урынында тапанған һуҡыр кешегә иғтибар итә. Төҫ-ҡиәфәтенә ҡарағанда, мосолман, хатта үҙебеҙҙең милләткә тартым һымаҡ сырамыта. Тулҡынланыу, шатлыҡ, ярһыу хистәре солғап алған Моталлап теге кешенең эргәһенә йүгереп барғанын, "Һин башҡортмо әллә?" тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡала. Йә, Хоҙай, яуап та башҡорт телендә була! Поляк ерендә, немец әсирлегендә, үлем менән көн һайын күҙгә-күҙ осрашҡанда, яҡташыңды тап итсәле - белмәйем, нимәгә тиңләп булғандыр ике милләттәшебеҙҙең ошо минутта кисергән ҡыуанысын! Йылайыр районының Юлдыбай ауылынан Ҡотдос Әбсәләмов булып сыға был егет. Минер булған икән, мина шартлағанда күҙҙән яҙған. Ә әсирлеккә күптән түгел төшкән. Ошо минуттан ике тотҡон бер-береһенең йөҙөндә ысын иптәш, терәк һәм таяныс таба. Улар үҙебеҙҙекеләр килеп азат иткәнсе бергә булалар.

Тиҙҙән Сокулкалағы лагерь янында ҡаты алыш ҡуба. Бер аҙҙан лазарет ишеген шар асҡан совет һалдаттары азатлыҡ хаҡында хәбәр еткерә. Әсирҙәргә фронт һыҙығынан утыҙ саҡрым ситтә урынлашҡан штабҡа үҙҙәренә барып етергә ҡушыла. Барыһы ла, хатта атлай алмағандар ҙа, шыуышып, аяҡһыҙҙар ҡулдары ярҙамында ырғый-ырғый, ишеккә ташлана. Ҡуҙғала алмағандар үкһеп ятып илай, ялбарып ярҙам һорай. Һәр кемдең йәшәйһе, азатлыҡ тигән татлы һүҙҙең тәмен татығыһы килә. Моталлап был мәхшәр эсендә һуҡыр дуҫын эҙләп таба һәм уны етәкләп, алға атлай. Ямғыр урынына яуған снарядтар аҫтында ҡайҙа йүгереп, ҡайҙа боҫоп, барыһы ла штабҡа ынтыла. Күптәр ирек һауаһын һулап та өлгөрмәй, мәңгегә шунда ятып ҡала.

Әлибаев менән Әбсәләмов өс көндән тейешле урынға барып етә. Тәүгеһен - хәрби госпиталгә, икенсеһен тылға оҙаталар. Ике-өс ай дауаланғандан һуң, 1945 йылдың 15 мартында, М. Әлибаевты ҡабат фронтҡа ебәрәләр. Потсдам, Берлин ҡалаларын штурмлауҙа ҡатнаша, ә Еңеү көнөн Магдебург ҡалаһында ҡаршылай.

Яҡташыбыҙ 1946 йылдың йәйендә генә Хөсәйенгә ҡайтып етә. "Хәбәрһеҙ юғалды" - әле үлем хәбәре түгел, шуға Моталлапты бөтәһе лә ҡайтыр тип көткән була. Зөләйхаһы менән, һуғышҡа тиклем хыялланғанса, матур донъя көтәләр, һигеҙ балаға ғүмер бирәләр. Моталлап Абдулла улы механизатор, малсы, хаҡлы ялға сығырҙан алда биш йыл һатыусы булып эшләй. "Перспективаһыҙ" тип, Хөсәйен ауылы бөтөрөлгәс, 1984 йылда Хәлилгә күсеп киләләр. Үтә баҫалҡы, аҙ һүҙле кеше булараҡ, М. Әлибаевтың әсирлектә булыуын күптәр белмәй ҙә. Хәйер, үҙе лә был хаҡта һөйләргә ынтылып тормай, сөнки ил сәйәсәте арҡаһында ул заманда әсирҙәрҙе өнәп тә еткермәйҙәр.

Ә теге әсирлектәге дуҫы менән яңынан 1968 йылда осраша. "Башҡортостан" гәзитен уҡып ултырғанда, Моталлап бабай бер мәҡәлә аҫтында күңелгә бик яҡын исем күреп ҡала. Ҡотдос Әбсәләмов Ленинград госпиталдәренең береһендә үҙен дауалап, күҙҙәренең нурын ҡайтарған офтальмолог тураһында яҙа. Моталлап Абдулла улы шунда уҡ Йылайырға хат яҙып ебәрә. Күп тә үтмәй, дуҫы улы менән Хәлилгә килеп төшә. "Бына һин ниндәй икәнһең, ҡотҡарыусым минең!" - Ҡотдос бабайҙың тәүге һүҙҙәре шундай була. Ике ветеран ошоға тиклем бер-береһен эҙләмәүҙәренә үкенеп, бынан һуң үлгәнсе аралашып йәшәргә һүҙ бирешә. Тик тормоштоң үҙ ҡанундары: Моталлап Абдулла улы былтыр 94 йәшенә етеп донъя ҡуйҙы. Йәшлегендә кисергән оло ыҙалары өсөн Хоҙай уға балалары ҡулында бәхетле ҡартлыҡ, оҙон ғүмер насип итте.

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йөрөү ысулы һәм саралары

Башҡорттарҙың ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ эйәре формаһы буйынса ныҡ айырыла. Ирҙәр эйәренең алғы ҡашы - киң, ә артҡы ҡашы сағыштырмаса ҙур түгел һәм текә **(һүрәт)**. Ҡатын-ҡыҙ эйәре тар, бигерәк тә алғы өлөшөндә, алғы ҡашы бейек һәм ҙур, артҡы ҡашы йәйеңке **(һүрәттәр)**. Башҡорт эйәренең нигеҙе тотошлайы менән ағастан эшләнә, ҡатын-ҡыҙ эйәренең ҡапталы тотош ағастан яһала, ә ир-ат эйәренең ҡапталы ике айырым өлөштән тора. Уларҙың уртаһына киң ҡайыш нығытыла. Ҡапталдың таҡтаһының ситендә, алғы ҡаш эргәһендә тартҡы һәм ҡайыш өҙәңге өсөн ярыҡ эшләнә. Артҡы ҡаш артына махсус ҡайыш - ҡанъялға нығытыла. Ҡатын-ҡыҙҙың эйәренең алғы ҡашы бик йыш һырлап эшләнгән биҙәк менән биҙәлә, ә ир-аттыҡы сүкелгән көмөш биҙәкле тимер менән көпләнә. Ир-ат эйәренең ҡапталы кейеҙ менән тышлана, уның өҫтөнә һәр саҡ - яҫтыҡ, ә эйәр аҫтына ҡалын кейеҙ сергетыш һалына. Бик йыш ул тыштан күн менән көпләнә. Ҡатын-ҡыҙ эйәренең сергетышы үҙенең ҙур күләме менән айырылып тора Уның тышына ҡыҙыл, һары ебәк йәки йөн ептән төрлө фигуралар, ситтәренә төрлө төҫтәге йөн ептәрҙән суҡтар эшләнә **(һүрәт)**.









Айылдар ҡайыштан йәки ат ялынан үрелә. Һәр башҡорт эйәрендә ҡойошҡан, ҡайһы берҙә күмелдерек бар. Улар ҙа ат ялынан йәки ҡайыштан үрелә. Өҙәңге ябай ағастан да эшләнә **(һүрәт)**, тимерҙән сүкеп тә яһала **(һүрәт)**.



Күпселек осраҡта тау башҡорттары төрлө әйберҙәр ташыған артмаҡтар, тәғәйенләнешенә ҡарап, төрлөсә. Уларҙың иң ябайҙары быҙау тиреһенән тегелә һәм башмаҡ сарма тип атала. Бындай, йөнө тышҡа ҡалдырып тегелгән, тоҡтоң өҫкө өлөшөндәге "ҡолаҡ"тарға ат ялынан үрелгән бау кейҙерелә һәм уның ярҙамында сарма эйәргә нығытыла. Уларҙа, нигеҙҙә, аҙыҡ-түлек ташығандар. Сарма дәүмәле 30-50 сантиметр оҙонлоҡта, 20-40 сантиметр киңлектә була.

Урал аръяғы тауҙары башҡорттарында бик йыш күндән эшләнгән артмаҡ, көньяҡ-көнбайыш башҡорттарында балаҫтан эшләнгән ҡуржын осрай. Күн артмаҡ **(һүрәт)** үҙ-ара киң күн менән тоташтырылған ике өлөштән тора. Һыбай йөрөгәндә артмаҡ эйәр аша һалына йәки ҡанъяға бәйләп ҡуйыла. Ҡуржын тура мөйөшлө, артмаҡ кеүек үк ике яҡлы һәм ул да аҙыҡ-түлек ташыу өсөн ҡулланыла.



Башҡорттарҙың борон нисек күсенеп йөрөүен уларҙың бер йәйләүҙән икенсеһенә нисек күсеүендә күрергә була.

Барлыҡ мал-монаятын тейәгәс, затына, йәшенә ҡарамаҫтан, барыһы ла атҡа һыбай менә. Йәш балалары булған ҡатын-ҡыҙ уларҙы еләндәре эсенә күкрәктәренә һалып, билбау менән бәйләп ҡуялар. Бынан тыш, улар үҙҙәренең артына махсус тар һәм оҙон яҫтыҡ һалып, аттың осаһына бер йәштән өс йәшкә тиклемге бер йәки ике баланы ултырта.

*✓ Ауыл хужалығына дәүләт кенә ярҙам итә ала. Ергә яҡшы сығымдар һалып, бөтөн агротехник сараларҙы тулыһынса үтәгәндә, кемдер берәү әйтмешләй, республикалағы 4 миллион халыҡҡа 4 миллион тонна иген етештерелер ине.*

# Хөбөтдин ҡарт һәм икеһе лә натураль

**Яңыраҡ РФ Дәүләт Думаһы депутаттары пальма майы ҡушып яһалған аҙыҡ-түлек продукттарын Таможня берлегендә һатыуҙы тыйыу тәҡдиме менән Евразия иҡтисад комиссияһына (ЕЭК) хат ебәргән. Евразия иҡтисад комиссияһы, үҙ сиратында, был проблеманы тикшерәсәге тураһында белдергән. Был нимә тураһында һөйләй? Тимәк, һөт продукттарын етештереүҙә әүҙем ҡулланылған был компоненттың кеше һаулығына зыянлы булыуын закон сығарыусылар ҙа таный, тигән һүҙ. Киләсәктә уны тыйыу тураһында закон сыҡһа, Таможня берлегенә ҡараған илдәрҙә пальма майын аҙыҡ-түлек өлкәһендә ҡулланмай башлаясаҡтарына өмөт итергә була. Бөгөнгө әңгәмә барышында һүҙ аҙыҡ-түлек продукттары хәүефһеҙлеге тураһында барасаҡ. Ҡунаҡтарыбыҙ - Башҡортостандың Социаль-сәйәси һәм хоҡуҡ институтының иҡтисад бүлеге мөдире, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, профессор Ҡадир Барый улы МӘҒӘФҮРОВ менән Башҡортостан Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты директоры, биология фәндәре докторы, профессор Вәкил Мирғәле улы ШИРИЕВ ошо һәм башҡа темаларға фекер алыша. Әңгәмәне иҡтисад фәндәре кандидаты Илдар ҒӘБИТОВ алып бара.**

**▸ Хәтерегеҙҙәлер, 1980 йылда СССР-ҙа аҙыҡ-түлек программаһы ҡабул ителгәс, һәр кешегә көнөнә, айына, йылына яҡынса күпме һөт, ит, икмәк продукттары ҡулланыу кәрәклеге айырым-асыҡ билдәләнгәйне. 2010 йылда ла ул ваҡыттағы Президент Д. Медведев аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге доктринаһына ҡул ҡуйҙы. Ошоға бәйләп, беренсе һорау шулай: үҙегеҙҙең күҙәтеүҙәрегеҙҙән сығып, дәүләт илдәге аҙыҡ-түлек сәйәсәтен етерлек кимәлдә ҡайғырта, тип әйтә алаһығыҙмы? Әлеге мәлдә халыҡ аҙыҡ-түлек менән тулыһынса тәьмин ителәме?**

**В.Шириев:** Аҙыҡ-түлек менән бәйле мәсьәләләр бөтөн донъяға хас инде ул. 2009 йылда Ер шарында икмәккә туймаусыларҙың һаны миллиардтан артып, теүәл һандар менән әйткәндә - 1 миллиард 22 миллионды тәшкил итте. Был һан башлыса Латин Америкаһы, Африка илдәрендәге асығыусылар иҫәбенә барлыҡҡа килде. XXI быуатта планетала йәшәүсе халыҡтың егерме процентының аслыҡ хәлендә көн күреүе - бик аяныслы һәм ғәрлек, әлбиттә. Рәсәйҙә хәлдәр улай уҡ ҡырҡыу түгел әле. Ләкин Рәсәйҙә йәшәүселәр составында аҡһым (белок) булған продукцияға ҡытлыҡ кисерә. Аҡһым - кеше һаулығы, атап әйткәндә, уның иммунитеты өсөн бик кәрәкле матдә. Аҡһымы иң күп аҙыҡ-түлеккә диетик (майһыҙ) ит, эремсек, балыҡ, диңгеҙ үләндәре, һөт, ошоларҙың араһынан иң яҡшыһы - кәзә һөтө, йомортҡа, сәтләүек һәм сыр инә. "Икмәктә аҡһым аҙыраҡ һәм уныһы ла ауыр үҙләштерелә. Иң яҡшыһы - йомортҡа", - ти белгестәр. Уның аҡһымы бик тиҙ һәм еңел үҙләштерелә.

Территорияһы 143 мең кв. км.-ҙан артығыраҡ булған Башҡортостанда күпме сәсеү майҙаны файҙаланыла? 2013 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 3,2 миллион гектар тирәһе. Сәсеүлектәребеҙҙең дөйөм майҙаны, буш ятҡандары менән бергә - 6 миллион гектар самаһы. Был майҙандарҙың барыһы ла тигеҙ ерҙә урынлашмаған, шулай уҡ климат зоналары ла төрлөсә. Ерҙең уңдырышлы урындары ла, уңдырышһыҙы ла бар. Шулай ҙа, республика халҡына етерлек уңыш алыу мөмкинлеге барыбер бар, ләкин беҙ аҡлап булмаҫлыҡ аҙ продукция етештерәбеҙ. Был, минең ҡарамаҡҡа, продукцияның хаҡына бәйле. Йәғни, урындағы етештереүселәр үҙҙәренең тауарын ҡулланыусыға һата алмай. Ҡулланыусы ситтән килтерелгән осһоҙло продуктты һатып алыуҙы хуп күрә. Һөҙөмтәлә, беҙҙең фермерҙарҙың игене аҙбарҙарҙа ятып серей.

**▸ Бындай хәлдән ҡотолоу сараһын ниҙә күрәһегеҙ?**

**В.Шириев:** Минең фекеремсә, ауыл хужалығына дәүләт кенә ярҙам итә ала. Ергә яҡшы сығымдар һалып, бөтөн агротехник сараларҙы тулыһынса үтәгәндә, кемдер берәү әйтмешләй, республикалағы 4 миллион халыҡҡа 4 миллион тонна иген етештерелер ине. Шуның бер өлөшөн үҙебеҙ файҙаланып, бер өлөшө менән малдарҙы һимертеп (бөтөн алға киткән илдәрҙә үҫемлексе-леккә киткән сығымдарҙы башлыса малсылыҡ ярҙамында ҡаплайҙар), бер өлөшөн ситкә һатып, файҙа алырға була.

Алға киткән илдәрҙә, ысынлап та, аҙыҡ-түлек сәйәсәтен төп хәстәрләүсе - ул дәүләт. Ә беҙҙең илдең был юҫыҡтағы күрһәткестәре әлегә маҡтанырлыҡ түгел. Йәшәйештең ниндәй генә мөһим тармағын алма - дәүләт һәр тармаҡҡа сығымдар бүлеп, үҙенең хәүефһеҙлеген тәьмин итә: сит ил ғәскәрҙәре баҫып кермәһен өсөн - әрме, ауырыу-сирҙәр көсәйеп, халыҡтың йәшәйешенә хәүеф тыуҙырылмаһын өсөн - һаулыҡ һаҡлау системаһын, янғындар ҡоторонмаһын өсөн - янғын һүндереү хеҙмәтен, ил-йорт эсендә сыуалыштар булмаһын өсөн - полиция хеҙмәтен тота. Ә иң мөһим тармаҡтарҙың береһе булған аҙыҡ-түлек менән халыҡты тәьмин итеү тармағы буйынса һөҙөмтәле генә эшләгән хеҙмәт юҡ. Был өлкәгә ҡарата дәүләт тарафынан ниндәйҙер битарафлыҡ һиҙелә. Бәлки, сәйәсмәндәр ауыл хужалығына (ауыл хужалығы - шул уҡ аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе төп тармаҡ) шәхси инвесторҙар килеренә өмөт итәләр? Әммә әлегә аҡсалы кешеләрҙең ауылға килеүе етерлек кимәлдә түгел.



*Территорияһы 143 мең кв. км.-ҙан артығыраҡ булған Башҡортостанда күпме сәсеү майҙаны файҙаланыла? 2013 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 3,2 миллион гектар тирәһе. Сәсеүлектәребеҙҙең дөйөм майҙаны, буш ятҡандары менән бергә - 6 миллион гектар самаһы. Был майҙандарҙың барыһы ла тигеҙ ерҙә урынлашмаған, шулай уҡ климат зоналары ла төрлөсә. Ерҙең уңдырышлы урындары ла, уңдырышһыҙы ла бар. Шулай ҙа, республика халҡына етерлек уңыш алыу мөмкинлеге барыбер бар, ләкин беҙ аҡлап булмаҫлыҡ аҙ продукция етештерәбеҙ. Был, минең ҡарамаҡҡа, продукцияның хаҡына бәйле. Йәғни, урындағы етештереүселәр үҙҙәренең тауарын ҡулланыусыға һата алмай. Ҡулланыусы ситтән килтерелгән осһоҙло продуктты һатып алыуҙы хуп күрә. Һөҙөмтәлә, беҙҙең фермерҙарҙың игене аҙбарҙарҙа ятып серей.*

**Ҡ. Мәғәфүров:** Бөтөн донъяла, шул иҫәптән, көнбайыш илдәрендә ауыл хужалығы бары тик дотациялар нигеҙендә йәшәй. Ундай дәүләттәрҙең идеологияһы ябай ғына ошо фекергә таяна: ауыл хужалығына дотация, субвенция итеп һалынған аҡса - ошо илдең бөтөн халҡына һалынған аҡса ул. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, фермерға ярҙам итеү - шул фермер етештергән продукцияны файҙаланған, ул етештергән аҙыҡ менән туҡланған бүтән ауыл-ҡала кешеләренә лә ярҙам күрһәтеү, тигән һүҙ. Ҡайһы берәүҙәрҙән, ҡулланыусыларҙың эш хаҡын күтәреп, фермерҙарға ярҙам итеп булалыр, тигән фараз ишетергә тура килә. Әммә был фараз ысынбарлыҡҡа бик үк тап килеп етмәй, минеңсә. Етештереүсегә ярҙам итеүҙең файҙалыраҡ алымдарын алға киткән көнбайыш илдәре күптән өйрәнгән. Ауыл хужалығының тотороҡлолоғо - ил хәүефһеҙлегенең төп нигеҙҙәренең береһе. Быны беҙ ҙә тикшереп ҡараныҡ. Ысынлап та, утыҙынсы йылдарҙа крәҫтиәнгә ул күпме ауыл хужалығы продукцияһы етештерергә тейешлеге тураһында йөкләмәләр бирелгән. Йәғни, дәүләт ауыл хужалығын ҡаты контролдә тотҡан. Яңы ғына аяҡҡа баҫып килгән илдәргә был күренеш ят түгел. Ә бөгөн Рәсәйҙә хәлдәр нисек? Ил менән идара итеүселәргә ауыл хужалығы әллә ни кәрәкмәй ҙә һымаҡ. Әммә эш шуға бара - тиҙҙән ауыл хужалығына дәүләт тарафынан иғтибар артасаҡ. Был - тәбиғи.

**В.Шириев:** Германияла ауыл хужалығы Эске тулайым продукттың (ВВП) бер процентын ғына тәшкил итә. Улар аҙыҡ-түлекте башҡа илдәрҙән һатып ала. Ә беҙҙең хәлдәр башҡасараҡ. Ысынлап та хәҙер беҙҙең республика аграр республика булып бара. Нефть та, энергетика ла республика ҡарамағында түгел.Республиканың бюджетын элек тулыландырған тармаҡтар хәҙер икенсе ҡулдарҙа. Ошондай үҙгәрештәр заманында ауыл хужалығы - төп сығанаҡтарҙың береһе булып тора.

**Ҡ.Мәғәфүров:** Эйе, хәҙер ауыл хужалығына көс нығыраҡ төшөргә мөмкин. Сөнки элек ауыл хужалығы төп ролде үтәмәй ине. Вәкил Мирғәле улы дөрөҫ әйтте, киләсәктә ауыл хужалығының республиканы тотоп торған төп тармаҡ булып ҡалыуы бик мөмкин. Совет осоронда беҙҙең республикаға ауыл хужалығы продукттары етештереү буйынса бик ҙур йөкләмә бирелә торғайны. Ул ваҡытта беҙҙең һөрөнтө ерҙәр 4 миллион - 4 миллион ярым тирәһе ине, хәҙер - 3 миллион. Һөрөнтө ерҙәр ниңә аҙайтылды һуң? Сөнки уның миллиондан ашыуы - деградацияланған тупраҡ ине. Бөтөн ерҙәргә лә һөрөп сәсә торғайнылар. Ерҙең уңдырышлылығына, климат үҙенсәлектәренә әллә ни иғтибар ҙа бирелмәне тиерлек. Мәҫәлән, яҙын 2,5 центнер орлоҡ сәселә, ти, көҙөн 1-1,5 центнер ғына уңыш алынды. Хәҙер ул уңдырышһыҙ ерҙәр ҡалдауға, сабынлыҡтарға әйләндерелде. Был - дөрөҫ һәм аҡларлыҡ сара. Хәҙер элекке һөрөнтө ерҙәр ял итә.

Малсылыҡ тармағында ла, үрҙә әйтелгәнсә, битарафлыҡ күҙәтелде. Мәҫәлән, 1989 йылда "Комсомольская правда" гәзитендә донъя күргән бер мәҡәләлә Мәскәү өлкәһендәге бер колхозда һәр фураж һыйырына көнөнә бер литр һауым тура килеүен бәйән иткәйнеләр. Ул хужалыҡта ит етештереүҙең үҙҡиммәте 30 тәңкәгә етә ине. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең колхоздарҙа етештерелгән иттең үҙ ҡиммәте 1,50 тин булды. Шуға, "Ауыл хужалығы продукцияһының артығын етештереү кәрәкме?" тигән һорау бик урынлы булыр ине. Мөкиббән китеп, артығын етештереү - тәбиғәткә, республика иҡтисадына зыян килтерә, ә был беҙгә кәрәкме? Кәрәкмәй. Икенсе яҡтан, Вәкил Мирғәле улы әйткәнсә, беҙ ауыл хужалығын үҫтерәйек тиһәк, уның продукцияһын һатып алыуҙы арттырырға тейешбеҙ. Ҡыҙыҡлы нисбәт килеп сыға. Берҙән, беҙ етештереүҙе арттырырға тейешбеҙ, ә майҙанды түгел. Тимәк, ниндәй юл ҡала? Интенсив юл. Интенсив юл - шул майҙанға күберәк ресурстар һалып, күберәк уңыш алыу. Әммә мин үҙемдең тикшеренеүҙәрем һөҙөмтәһендә шундай һығымтаға килдем: Башҡортостанда, Рәсәйҙә лә ауыл хужалығын интенсив юл менән алып барыу - ахмаҡлыҡ. Экстенсив юл ғына ҡала. Былай ғына алып ҡарайыҡ. Бөгөн Рәсәйҙә 40 миллион гектар һөрөнтө ер буш ята. Әйҙә, бер миллион гектарына бөтөн малдарҙы йыяйыҡ та, Испаниялағы һымаҡ, уларҙы ашатып, һәр береһен 2 кв. метрлыҡ кәртә менән уратып, малдарҙы шунда һимертәйек. Ул сағында бөтөн донъя беҙҙән ятып көләсәк. Беҙҙең 40 миллион гектар һөрөнтө ер, әллә күпме көтөүлектәр буш ятҡан ваҡытта, беҙ сит илдән ҡыйбатлы тоҡомло мал килтереп, 500 ферма асып, уларға өр-яңы ҡорамалдар ҡуйып, айырым ғына предприятиелар төҙөһәк, был дөрөҫ булмаясаҡ.

Бөгөн ауыл халҡы нимә эшләй? Ауыл халҡы бөлдө. 2000 йылдар башында ул саҡтағы Президентыбыҙға: "Кисекмәҫтән кооперативтар ойоштороп, шәхси хужалыҡтарға ярҙам итергә кәрәк", - тигән тәҡдим менән хат яҙғайным. Ләкин ул йылдарҙа минең һүҙҙәргә әһәмиәт биреүсе булманы. Ярай әле һуңғы йылдарҙа БР Ауыл хужалығы министры: "Шәхси хужалыҡтарға ярҙам итергә тейешбеҙ", - тигән белдереүҙәр яһай башланы. Ләкин хәҙер һуң. Бөгөн хужалыҡтар бөттө. Әҙ-мәҙ эшләй алған кешеләр ҡалаларға, Себергә китте, ҡайһы бер ир-егеттәр эскелек һаҙлығынан ҡотола алмай. Ауылда, дөрөҫөн әйткәндә, ҡарт-ҡоро ғына ҡалды. Ҡарттар күпләп мал тотор ине ул, 70-80 йәшлектәр мал тотоп өйрәнгән, әммә хәлдәре юҡ. Бесән эшләргә лә, итте һатырға ла.

**В.Шириев:** Барыһы ла иҡтисадҡа барып терәлә. Һыйыр итенең хаҡы төштө.

**Ҡ.Мәғәфүров:** Әгәр кеше бороңғоса итеп үгеҙ үҫтереп, уны

*✓ Һөт натураль түгел. Күп кенә һөт продукты ҡабының тышына: "Нормалләштерелгән һөттән эшләнгән", - тип яҙыла. Нимә менән нормалләштерәләр? Ҡаймаҡ менәнме? Юҡ. Майын, аҡһымын алып бөтөрәләр, шунан һыу ҡушалар.*



үҙе һуйып, үҙе баҙарға алып барып һатһа, 50-60 мең һум аҡса сығара. Әммә мал көтөргә ашҡынып тороусылар аҙ.

**В.Шириев:** 2010 йылдағы ҡоролоктоң эҙемтәләре малсылыҡ тармағына насар йоғонто яһаны. Был бөтөн Рәсәйҙә шулай. Һыйыр малы, бер яҡтан, унайлы ул. Хужалыҡтың бөтөн проблемаларын һыйырҙы һатып ҡына хәл итеп була. Элек Рәсәйҙә эре мөгөҙлө малдың һаны 65 миллион баш булһа, бөгөн - 19 миллион ярым тирәһе. Һарыҡ-кәзә шәхси хужалыҡтарҙа ғына ҡалды.

**▸ Һыйыр малының һаны ҡыҫҡарғас, һөт етештереү ҙә кәмене. Табиптар әйтеүенсә, һөт етешмәгәндә, кешенең үсеше артта ҡала. Һөт етештереүҙе арттырыу өсөн ни эшләргә кәрәк? Иғтибарҙы тағы шуға йүнәлтке килә. Яңыраҡ бер хәбәр ишетеп аптыраныҡ: көтөүҙәре ярайһы уҡ имен йөрөгән, халҡы тырышып мал-тыуар көткән ҙур ғына бер ауылда һөт заводы төҙөлөп бөтөп бара, тик ул заводка һөттө, дөрөҫөрәге, порошокты сит илдән килтерәсәктәр икән. Бына һиңә мә: ауыл һөт тигән бренд менән аталасаҡ һөт әлеге лә баяғы химик юл менән яһалған "һөт йыуынтыһы" ғына булып сығасаҡ түгелме?**

**В.Шириев:** Хөкүмәт тарафынан шарттар тыуҙырырға, халыҡты ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Бер хужалыҡта оҙаҡ йылдар эшләгән рәйес ете йыл элек: "Беҙгә яҡшы эшләр өсөн игендең хаҡы 6 һум, һөттөкө - 12, иттеке 150 булырға тейеш, ула сакта беҙ барыһын да етештерәбеҙ, һалымын да түләйбеҙ. Хөкүмәттән бер ниндәй ярҙам да кәрәкмәй", - тигәйне. Тимәк, баҙар шарттарында ауыл хужалығы продукцияһы етештереүгә нимәләр ҡамасаулай. Элек дәүләттең хаҡтарға ҡарата заданиеһы була торғайны. Бөгөн ундай заданиелар юҡ. Бөгөн бизнес-план төҙөй башлаһаң, бер күрһәткесте лә ышаныслы ғына итеп ҡуйып булмай. Игендең хаҡы тоторокло түгел. Ошондай шарттарҙа алдағыны нисек планлаштырып булһын? Булмай, әлбиттә. Күп кенә фермерҙар кредит алып, төрлө аяныслы хәлдәргә тап булып, бөлгөнлөккә төштө.

**Ҡ. Мәғәфүров:** Бер хәл тураһында һөйләйем, булмаһа. Бер төркөм журналистар йыйылып, ҙур ғына бер һөт комбинатының ҡапҡа янында бер тәүлек буйына күҙәтеү алып барған. Тәүлек буйына бер-нисә тиҫтә машина һөт аҙыҡтары тейәп сыҡҡан, бер генә машина ла һөт тейәп инмәгән. Был нимә тураһында һөйләй? Тимәк, май урынына пальма майы ҡулланалар. Ул пальма майынан шып-шыйыҡ майҙан алып ҡаты майға тиклем продукция алып була. Тимәк, һөт натураль түгел. Күп кенә һөт продукты ҡабының тышына: "Нормалләштерелгән һөттән эшләнгән", - тип яҙыла. Нимә менән нормалләштерәләр? Ҡаймаҡ менәнме? Юҡ. Майын, аҡһымын алып бөтөрәләр, шунан һыу ҡушалар. Һығымтаһы яп-ябай: һөт тип һатып алғаныбыҙ һөт тәме килгән һыу булып сыға. Бына шулай, хәҙер ит продукттары етештереү өсөн - ит, һөт етештереү өсөн һөт кәрәкмәй. Бразилиянан - буйволдар ите, Австралиянан кенгуру ите, ҡайҙандыр кит ите һәм башҡаһы килтерелә. Улар матурлап киҫелгән, эсенә һыу тултырылған була. Ул иттәр осһоҙ. Һанап ҡараһаң, бөгөнгө килограмы 400 тәңкә булған колбасаның составында ит, күп тигәндә, 25 процент ҡына.

**В.Шириев:** Эйе, ҡайһы бер етештереүселәр ҙур табыш артынан ҡыуып, натураль продукттарҙан баш тарта. Улар пальма майы, соя майы, блоклы иттәр менән эш итә. Был ризыҡтар кеше һаулығы өсөн файҙалы, тип уйламайым. Хәҙер балалар араһында аллергия менән яфаланыусылар күбәйҙе. Беҙ әрмегә барған саҡта бөтөн егеттәр ҙә хеҙмәткә яраҡлы ине. Улар башлыса ит, картуф ашап үсте. Ә хәҙер күпме егеттәр әрмегә яраҡһыҙ!

**▸ Үҙем күҙәтеп киләм - балалар ниңәләр натураль ризыҡ ашамай. Апайым да әйткәне бар: уның балалары яңы һауылған һөттө эсмәй, һыйыр майын ашамай. Тимәк, беҙ яһалма итте, яһалма һөттө ашап-эсергә өйрәтелгәнбеҙ килеп сыға...**

**Ҡ. Мәғәфүров:** Бер аҙыҡ-түлек кибетендә май эҙләп йөрөй инем, ярҙам һорап, һатыусыға өндәштем. Был кибеттә мин эҙләгән компанияның майы булмай сыҡты. Кәштәләр сит ил продукттары менән тулған. Һатыусы ҡыҙҙан: "Ә һеҙ үҙегеҙ ниндәй май ашайһығыҙ һуң?" - тип һорауыма, ул: "Ошоларҙы инде", - тип яуап бирҙе. Минең ғәжәпләнеүемде күреп: "Хәҙер бөтәһе лә шундай май етештерә бит, натураль булмаған майҙы ашарға өйрәнеп йөрөйөм шулай", - тип, көлдөрөп ҡуйҙы. Шул уҡ ваҡытта бөгөн ике тенденция бар. Байҙар, хәллеләр тик натураль продукт ҡына ашай. Берлинда йәшәгән кешеләргә ҡаланың ситенән 40 кв. метр майҙан участка алырға рөхсәт бирелгән. Унда улар үҙҙәре йәшелсә-емеш үстереп ҡыуана, тиҙәр. Немецтар махсус рәүештә Словакияға барып, ҡортло алмалар һатып алып ҡайта икән. Донъялағы төп ике тенденцияның береһе - аҙ тәьмин ителгәндәрҙең суррогат аҙыҡ-түлек менән туҡланыуы булһа, икенсеһе - бай ҡатламдың натураль аҙыҡ-түлек менән генә туҡланыуы. Ошо ике тенденция араһында өсөнсө тенденция ла тәҫмөрләнә: ауыл кешеһе. Әйтәйек, беҙҙең ауылда йәшәгән Хөбөтдин ҡарт тик үҙ баҡсаһынан, картуфлығынан, һыйыры биргәненән натураль аҙыҡ ашай. Миллиардер Абрамович та шундай уҡ натураль аҙыҡ-түлек менән туҡланыуҙы хуп күрә. Йәғни, беҙҙең Хөбөтдин ҡарт менән Абрамович - икеһе лә бер тигеҙ.

**▸ Аҙыҡ-түлек продукттары боҙолмаһын өсөн уға теләһә ниндәй консерванттар ҡушылыуы тураһында ла беләбеҙ. Ошо хәлдә берәй закон тарафынан тыйып булмаймы икән ни?**

**Ҡ. Мәғәфүров:** Лобби тигән нәмә бар. Ниндәй генә илдең парламентарийҙарын алма, улар бәләкәй-бәләкәй төркөмдәргә, йәғни, беҙ әйткән лоббиҙарға бүленеп бөткән. Әйтәйек, хәрби өлкә, аҙыҡ-түлек, ГМО буйынса лоббиҙар булыуы мөмкин. Ҙур бизнес сәскә атҡан урында депутаттарҙы лоббиҙарға йәлеп итеү ҙә йәйелгән була.

**В.Шириев:** Әлбиттә, бөтөн консерванттарҙы ла зарарлы тип аңларға ярамай. Улар араһында оҙаҡ йылдар тикшерелеп, үҙен тик яҡшы яҡтан күрһәткәндәре лә бар. Натураль продукт тиҙ боҙола. Ә консерваланған һөттәр яртышар йыл һаҡлана.

**▸ Вәкил Мирғәле улы, һеҙ һөйләшеү башында "Ер йөҙөндә миллиардтан артыҡ кеше асыға", тинегеҙ. Килешәм. Шул уҡ ваҡытта көнбайыш илдәрендә күптәр артыҡ күп ашауҙан яфалана. Улар аҙыраҡ ашаһа, теге миллиардҡа аҙыҡ-түлек етер ине бит. Берәү күп ашауҙан һимерһә, икенселәр аслыҡтан шешенә... Тимәк, бында иктисади механизм дөрөҫ ҡоролмағанмы?**

**Ҡ. Мәғәфүров:** Башҡортостандың, Рәсәйҙең ер мөмкинлектәре ҙур һәм ул үҙ-үҙен туйындырыуға етер ине. Африканлыларҙы туйҙырайыҡ, тип, ГМО етештереү дөрөҫ булмаҫ ине. Көнбайыш илдәрендә, дөрөҫ, ашай белмәйҙәр. Уларҙа ашау мәҙәниәте юҡ. Бына башҡорттар дөрөҫ ашаған. Шуға башҡорттар араһында бөгөн дә утә йыуан кешеләр бик аҙ. Ни өсөн? Сөнки беҙ ит ашағанбыҙ. Яңыраҡ ит ашап ябығыуҙы "кремль диетаһы" тип атап йөрөтә башланылар. Был төптә дөрөҫ түгел. Башҡорт диетаһы ул. Итте - күп, ә икмәкте аҙ ашайһың. Башҡорт халҡы икмәкте аҙ ғына сәскән. Башлыса арпа, һоло, бутка өсөн аҙыраҡ тары сәскән. Арпа менән һоло мал өсөн һәм буҙа ҡойоу өсөн файҙаланылған. Башҡорт ата-бабаларыбыҙ ит ашаған, ҡымыҙ эскән, күп итеп һөт продукттары, ҡорот ашаған. Бына ул дөрөҫ туҡланыу мәҙәниәте. Ә инде фаст-фуд һымаҡ нәмәләрҙе умырып ашап, кока-колалар эсеү - кешене һимереүгә лә килтерә, һаулығынан да яҙҙыра.

**▸ Ашау мәҙәниәте, тип әйтәбеҙ ҙә, ә телевидение тапшырыуҙары бит кешене күберәк ашарға өндәй. Ниндәй генә рецепттар тәҡдим итмәй кухня оҫталары!**

**Ҡ. Мәғәфүров:** Әлбиттә, хәҙер бөтөнөһө йәшелсә-емеш үҫтереп ашай башланы. Башҡорттар барыбер итте иң тәмле ризыҡ тип һанай. Һиҙҙегеҙме, һуңғы ваҡытта урыҫтар ниндәй иткә өҫтөнлөк бирә? Йылҡы итенә. Улар бер заман бал, ҡымыҙ тип ауыҙ һыуын ҡоротто, әле бына уларҙың ҡаҙы артынан ҡыуыуҙарын күҙәтәбеҙ. Ҡаҙыны ла яҡшы итеп эшләргә кәрәк, әлбиттә. Көньяҡ-Көнсығыш (Урал аръяғы) райондарҙа эшләнгән ҡаҙыны таратырға, файҙаланырға кәрәк ине. Иң ысын ҡаҙыны улар ғына эшләй белә. Ҡаҙы йылҡы һыртынан бер ҡат ит, икенсе ҡатынан май алып эшләнгән булһа, ысын була. Юғиһә, мин бер тапҡыр "Ҡаҙылыҡ" тип аталған бер нәмә алғайным, уныһы йылҡының эс майынан эшләнгән булып сыҡты. Ни әйтергә теләйем? Башҡорт борон-борондан йылҡы ите ашаған. Йылҡының һөтө генә түгел, ите лә файҙалы икәнен аңлаған. Шунан ҡорот ашаған. Буҙа эскән. Эремсек һымаҡ һөт продукттарын әйтеп тә тормайым. Беҙҙең халыҡ көнө буйы ҡаймаҡ, ҡоймаҡ менән ҡаты ипет 4-5-әр сынаяҡ сәй эсә, көн кискә ауыштымы, бишбармаҡ ашап, артынан һурпаһын эсеп ҡуя, сәй эсмәй. Сәйҙе киске туғыҙҙарҙа ғына 5-6 сынаяҡ эсә лә, ята ла йоҡлай. Был, әлбиттә, бөгөн табиптар өндәгән диетаға тура килмәй. Әммә башҡорттоң үҙ диетаһы, үҙ туҡланыу мәҙәниәте. Уны беҙ ҙә үҙләштергәнбеҙ, киләһе быуындарға ла тапшырасаҡбыҙ.

**▸ XIX быуатта бер химик ялған шәкәр эшләүҙең 6 ысулын уйлап тапҡан. Хәҙерге заманда ундай химик ысулдар тағы ла күберәк. Ошо ялғанды булдырмау өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

**Ҡ. Мәғәфүров:** Совет ваҡытында икмәк нормаль ондан бешерелә ине. Хәҙер икмәкте яһалма елемсә ҡушылған ондан бешерәләр. Хәҙер икмәк заводтарында химия ҡушылған икмәк 1-1,5 сәғәттә әсеп сыға. Ә яҡшы икмәк әсеп ҡалҡһын өсөн 5-6 сәғәт кәрәк. Фальсификация, ысынлап та, көсәйеп китте шул. Шишмә шәкәре, тигән бренд бар. Шул уҡ ваҡытта ошо бренд менән Өфөлә лә, Магнитогорскиҙа ла бүтән шәкәр һатыла. Шишмә майы ла юҡ. Сит өлкәләрҙә "Башҡорт балы" тип бүтән бал һатҡандарын күргәнем бар. Бына шулай, "Башҡорт продукты" тигән бренд оятһыҙ рәүештә файҙаланыла. Тимәк, шул арҡала башҡорт продукттының абруйы ла төшәсәк, тигән һүҙ. Бында бик дөрөҫ дәүләт сәйәсәте кәрәк. Әйткәндәй, телевидениела яһаған сығыштарымда ауыл хужалығына ярҙам итергә кәрәк, шәхси хужалыҡтарҙа етештерелгән натураль продукттарҙы һатыуҙы ойоштороған кооперативтар булдырырға кәрәк, тип, 5 йыл тылҡыным. Бер ни ҙә эшләнмәне. Берҙән-бер эшләнгән эш шул булды - "Үҙеңдекен һатып ал!" тигән рекламалар барлыҡҡа килде...

# МИЛЛИАРДЕР АБРАМОВИЧ...

## ризык ашай



*Әлбиттә, хәҙер бөтөнөһө йәшелсә-емеш үҫтереп ашай башланы. Башҡорттар барыбер итте иң тәмле ризыҡ тип һанай. Һиҙҙегеҙме, һуңғы ваҡытта урыҫтар ниндәй иткә өҫтөнлөк бирә? Йылҡы итенә. Улар бер заман бал, ҡымыҙ тип ауыҙ һыуын ҡоротто, әле бына уларҙың ҡаҙы артынан ҡыуыуҙарын күҙәтәбеҙ. Ҡаҙыны ла яҡшы итеп эшләргә кәрәк, әлбиттә. Көньяҡ-көнсығыш (Урал аръяғы) райондарҙа эшләнгән ҡаҙыны таратырға, файҙаланырға кәрәк ине. Иң ысын ҡаҙыны улар ғына эшләй белә. Ҡаҙы йылҡы һыртынан бер ҡат ит, икенсе ҡатынан май алып эшләнгән булһа, ысын була. Юғиһә, мин бер тапҡыр "Ҡаҙылыҡ" тип аталған бер нәмә алғайным, уныһы йылҡының эс майынан эшләнгән булып сыҡты.*

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ошо һөйләшеүҙе уҡығандан һуң һуң кемдер ашаған ризығына тағы ла иғтибарлыраҡ булыр, магазиндан һөт-ҡаймаҡты, итте яҡшыраҡ ҡарап алыр, кемдер ауылдан килтерелгән аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирер, тип ышанабыҙ. Хәйер, бөгөнгө ҡала кешеһе ауылдан килтерелгән ҡоротто, талканды, һөтмайҙы, итте былай ҙа йомолоп ала. Әйткәндәй, ҡорот ашау ныҡ файҙалы икәнен оноторға ярамай. Бөйөк Ватан һуғышында дошмандарға әсир төшкән бер башҡорт кешеһе: "Кеҫәмдәге күгәренкерәгән бер йомарлам ҡоротом арҡаһында ғына концлагерҙарҙа тере ҡалдым", - тип һөйләгән, имеш...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

***✓ Һөйләгәндәре аңды арбарлыҡ, иҫкә йоғорлоҡ шул, сөнки күп мажаралы хәл-ваҡиғаларға бай ғүмерендә ул күргән, кисергәндәрҙе башҡа берәү ҙә үҙ башынан үткәрмәгән.***





Урал МОСТАФИН

# ТАУ ХӘМИТЕ

(Хикәйәт)

Минең өсөн генә түгел, беҙҙең "Колхоз урамы"нда йәшәгән әллә күпме быуын балалары өсөн дә ғәжәп кеше булды ул Хәмит апа*, сөнки уның булмышын тулыһынса аңлаған кеше булмағандыр. Ҡартатайҙан һорарыммы, юҡмы, иҫләмәйем, ә атайымдан һораным. Ул: "Хәмит ағай мин иҫ белгәндән бирле шул көйө инде", - тине лә ҡуйҙы. Яҡын күршеләре булғанғамы, әллә ҡартатайға эйәреп барып йөрөгәнгәме, Юлай ағайым менән мин унан әллә ни ҡурҡманыҡ, ә башҡа малайҙар: "Ана, Хәмит апа килә!" - тигәнде ишетһәләр, ыштандарын ике ҡулдары менән ҡымтып, өркәк һарыҡ көтөүе кеүек, арттарына ла әйләнеп ҡарамай ҡасалар ине. Ҡасырһың да шул! Ул бит ҡаршыһына осраған һәр малайға күҙҙәрен әҙерәйтеп: "Әһә, хәҙер тотоп, бестерәм!" - тип килә башлай. Әллә ҡасан бабаға ултырған малайҙар ҙа, бестерелгәндәрен онотоп, ҡасып китә торғайны. Мәктәптән шаярышып-шарҡылдашып ҡайтып килгән балалар, өйартында ултырған Хәмит апаны күрһә, уның тәңгәленән ауыҙҙарын йомоп, шып-шым үтеп китергә тырыша ине.

Ә бит уның бер балаға ла зыяны тейməне: ҡысҡырманы, екермәне, таяҡ тотоп баҫтырманы. Ниңә ҡурҡҡанбыҙҙыр, белмәйем. Балаларҙың күңелен, бәлки, уның сәйерерәк холҡо, башҡаларҙан айырылып торған ҡиәфәте шомландырғандыр? Хәмит апаның кәртә артындағы Бешәтау битләүендә тамырҙары менән ҡаяға йәбешеп үҫкән ҡарағайға оҡшаш ҡиәфәте бөгөн дә күҙ алдымда: кәүҙәһенән, шул ҡарағай олононан тарбайған ботаҡтар кеүек, ике бото, ике ҡулы, ике ҡолағы менән танауы һерәйеп тора, ҡолға һымаҡ ҡаҡса тәнендә төҫө уңалып бөткән күлдәк, башында ҡалпаҡ рәүешен күптән юғалтҡан "кәләпүш", тешһеҙ ауыҙының эсен күрһәтмәҫ өсөндөр, һәр саҡ ҡымтылған ирендәрендә йәки, таштарҙы ярып сыҡҡан ҡарағай тамырҙары кеүек, тиреһен тишеп сығырҙай ҡан тамырҙары ташҡан ҡулында гәзиткә йыуан итеп төрөлгән тәмәке. Уның өйө тәңгәленән үтеп барғанда уҡ махорка еҫе аңҡығандай була торғайны. Ҡайһы яҡҡа ыңғай ятып үҫергә белмәгәндәй тырпайып ҡатҡан ҡуйы ҡаштары уҡмашып, күҙҙәрен яртылаш ҡаплаған, тәмәке оҫҡонона янып, төтөнөнә буялып, ерән-ҡарағусҡыл төҫкә ингән мыйыҡ остары балаҫ суҡтары кеүек һәлпәйешеп тора. Баш түбәһе, соңҡаһы тураһында әйтеп булмай, сөнки ул ерҙәрен үҙе һәрмәп белмәһә, күргән кеше булмағандыр. Тешһеҙ ауыҙы, төпһөҙ күҙҙәре, алаптай танау ярыҡтары, ҡуйы ялбыр йөнлө ҡолаҡ тишектәре ботағы һынып төшкән олон өңдәрен хәтерләтә. Ул тишектәрҙән ҡапыл ғына бер бапаҡ килеп сығыр, ә ҡыбырлаһа, кәүҙәһенән арҡыс-торҡос һерәйешеп торған аяҡ, ҡул, танау, ҡолаҡтары шарт та шорт һынып төшөрҙәр кеүек. Шуғалыр, уны күргән һайын, ҡыбырламаһа ярар ине, тип уйлап ҡуяһың. Уның тауышы ла ауыҙынан шығыр-шығыр итеп сыҡҡандай тойола. Ә ҡолаҡ тишектәренән ян-яҡҡа һеперткеләй һерәйеп торған ерән сәстәре (әллә тәмәке төтөнө ҡолаҡтарынан да сығып, уларҙы шул төҫкә буянымы икән?) уның ҡиәфәтен әкиәттәге урман ҡараҫҡыһына оҡшатып, тағы ла ҡурҡынысыраҡ итә. Хәмит апаның ҡиәфәт, килбәтен хәҙер күҙ алдына килтерәм дә, әгәр араларында күрһәң, уны боронғо индус тип тә, Африка бедуины, хатта Австралия аборигены тип тә танырға булыр ине, билләһи!

Бәләкәй саҡта балалыҡ хистәренә бирелеп шөрләһәк тә, өлкәнәйә биргәс, беҙҙең урамда үҫкән һәр малайҙың күңелендә уның эргәһенә барып, яҡын ултырып һөйләшеү теләге тыуғандыр. Бәлки, бәләкәй саҡтағы ҡурҡыуҙарынан арыныу өсөндөр, бәлки, үҙен инде өлкән кеше итеп тойоу, шуны үҙенә һәм башҡаларға иҫбат итеү өсөндөр. Хәмит апа, мин белеүемсә, бер кемде лә ситләтмәне. Малайҙар үҫә, ҙурая килә, ҡыйыулыҡтарын йыйып, уның эргәһенә килеүҙәрен үҙе лә көтөп йөрөгән кеүек һиҙелә ине. Һәр хәлдә, тәүгә уның янына килеп, ҡул биреп һаулыҡ һорашып, хәл белешкән малайҙы ул үҙенә тиң ир итеп күрҙе. Тиң күреп һөйләшеп, кешенең үҙенә ышанысын арттырҙы, үҙе һәм башҡалар алдында баһаһын күтәрҙе. Хәмит апа менән янына барып һөйләшер кимәлгә үҫкән малай шул көндән үҙен ирҙәр рәтендә тип ҡыйыу иҫәпләй ала ине.

Башҡаһын белмәйем, ләкин Хәмит апа хәбәр һөйләргә оҫта булды: әллә ҡыҙыҡ нәмә тураһында һөйләп, әллә хәбәрҙе ҡыҙыҡ һөйләүе менәнме, ирҙәрҙе ауыҙына ҡаратып, гел эргәһендә тотто. Кис көтөү ҡайтҡас, көн һайын тигәндәй, ирҙәр уның өйартына йыйылды. Ә ҡыуышлап ятып бесән эшләгән мәлдәрҙә, кистәрен ҡыуыш усағы тирәһе үҙе бер диспут клубына әүерелә ине. Ирҙәр донъя хәлдәрен һөйләшеп, түрәләрен әрләп, аттарын маҡтап, юҡ-бар өсөн дә бәхәсләшеп туялар ҙа, Хәмит апаның ауыҙына өңшәйәләр. Ул, ашыҡмай ғына: "Үә-ә-әй, донъя..." - тип, тәмләп-тоҙлап хәбәргә керешһә, тормош мәшәҡәттәре лә, йырып сыҡҡыһыҙ булып күренгән ҡайғы-хәсрәттәр ҙә, мөһим тип һөйләнелгән хәбәрҙәр ҙә онотола.

Хәмит апа кеше зиһенен әллә ниндәй тылсымлы һүҙҙәр менән әүрәтеп, әллә ниндәй мөғжизәле донъяға алып китә. Уның һөйләгәндәренең ҡайһыныһы ысын, ҡайһыныһы уйҙырма, ҡайһыныһы уның мейеһендә тыуған фантазия икәнен һис айырып булмай: ауыҙҙы асып, иҫеңде юғалтып, уның көйләп кенә һөйләгән тауышына арбалып тик ултыраһың. Шул тиклем иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә, хатта ишеткәндәргә ышанырғамы, юҡмы, тигән шик тә тыумай. Тыңлаусыһын фәҡәт шул мәлдә, шул ерҙә барған хәл-ваҡиғалар араһында йәшәгән кеүек тойҙороп, ышандыра, хатта тыңлап ултыра торғас, хикәйәһенең ҡайһы бер хәүефле, көсөргәнешле ерҙәрендә, үҙең дә һиҙмәҫтән, тирәяғыңды алан-йолан ҡарап, ҡапшап, һиҫкәнәһең. Хәҙер уйлауымса, ул ысынбарлыҡты әкиәткә, әкиәтте ысынға әйләндереп, йә икеһен бергә ҡушып һөйләгән, шуға күрә лә кешеләрҙең аңы ысын менән хыял араһында аҙашып алйыҡандыр.

Һөйләгәндәре аңды арбарлыҡ, иҫкә йоғорлоҡ шул, сөнки күп мажаралы хәл-ваҡиғаларға бай ғүмерендә ул күргән, кисергәндәрҙе башҡа берәү ҙә үҙ башынан үткәрмәгән. Ул һөйләгәндәр башҡа бер кемдең дә хәбәренә оҡшамаған сәйер хәлдәр тураһында. Беҙҙең яҡтарға хас булмаған донъя, тормош, беҙҙең халыҡҡа ят ҡылыҡ, ғәҙәт-ғәләмәттәрҙе тәмләп һөйләп ауыҙына ҡарата ине ул. Хәҙер ҙә шуны аңламайым, ул хәтлем иғтибарҙы йәлеп итерлек хикмәтле хәбәрҙе ҡайҙан алды, ғүмере буйы һөйләп нисек хәбәре бөтмәне? Әллә бер тапҡыр һөйләгәндәрен һуңғараҡ, иҫенә төшкәндәрен өҫтәп, яңыртып, үҙгәртеп һөйләнеме икән? Улай тиһәң, ауыҙы бикһеҙ берәй кеше бер тапҡыр булһа ла: "Хәмит апа, был турала һөйләнең бит инде", йәки: "Теге тапҡыр һөйләгәндә, былайыраҡ ине бит", - тип дәғүә белдерер ине. Ә ундай хәл булыуын бөтөнләй иҫләмәйем. Тимәк, шикләнеүселәр бөтөнләй булмаған, тип фараз итергә була, ни тиһәң дә, мин Хәмит апаның яҡын күршеһе булдым, 4 йыл рәттән ҡыуышлап бесәндә бергә яттыҡ, бер ҡыуышта йәшәнек. Уның һөйләгәндәрен ҡолаҡтарын ҡарпайтып йотлоғоп тыңлап, ҡурҡыныс ерҙәрендә ҡото осоп, минән күберәк ишеткән малай булмағандыр. Үкенесле, һөйләгәндәре иҫтә ҡалмаған, ә яҙып барыу тураһында кем уйлаһын. Оҫта һөйләүсе үҙе кисергәндәрҙе әллә ниндәй ғәжәп мажараларға әйләндереп, әллә ниндәй сихри төҫтәргә манып бәйән иткәндер инде. Уның өсөн ифрат бай фантазия, яҡшы хәтер, оҫта тел, хәтһеҙ дәрт, ә иң мөһиме - һәләт кәрәк бит әле. Ә хаҡы? Хаҡы - тыңлаусыларының иғтибары! Бына уның кеүек донъя мажараларын үҙ башынан кисергән кешенең хәтирәләренән кинолар төшөрөргә кәрәк ине лә бит...

Шулай ҙа 4 йыл буйы, кемде яҡлап, кемгә ҡаршы икәнен дә белмәй, һуғышып йөрөүе, яраланып, тотҡонға эләгеүе, унда һыу эскеһеҙ булып туҡмалыуы, үлгәндер тип уйлап, йырынға ташлап китеүҙәре тураһындағы хәтирәләре әҙерәк иҫтә ҡалған. Замана афәтен ул ысынлап та үҙ башынан кисергән, сөнки буталсыҡ мәлдәрҙә ауылға аҡтар килһә лә, ҡыҙылдар килһә лә, мылтыҡ тоторлоҡ кеше осраһа, үҙҙәре менән алған да киткәндәр.

Хәмит апа үҙен ташлап киткән йырындан шыуышып сығып, яҡшы кешеләргә тап булып, яралары уңала биргәс, күктәгеме, ерҙәгеме ниндәйҙер сихри тамғаларға ҡарап, һуҡмаҡтарҙың кәрәген танып, елдәр алып килгән еҫтәргә эйәреп, тыуған ауылына ҡайтып еткән бит әҙәм балаһы. "Нисек ҡайтып еттең ул хәтлем ерҙәрҙән, Хәмит апа?" - тип һорағандары иҫемдә. Тауышында рәнйеү ҡатыш нәфрәт менән: "Ҡайтҡың килһә, эт йөрөмәҫ ерҙән дә ҡайтаһың икән", - тигәне асыҡ иҫемдә. Ул хикмәтле һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын белмәгәнмендер ҙә, ләкин тауышында сағылған йән һыҡтауы иҫтә уйылып ҡалған. Ауылға ҡайтҡас та оҙаҡ ҡан төкөрөп йөрөгән ул, кипкән дә ҡатҡан: ҡоро һөлдәгә ҡалғас ҡына ҡан төкөрөүе бөткән, тиҙәр. Ана үлә, бына дөмөгә, тип кәрәктәрен әҙерләп йөрөгән ҡорҙаштарын аптыратып, Хәмитулла һин дә мин йәшәп ала ла китә. Тиңдәш-ҡорҙаштарын ерләп бөткәненә әллә күпме ваҡыт, ә Хәмит ҡарт солоҡ ҡарағай һымаҡ, шыр һөйәк тә тарамыш һөлдәһе булып шымарып ҡатты, хатта кипкән тамағынан сыҡҡан тауышы менән шығырҙап тик йөрөнө.

Әйткәндәй, холҡоноң ҡырыҫлығы, йән-тәненең ныҡлығы Хәмитулла Ғибатулла улының сығышы менән таулылар араһынан булыуынан килә. Уның ата-бабалары бер туған ағалы-ҡустылы Иманғол менән Йомағол XVI быуатта Иҙел буйы Ишдәүләт (Ябағы) ауылынан күсеп килеп төйәкләнгәндәр. Туғайына килеп һыйынған йылғаны улар үҙҙәренең ырыу-ара исеме менән Таулы тип атағандар, тигән фараз да бар. Эткол ауылы халҡының күпселеген тәшкил иткән бүреләр, эйәрсен бүреләр, көсөктәр, көҙәндәр, ҡырғыстар, тызымдар, ҡыйыштар, ҡурҡаҡтар, маңҡалар, һыртыҡайҙар, татарҙар, серәкәйҙәр, монаштар кеүек ырыу-араларында таулылар тигән көслө мәғәнәле исем йөрөткән тоҡомдоң вәкиле булыуы уны башҡаларҙан айырғандыр, хатта, өҫтөнөрәк булырға ла мәжбүр иткәндер. Ихтимал.

Эйе, Тау Хәмите (сығышын белгән өлкәндәр уны хөрмәтләп шулай атай торғайны) ауылдаштарын хыянатһыҙ хикәйәләре менән әүрәтеп, фәһемле хәбәрҙәре менән тәрбиәләп, аһәңле әңгәмәләре менән өмөтләндереп йәшәне. Бәлки, тағы әллә күпме йәшәр ҙә ине... Ләкин бер таңда кәртәһе артына сыҡһа, Бешәтау битләүендәге баяғы ҡарағайҙың ауғанын күреп ҡалған. Ҡарағайҙы Бешәтауҙың ҡаяһына һеңеп ҡатҡан тамырҙары ла тота алмаған, сир-сырхауҙарға, ҡайғы-хәсрәттәргә тиҙ бирешеп барған әҙәм йәне нисек ҡарағайҙан оҙағыраҡ йәшәһен инде? Оҙаҡламай Ҡарағайы артынан Хәмит ҡарт та китте ахирәткә. Йәне йәннәттәлер... Әммә ағастың яҙмышы кешенекенән аяныслыраҡ булды: кеше үҙенең дауамы итеп дүрт улын ҡалдырҙы, ә ағастың орлоҡтарынан эргә-тирәһендә үҙенә оҡшаш бер бөртөк үҫенте лә ҡалҡып сыҡманы...

* Баймаҡ, Әбйәлил яҡтарында атайҙан өлкән ир кешене ололап "апа" тиҙәр.

ЯҢЫ РУБРИКА: "ХЕҘМӘТ ҺАБАҠТАРЫ"

# ҮТМӘҪ САЛҒЫ,

## йәғни бесән сабыу үҙе бер ижад майҙаны кеүек

**Быйылғы йәй бесәнселәр өсөн үтә ҡатмарлы миҙгел булды, ахыры. Июнь айҙарында ҡыҙҙырып торҙо-торҙо ла, июль урталары еткәйне, көн йәшкәҙәүҙән бушаманы: аҙналар буйы ямғыр бысҡаҡланы. Ошо ямғырлы осорҙа беҙ ғаиләбеҙ менән бесән сабырға йөрөнөк. Шул саҡта атайымдан өйрәнгән ҡайһы бер һабаҡтарҙы гәзит уҡыусыларға ла еткерергә теләйем. Юҡһа, беҙ ауылдан ғына түгел, ауыл шөғөлдәренән дә арына барабыҙ бит. Бәйәнем ғүмерендә лә ҡулына салғы тотоп ҡарамаған йәштәштәргә лә, ҡалала йәшәп, бесән тигән нәмәне һағынып иҫкә алған ауыл еренән сыҡҡан ағай, апайҙарға ла ҡыҙыҡлы булыр, моғайын. Һәм, әлбиттә, уҡыусылар араһынан да үҙенең хеҙмәт һабаҡтары менән уртаҡлашыусылар табылыр, тип ышанабыҙ.**



Быйыл күптәр бесәнгә һуң төштө. Шулай ҙа ҡайһы берәүҙәр был эште иртәрәк тамамлап, ямғырҙан ҡаза күрмәҫ элек бесәнен ихатаһына алып ҡайтып, өйөп тә ҡуйҙы. Атай әйтеүенсә, яңы сабылған бесәнгә ямғыр әллә ни ҡурҡыныс түгел. Ә инде бер яуып, бер ҡояшлап торһа, был бесәндең ҡарайыуына килтерергә мөмкин. Шуға бер-ике көндә сабылған бесәнде күбәләп ҡуйырға кәрәк. Һуңлаһаң, эштәр хөрт.

Беҙҙең бесәнлек урман аҡландарында булғас, беҙ - атайыбыҙ, ҡустым һәм мин - урман бесәнен ҡул менән сабабыҙ (яландарҙы ғына трактор менән саптырабыҙ). Бесәнгә төшөүебеҙҙең тәүге көнөндә атай: "Урманға ҡот индереп, салғы сүкеп алайыҡ", - тип, салғыларҙы сүкергә кереште. Ысынлап та, урманға йәм ингәндәй тойолдо. Быйыл ауылдаштар бесәнгә һуңыраҡ төшкәнгәме, башҡа кешеләрҙең салғы сүкегәнен ишетмәнек. Беҙҙән башҡа ҡул салғыһы менән сабыусылар ҙа күренмәне шикелле. Барыһы ла был эште "тимер аттарға" туғарғанмы икән? Үҙем иһә, бесәнде бер темпта ғына сабып йөрөүҙән ләззәт кисерҙем. Йыл буйына ауыр эш күрмәгән ҡулдарға ла ҡеүәт ингән һымаҡ булды.

Салғы. Үлсәме 50-100 сантиметрға еткән, бысағы - тимерҙән, ағас һаплы эш ҡоралы. Урта быуаттарҙан алып бөгөнгәсә файҙаланыла. Һабы ҡайындан, тотҡаһы муйылдан бөгөп яһала. Салғыны һаплағандан һуң (уны һаплау - үҙе бер сәнғәт: салғы, һабына ҡарап, бәкес йә һонтоҡ булыуы мөмкин. Бәкес салғы аҙ алдыра һәм ҡылған сабыуға килешә, ә һонтоғо - япраҡ бесән өсөн шәп) һәм эш процесында тупаҫланған ваҡытта сүкеш һәм түш ярҙамында сүкейҙәр (ҡайһы бер һөйләштәрҙә - тапайҙар). Салғы йөҙөн махсус сүкеш ярҙамында бер тигеҙ көс менән һуғып йоҡартыу - салғыны сүкеү була. Сүкегән саҡта сүкештең осон һыуға тығып алалар. Бесән сабыр алдынан иһә салғы йөҙөн алмаш-тилмәшләп, еңелсә баҫым менән баҫып, өҫкә-аҫҡа йөрөтөп алалар. Ҡайраған саҡта салғының осон ергә терәйҙәр, һул яҡ ҡабырға яғынан ҡуйып, уң аяҡты тубыктан бөгөп, тубыкланып, уның һабын һул аяҡҡа терәп, ҡул менән ҡыҫып тоталар. Аяҡтарҙы киреһенсә ҡуйып ултырһаң, ҡайраған саҡта уң ҡул уң аяҡҡа төкөләп, салғыға ҡырҡылыу ҡурҡынысы бар. Салғыны ҡайрағас, уны яныйҙар. Яныу - ҡайрау һымаҡ уҡ салғыны үткерләү ысулы, тик ул сағында ҡайраҡты (яныуҙы) салғының йөҙө буйынса тотош йөрөтмәйҙәр, ә өҙөп-өҙөп, һәр яғын алмаш-тилмәшләп, өҫтән аҫҡа ҡарай еңелсә йөрөтәләр. Яныған саҡта салғы йөҙөнөң һапҡа яҡынығыраҡ өлөшөнә айырым иғтибар итеү кәрәк: был өлөш иң үткер урын булырға тейеш. Бесән сапҡанда иң ҙур көс ошо урынға төшә.

Әйткәндәй, олатайым йыш ҡына салғыны яҡшы хәлдә тотоу кәрәклеген иҫкәртеп: "Яҡшы ҡорамал эшләй - егет маҡтана", - тип әйтер булған. Тағы, йән-фарман бесән сабып, күп тә үтмәй шыбыр тиргә батып, хәле бөткән малайҙарҙы: "Салғы шәпте яратмай, ҡабаланмай сабығыҙ", - тип өйрәткән.

Бына шулай салғыны сүкеп, ҡайрап, янып алғандан һуң бесән саба башлайҙар. Бесән сабыу алымына килгәндә, кемдер (айырыуса яңы ғына бесән сабырға өйрәнеп йөрөүселәр) алға эйелеберәк сабыуы мөмкин. Был бик тә ғәҙәти күренеш. Эйелеп сабыуға салғының тотҡаһы ниндәй бейеклектә булыуы ла тәьҫир итә. Салғыны ергә баҫтырған саҡта тотҡаһы кендек тәңгәлендә, йә кендектән бер-нисә сантиметрға өҫтәрәк булһа, салғы ошо салғысының буйына тап килә, тигән һүҙ.

Сапҡан саҡта аяҡтарҙы нисек күсереп барыу әллә ни ҙур әһәмиәткә эйә булмаһа ла, быны ла әйтеп үтәйек. Ғәҙәттә, аяҡтарҙы ике төрлө ысул менән күсерәләр. Беренсеһе: берҙе һелтәнгәндән һуң тәүҙә уң, аҙаҡ һул аяҡты күсереп баҫыу. Йәғни, салғыны һелтәүҙәр араһында ике аяҡты ла алға күсерәһең. Икенсе ысул: һәр һелтәнгән һайын уң, йәки һул аяҡты берәмләп алға күсереп баҫыу. Юл ыңғайы әйтеп үтәйек: ошо ысул менән бесән сабыу - беҙҙең тоҡомда киң таралған. Беҙҙә уны "атлап сабыу" тип атайҙар. Үләндәр тотошлай ҡырҡылһын өсөн ололар аҙыраҡ алдырып, үҙ хәленә самалап, нығыраҡ һелтәнеп сабырға кәңәш итә. Бакуй аҫтында үлән һабаҡтары ултырып ҡалмаһын өсөн салғы йөҙөн ергә тейгеҙеп шылдырырға тырышалар. Был оҫталыҡ йылдар буйы тәрбиәләнә.

Бер һыуһын сапҡас, салғыларҙы алып ҡыуышҡа барған саҡта салғыны хәүефһеҙ йөрөтөүгә лә иғтибар итеү мотлаҡ. Салғыны уң ҡулға тоталар, яурын аша һалып йөрөү хәүефле һанала. Был хаҡта атайым: "Бер бесәнсе салғыһын яурыны аша ҡуйып, йылға аша үтеп барышлай, һыу эсендә суртан балығын күреп ҡалған да, "Ана, суртан!" тип, салғының һабы менән суртанға сәнсәм тигәнсә, салғыны муйынын ҡырҡҡан да ҡуйған. Был хәл ысын булғандырмы, юҡмы, билдәһеҙ, әммә уның тәрбиәүи әһәмиәте ныҡ көслө", - тип һөйләне...

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Салғы үтмәҫләнһә, йәғни, бесәнселәр теле менән әйткәндә, "салғының сүкеүе етһә", уның үтмәҫләнгәнен һиҙмәйһең: ҡыҙыулыҡ менән саба бирәһең. Әммә ғәҙәттәгенән нығыраҡ һелтәнәһең һәм тиҙерәк арыйһың. Тормошта ла шулай бит: ниндәйҙер берәй проблема йылап-йылап яҡынлашып, үҙгәнгә үтерлек булып килеп терәлмәйенсә, уны бар тип тә белмәйһең. Тәжрибәһеҙлекме был? Әллә "Йомшаҡ көс" ("Мягкая сила") тигәндәре шулмы? Һәр хәлдә, "салғыларҙы" ваҡыты-ваҡыты менән сүкештергеләп тороу кәрәктер, юҡһа, тормошта йырып сығырға тура килгән ҡылғанлы яландарҙы үтмәҫ салғы менән генә "юнып" булмаясаҡ.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# ТӘРИЛКӘ

Олатай кеше бик ныҡ ҡартая, ашарға ултырғанда ҡалаҡты ла йүнләп тота алмай башлай. Шуға ла өҫтәлгә ашын түгеп бөтә, ризыҡтарҙы төшөрөп ебәрә. Был хәл уның улы менән килененә оҡшамай. Ҡарттың хәле юҡлығына ышанмайынса, һаҡһыҙ ҡыланыуҙа ғәйепләй улар уны. Шуға ла ҡартты үҙҙәре менән бергә өҫтәл артына түгел, ә иҙәнгә айырым ултырта башлайҙар. Ҡарттың ейәне Хәсән был хәлгә бик ныҡ борсола, атаһы менән әсәһе әрләмәһен тип, олатаһына ашарға яҙҙамлаша.

Бер саҡ ҡарт ашап ултырғанда тәрилкәне төшөрөп вата. Улы менән килене уға тағы ла нығыраҡ асыулана. Ошонан һуң ҡартҡа ашты пластик тәрилкә менән бирә башлайҙар. Ул тәрилкәне, ғәҙәттә, йыуып тормайҙар, ташлайҙар. Быны күреп торған Хәсән әсәһенә былай ти: "Әсәй, был тәрилкәләрҙе ташлама, улар киләсәктә миңә кәрәк буласаҡ". Атаһы аптырап һорай: "Ниңә кәрәк булыр тиһең улар һиңә?" "Һеҙ ҡартайғас, мин дә һеҙгә ашты ошо тәрилкәләргә һалып бирермен", - ти Хәсән.

Әсәй менән атайға үҙ ҡылыҡтары өсөн оят булып китә. Улар ошонан һуң ҡартты тағы ла өҫтәл артына ултырта башлай.

Әгәр ҙә был ҡарттың улы менән килене әсәй менән атайға күрһәтелгән изгелек кешене ожмах ҡапҡаһына килтереүсе иң яҡшы сифат икәнен белһә, былай йәмһеҙ ҡыланмаҫ ине. Бәйғәмбәребеҙ нисек яҡшы әйткән:"Ата-әсәһен шатландырған кешегә Хоҙай рәхимле. Ә ата-әсәһен илатҡанға Хоҙайҙың асыуы төшәр".

ЗАУЫҠ



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Күмәк булғас, бала-саға
Һуғышмай үсмәй инде,
Һуғыша-илай үскән саҡтар
Күңелдән китмәй инде.

Береһен яклап, береһен әрләп
Әсәйем айырманы:
Кәрәк булһа, бөтәбеҙҙе
Бер юлы ҡайыҙланы.

Күмәкләшеп илай инек,
Танауҙы тарта-тарта,
Белә инек: әрләһә лә,
Әсәй беҙҙе ярата!

Әсәй беҙгә әйтә ине:
"Талашмағыҙ көн аша!
Ағай-эне талаша ла,
Атҡа менһә, яраша!"

Һаман шулай. Ғүмер буйы,
Юҡ-барға үпкәләшеп,
Сәкәләшеп алабыҙ ҙа,
Осрашабыҙ гөрләшеп.

Артыҡ ныҡ яратҡанғалыр,
Ҡыҫылып, рәнйетәбеҙ,
Күңел ҡалдырырлыҡ һүҙҙе
Уйламайса әйтәбеҙ.

Ятатҡанға ғына бит ул!
Артыҡ яҡын күргәнгә,
Туғандарҙың яҙмышына
Артыҡ янып-көйгәнгә.

Үҙ-ара сәкәләшһәк тә,
Берәйһе ситтән килеп,
Берәйһенә бер һүҙ әйтһен-
Өйөләрбеҙ эркелеп.

Талашабыҙ, ярашабыҙ,
Шуныһы үкенесле:
Ғүмер сабып үтеп бара,
Көтөп тормайса беҙҙе.

Эх, әсәй юҡ ҡайыҙларға!
Тормай шул ғүмер үтмәй,
Әле беҙгә әсәйемдең
Аҡыл сыбыҡы етмәй!

* * *

"Әсәң ҡәҙерен белмәҫһең,
Үҙең әсәй булмайса",-
Әсәйемде аңламаным,
Ярты ғүмер уҙмайса...

...Юғалтыуҙар, ауыртыуҙар,
Ҡурҡыуҙар, шикләнеүҙәр,
Тулғаҡ әсеһен татымай,
Аңлашылмай был һүҙҙәр.

Өмөт бағлап, бәхет юрап,
Өф итеп үҫтерәбеҙ,
Бер йөрәктең көсөн нисә
Балаға еткерәбеҙ?

Берсә өшөп, берсә бешеп,
Йөрәкте уҫҡа тотоп,
Балаларҙы үҫтерәбеҙ
Эстән генә ут йотоп.

Вайымһыҙлығы баламдың
Йәнгә тейә ҡай саҡта,
Уйлап ҡуям: "Аңламаҫың,
Үҙең әсәй булмайса!"

Әсәй булып, аңлаһындар
Әсәйҙең ҡәҙерҙәрен,
Тик кисермәһендәр ине
Юғалтыу-рәнйеүҙәрен...

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

**(Дауамы бар).**

✓ - Ысынлап та, пациенттарға даими аңлатып торһаң да, улар үҙ һаулыҡтарына, шул иҫәптән тештәрен һаҡлауға шул тиклем битараф. Күптәр профилактика тигәндә ике ятып бер иҫтәренә лә алмайҙар.



ИНТЕРНЕТТАН



# ӘФЛИСУН ҺУТЫН...

## йышыраҡ эс

■ Дәүләт Думаһы депутаттары фастфуд ҡаптарына кешеләрҙе ҡурҡытыусы һүрәттәр баҫырға тәҡдим итә. "Известия" яҙыуынса, законды уйлап табыусылар әлеге мәлдә тейешле закондарға үҙгәрештәр әҙерләй. Фастфуд рекламаһында был продукттарҙың зыяны тураһында мәғлүмәт мотлаҡ булырға тейеш, ти депутаттар. Һимереү, үпкә, йөрәк, бөйөр, бауыр зарарланыуы хәүефе хаҡында белгәндәр был ризыҡтар менән артыҡ мауыҡмаҫ ине, моғайын. Составында трансжир, тәм көсәйтеүсе, тиҙ эшкәртелә торған углеводтар, май, тоҙ күп булғанлыҡтан, фастфуд төрлө сирҙәргә килтерә. Ҡаптарҙың тышына ошо сирҙәрҙең һүрәтләнеше ҡуйырға уйлайҙар ҙа инде. Сауҙа үҙәктәре фастфудты алкоголь менән тәмәкегә тиңләүҙе артыҡ сара, тип иҫәпләй. Быға тиклем Роспотребнадзор һөтлө коктейль менән туңдырма етештереүҙә ҡулланылған ҡатнашмаларҙа хлорамфеникол тигән антибиотик тапҡайны. Микробтарға ҡаршы көрәшеүсе был матдә елеккә зыян килтерә.

■ Иртән әфлисун һуты эсеү күпкә файҙалыраҡ, тип билдәләй Баффало университеты (АҠШ) ғалимдары. Улар 20-40 йәштәге кешеләр араһында тикшеренеүҙәр үткәреп ҡараған. Көн һайын һынауҙарҙа ҡатнашыусылар картуф, омлет һәм ветчиналы сэндвич ашаған. Әммә беренсе төркөм татлы һыу, икенсеһе ябай һыу, ә өсөнсөһө яңы һығылған әфлисун һуты эскән. Анализдар күрһәтеүенсә, әфлисун һуты үҙен иң файҙалы эсемлек итеп танытҡан: "әфлисунлы" төркөмдәгеләрҙең ҡанында глюкоза иң аҙы, ә иммун системаһы өсөн яуап биргән матдәләр күберәк булып сыҡҡан. Шулай уҡ иртәнге аш ваҡытында иң яҡшы эсемлектәр булып йәшел сәй һәм ябай һалҡын һыу иҫәпләнә.

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм тәжрибә аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш ителә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Имеш, бер ваҡыт трамвайҙа берәү теш һыҙлауына зарлана башлаған. Барлыҡ пассажирҙар ҙа бер-береһен бүлдерә-бүлдерә уға төрлө кәңәштәр биргән. Бары тик бер генә пассажир өндәшмәүҙә хуп күргән. Ул - теш һыҙлауының сәбәптәрен һәм уларҙы дауалау буйынса универсаль ысулдар юҡлығын яҡшы белгән теш табибы булған. Уның сирлене тикшермәй тороп, аныҡ кәңәштәр бирергә ярамай икәнен белгән, шуға ла телен тештәре артына йәшереп, аҡыл һатыуҙан тыйылған... Ысынбарлыкта теш ауырыуы шулай ҡатмарлымы? Ошо һәм башҡа һорауҙарыбыҙға яуап эҙләп, Ырымбур медицина академияһының стоматология факультетын тамамлап, хеҙмәт юлын Башҡортостанда башлаған һәм үҙен тиҫтә йыл эсендә тәжрибәле белгес итеп танытып өлгөргән Ырымбур егете Ришат БАЙТИМЕРОВҡа мөрәжәғәт иттек.**



# ТЕЛЕҢ...

## теш артында булһын

- Ысынлап та, стоматологияла ғына түгел, ғөмүмән, медицинала һәр кемгә лә тап килгән йәки һәр кешене лә бер төрлө дарыу менән дауалап булған ысул юҡ. Быны һәр организмдың үҙенсәлеге менән аңлатырға мөмкиндер. Һәм пациенттарҙың иң ҙур хатаһы ла ошондалыр: күршеһе йәки танышы ниндәйҙер дарыу менән дауаланған, уға килешкән, тимәк, ул дарыу яҡшы, тип иҫәпләй бит күптәр. Теш пасталары ла йыш ҡына күршеләр, таныштар әйтеүе буйынса һайлана. Ләкин берәүгә килешкән теш пастаһы барыһына ла тап килә тип уйларға ярамай. Был төптә яңылыш фекер. Мәҫәлән, кемдеңдер тешенә фторлы паста, кемгәләр кальцийлыһы кәрәк, бәғзеләргә бөтөнләй фторһыҙ һәм кальцийһыҙ булһын. Сөнки теш пастаһын табип тәғәйенләүенән башҡа, үҙ белдегең менән йә хаҡы осһоҙ, йә тәме оҡшаған өсөн генә ҡулланыу тештәргә һәм теш ҡаҙнаһына зыян ғына килтереүе мөмкин. Әлбиттә, бөгөн һайлау өсөн ассортимент күп, уларҙың һәр ҡайһыһы, рекламаға ышана башлаһаң, кәм тигәндә ете ауырыуға дауа, тигәндәй. Хатта ҡайһы бер пасталар теш тамырҙарының кариесын да дауалай, имеш. Әммә был ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Шуға күрә, иң мөһиме - һәр кем үҙенә тап килгән теш пастаһын һайларға һәм тештәрҙе дөрөҫ итеп таҙартырға тейеш.

**➔ Аллаһы Тәғәлә үҙе белеп биргән икән, тимәк, тештәрҙең дә организмдағы роле ҙур, ләкин уларҙы тейешенсә тәрбиәләмәйбеҙ генә...**

- Эйе, тештәр кешегә аҙыҡты тешләү, эҙәү һәм сәйнәү өсөн бирелгән. Ниндәй генә ризыҡ булмаһын, ул иң элек ауыҙ ҡыуышлығында эшкәртелеү процесын үтергә, йәғни айлап, оҙаҡ итеп сәйнәлергә тейеш. Ә беҙ, ғәҙәттә, нимә эшләйбеҙ? Ҡабаланҡарһалан ғына аяҡ өҫтө ҡапҡылайбыҙ ҙа, һуңынан инде ашҡаҙан, эсәктәр менән проблемалар башлана. Шуға ла һәр теш табибы тештәрҙең тәү сираттағы тәғәйенләнешенә - уларҙың сәйнәү функцияһына иғтибар итә. Пациенттар өсөн тештәр бары тик йылмайыу - имидж өсөн генә кәрәккәндәй тойола. Быға, моғайын, ап-аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайыусылар төшөрөлгән реклама роликтары ла йоғонто яһамай ҡалмайҙыр. Ошондай имидж артынан ҡыуыусыларҙың, ғәҙәттә, алғы тештәре ап-аҡ булып ялтырап тора, ә инде аҙау тештәре юҡ.

Хәҙер йылмайыу имиджға әйләнгән заманда күптәрҙең ап-аҡ тешле булғыһы килә. Шуға улар тештәрен ағартырға теләй. Дөрөҫөн әйткәндә, тештәрҙе ағартыу - зарарлы. Бының өсөн нигеҙҙә кислота ҡулланыла. Махсус нур менән дә таҙартыу ысулы бар, әммә ул бик ҡиммәт тора. Кислота менән ағартылған теш бер, ике йыл үткәндән һуң тағы ла ҡарараҡҡа һәм һиҙгерерәккә әйләнә. Әммә ҡайһы берәүҙәргә ваҡытлыса ғына булһа ла ап-аҡ тешен күрһәтеп йылмайыу ҡәҙерлерәк. Әлбиттә, хәҙер медицина көндән-көн алға бара, яңы ҡаҙаныштар яулай. Алып ҡуйыла торған тештәр, имплантанттар бар, хатта теште үҫтерергә лә мөмкин. Матурлыҡ ҡорбан талап итә, тиҙәр, әммә бындай ҡорбан кәрәкме икән?

**➔ Ниндәй генә медицина белгесе булмаһын, үҙ өлкәһенә ҡағылышлы һорау биргәндә халыҡтың үҙ сәләмәтлегенә ҡарата битараф булыуына борсолоу белдерә. Ошо әйтелгәндәрҙән сығып, кешеләр тештәренә бөтөнләй иғтибар бирмәй, тип әйтергә мөмкиндер?**

- Ысынлап та, пациенттарға даими аңлатып торһаң да, улар үҙ һаулыҡтарына, шул иҫәптән тештәрен һаҡлауға шул тиклем битараф. Күптәр профилактика тигәндә ике ятып бер иҫтәренә лә алмайҙар. Элек ауылда беҙҙә лә теш бик нығ һыҙлаһа ғына дауаханаға алып баралар ине. Хәҙер ҙә шул тенденция һаҡлана. Ҡала шарттарында иһә мөмкинлектәр күберәк. Ата-әсәләр балаларының тештәре торошона етди иғтибар бирә. Әлбиттә, тештәрҙе боҙолмаҫтан алда, проблемалар булмағанда тәрбиәләй башларға кәрәк. Боҙола башлаһа, уны таҙартырға, пломба ҡуйырға кәрәк. Бәғзеләр коронка ҡуйҙыра. Теш боҙола башлаһа, шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итмәйенсә, уның нервыға тиклем төшөүен көтөп йөрөп, тешһеҙ ҡалырға ла мөмкин.

**➔ Иң таралған теш ауырыуҙары һәм уларҙың ниндәй эҙемтәләргә килтереү ихтималлығы менән таныштырып китәйек, булмаһа...**

- Медицина алға бара, тиһәк тә, теш ауырыуҙары ла бер урында ғына тормай, улар ҙа арта. Шулай ҙа иң күп таралған теш ауырыуы булып һаман да кариес ҡала. Ул ҡайҙан, нисек барлыҡҡа килә һуң? Мәҫәлән, ашағандан һуң тешегеҙҙе таҙартмаһығыҙ икән, уның эмалена микроорганизмдар, бактериялар ултыра башлай. Улар яйлап ҡына тупланып, теш менән берләшә һәм уның эмаль структураһын ашай, емерә. Ғәҙәттә, кариес щетка барып етмәгән йәки ауыр таҙартылған урындарҙан башлана. Ул яман шеш һымаҡ: тешкә эләгә икән, ундағы бөтөн нәмәне ашай. Иң тәүҙә эмаль ҡатламын емерә. Артабан инде йомшағыраҡ ҡатлам - дентинға барып етә. Дентинды ашап, яйлап төпкә, нервыға төшә. Кариес бер төрлө генә түгел. Тәүҙә эмалде бер урындан ашап, туранан-тура нервыға төшөүе, йәиһә теште тулыһынса ашап, һуңынан ғына нервыға төшөүе мөмкин. Ҡайһы осраҡта ла белгескә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Сөнки кариес нервыға тиклем төшһә, нервыны алырға кәрәк. Йәғни теш теренән үлегә әйләнә. Быны ниһе насар? Тере теш даими туҡланып тора, эсендә нервыһы, ҡан тамырҙары бар. Ул үҙенә кәрәкле матдәләрҙе, йәшәү, һаҡланыу өсөн кәрәкле элементтарҙы ашаған, теш таҙарткан ваҡытта ала. Нервыһын алғас, ул үлегә әйләнә. Ике-өс йылдан уның төҫө үҙгәрә. Теш үле булғас, уларҙа пломба ла тормай. Тештәр араһындағы кариестың икенсе тешкә лә күсеүе мөмкин. Шуға ла тештәрҙе таҙартҡанда бер генә микроб та ҡалдырмаҫҡа кәрәк. Нервты алыу пульпит тип атала. Пульпиттан һуң да кариес үҙ эшен дауам итә. Тағы ла аҫкараҡ төшөп, тамырҙы ашай башлай. Йәғни тештең нервыһы юҡ, әммә уның эсендә микробтар мыжғый һәм аҫҡа төшә. Бындай осраҡта инде киҫкенләшеү формаһы башлана, ул периодонтит тип атала. Был осраҡта кеше саҡ ҡына аяғын йәки башын өшөтһә, ауырыуҙың хроник стадияһы киҫкенләшеү стадияһына күсә, теш эренләп шешә башлай. Тештәре шешкәс тә табипҡа мөрәжәғәт итмәгәндә процесс абсцесҡа (эренле инфекцион процесс) әйләнә. Һөҙөмтәлә флегмона, периостит һ.б. башлана, йәғни эрен һөйәккә ашай. Хәҙер шундай күренеште күҙ алдына килтерегеҙ: аҫҡы янаҡта барлыҡ тештәрҙе бербереһе менән тоташтырып тороусы канал бар. Әгәр бер теш шешеп, эренләп йөрөп, кариес һөйәкте ашай башлай икән, ошо канал буйынса ул икенсе тештәргә лә күсә. Йәғни уларҙың һөйәген эстән ашай. Һөҙөмтәлә тештәр бушап, үҙҙәренән-үҙҙәре төшә башлай. Сөнки уларҙы тотоп тороусы һөйәк юҡ. Шуға күрә тештәрҙе бындай сиккә алып барып еткерергә ярамай. Әгәр периодонтит аҙып китә икән, ауырыуға яңаҡ-йөҙ хирургтарына барырға тура киләсәк. Улар инде каналдарҙы таҙартасаҡ. Был үҙенә күрә бәләкәй операция.

**➔ Шулай уҡ пародонтоз, пародонтит та киң таралған. Улар нимәнән барлыҡҡа килә?**

- Был осраҡта күп нәмә һыуҙан тора. Хатта пациенттарҙың ҡайҙа эшләүен тештәренә ҡарап та асыҡларға мөмкин. Күптәренән "Себерҙә эшләйһеңме?" тип һораһаң, "Эйе" тип яуаплайҙар. Себерҙә, ысынлап та, һыу бик насар. Ул кемдеңдер тешенә, кемдеңдер ашҡаҙанына кире йоғонто яһай. Икенсе сәбәп - нәҫелдән күскән фактор. Үкенескә күрә, сир атайҙан йәки әсәйҙән килә.

✔ *Проблемаларҙы һөҙөмтәле хәл итеү һәләте ҡаршылыҡтарға ҡаршы тороу һәм уларҙы йырып сығыу тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килә. Һәр саҡ, сираттағы проблеманы хәл иткәндән һуң, ошо өлкәлә оҫтарағыҙ.*



Хәҙер стоматология буйынса дарыуҙарға ҡытлыҡ юҡ. Содалы иретмә, хлорогексидинлы теш пасталары барлыҡҡа килде. Әммә уларҙы үҙ белдегеңә ҡулланырға ярамай, дауалаусы табип тәғәйенләргә тейеш.

**➔ Нимә генә тиһәң дә, күптәр тештәрен тикшертергә барыу ғына түгел, стоматолог һүҙенән дә уттан ҡурҡҡандай ҡурҡа...**

- Шуныһы ҡыҙыҡ: йәштәр түгел, ә бына өлкән быуын араһында бындай хәл йыш күҙәтелә. Улар бор-машинаны күреүгә ҡалтырап, дерелдәп төшә. Моғайын, был элекке тәьҫораттары менән бәйлелер, тип уйлайым. Ҡасандыр тешен ауырттырып дауалағандар йәки һурғандарҙыр ҙа, шул ҡурҡыу кешелә ғүмер буйына психологик эҙ ҡалдыра һәм уны еңеүе бик ауыр. Хәҙерге саралар менән кеше ауыртыуҙы һиҙмәй ҙә, әммә барыбер, ҡасан ауырта башлар икән, тип көтә. Ғөмүмән, хәҙер балаларға ла матур итеп мөрәжәғәт итеп, алдаштырып ҡына тешен һуралар йәки тикшерәләр. Элекке кеүек, ауыҙыңды ас, ауыҙыңды яп, тигән бойороҡтар юҡ. Бигерәк тә шәхси клиникаларға шундай йомшаҡ, матур һөйләшкән, балаларҙың психологияһын аңлаған, улар менән уртаҡ тел тапҡан табиптарҙы ғына эшкә алалар. Әгәр ҙә тупаҫ теш табибы эләгә икән, балаларығыҙҙы уларға йөрөтмәгеҙ, тип кәңәш итер инем, сөнки уның ошо кире тәьҫораты ғүмер буйына һаҡланып ҡала, психикаһына йоғонто яһай.

**➔ Тештәрҙе көнөнә нисә тапҡыр һәм нисек дөрөҫ таҙартырға?**

- Тәү сиратта, щетканы дөрөҫ һайларға кәрәк. Уны өс ай һайын алмаштырып тороу зарур. Щетканың ҡылы уртаса ҡатылыҡта булһын. Ғәҙәттә, улар йомшаҡ, уртаса һәм ҡаты ҡыллы була. Йомшаҡ ҡыллыһы тешкә ултырған микробтарҙы, теш араһындағы аҙыҡ ҡалдығын таҙартып бөтөрә алмай, ҡаты ҡыллыһы иһә бик ныҡ таҙарта һәм ҡаҙнаны ғына түгел, эмалде лә зарарлауы мөмкин. Шулай уҡ теште таҙартҡанда щеткаға ныҡ баҫым яһарға ярамай, еңелсә генә, түңәрәк яһап таҙартыу - иң яҡшыһы. Шулай уҡ мотлаҡ рәүештә телде лә таҙартыу кәрәк.

Нисә тапҡыр ашайһығыҙ, шул саҡлы тешегеҙҙе йыуыу зарур. Мәҫәлән, күптәр иртән йоҡонан уяна ла, тәү сиратта, тешен таҙарта. Һуңынан ултырып ашай ҙа, ҡабат тешен таҙартып тормай, сайҡап ҡына ҡуя. Тәүҙә теште сайҡап, сафландырып, ашағандан һуң уны ныҡлап таҙартып йыуыу урынлыраҡ. Йә булмаһа, ашар алдынан йыуаһығыҙ икән, ашағандан һуң тағы бер тапҡыр йыуып ҡуйығыҙ. Йоҡлар алдынан теште таҙалағас, мотлаҡ теш ептәре менән араларын таҙартырға кәңәш итер инем. Хәҙер теш ебен ҡулланыу мотлаҡ, сөнки ит, балыҡ кеүек ризыҡ теш араһына инеп ҡала ла, щетка уны таҙартып сығара алмай. Һөҙөмтәлә теш араһындағы аҙыҡҡа микробтар ултырып, улар ҡарая башлай. Шулай уҡ тешеңде таҙарттың да, бер аҙ торғас, шоколад йәки кәнфит ашаның икән, һуңынан тағы ла тешеңде йыуырға кәрәк. Кариес шәрбәтте тиҙ тойомлай. Шәрбәт былай ҙа йәбешкәк була, тешкә лә шулай йәбешеп ҡала һәм тап шул урында кариес башлана. Күҙәтеп ҡараһағыҙ, кариес алғы тештәрҙә түгел, ә тап артҡы, аҙау тештәрҙә башлана. Шуға күрә, балаларҙы тәмтом ашауҙан сикләргә кәрәк.

**➔ Стоматологияла профилактика нимәнән ғибәрәт?**

- Ярты йыл һайын мотлаҡ тештәрегеҙҙе табипҡа күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ уларҙы даими рәүештә һәм дөрөҫ таҙартыу зарур. Ярай, бер тапҡыр йыумағандан нимә булыр тиһең, тип ялҡауланғанда ла, шунда уҡ тештәргә микробтар, бактериялар ултырасаҡ. Халыҡтың менталитеты шулай: ауыртмай икән, табипҡа күренеүҙең хәжәте юҡ, тип уйлай. Академияла уҡығанда уҡытыусыларыбыҙ һөйләп аптырата ине: финдар Санкт-Петербургҡа насар, серек, ауырыу тештәрҙе китаптан түгел, ә ысынбарлыҡта күрер өсөн килә икән. Улар өсөн ауыҙ эсендә насар, боҙолған, ауырыу теш булыуы, боҙолған теш ҡаҙнаһы, ауыҙ ҡыуышлығы - башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Уларҙа ундай күренеш юҡ. Улар һәр ярты йыл һайын теш табибына килеп, тикшерелеп тора. Беҙҙә иһә бик һирәк кешеләр генә даими рәүештә табипҡа күренә. Күптәр ваҡыт етмәүгә һылтана. Эйе, быға тиклем һау тип йөрөгән тештәре боҙола, һыҙлай, борсой башлаһа, ваҡытын да табалар, әммә мөһим мәл үткән була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Намыҫ менән тештәр араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар? Кемдер: "Намыҫ та тештәр кеүек: ауырта икән, йә дауаларға, йә алып ташларға кәрәк", - тип әйтеүе мөмкин. Ләкин "намыҫыңды йәштән һаҡла!" тигән әйтем дә бар икәнен онотмайыҡ. Аҡыллыға ишара был. Үҙен ихтирам иткән кеше бер ваҡытта ла намыҫын бысратыу түгел, хатта уның тапланыуына ла юл ҡуймаясаҡ. Тимәк, ул намыҫына һәр саҡ тоғро ҡаласаҡ. Үҙен ихтирам иткән кеше һәр саҡ тештәрен ҡарап, тәрбиәләп торасаҡ һәм улар уға оҙаҡ йылдар тоғро хеҙмәт итәсәк. Бары тик шул ғына...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# ТОЛ ҠАТЫНДАР

**Был тормошта һәр кемдең үҙ юлы, үҙ яҙмышы, тип бушҡа әйтмәйҙәрҙер. Киләсәктә нисек йәшәйәсәгең, ғүмер юлың ниндәй һуҡмаҡтан китерен үҙең һайлаған кеүек булһаң да, Яҙмыш ғәли йәнәптәре менән дә иҫәпләшергә тура килә шул. Түбәндәге яҙмам бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған ике яҙмышлы тол ҡатындар тураһында.**

...Ҡәйнәһенең вафатына бер йыл. Әлмира Ҡөрьән ашына әҙерләнә, яңы ғына донъя көтә башлағандай тулҡынлана үҙе. Ун ете йәшендә ата-әсәһеҙ ҡалып, ҡайғыларҙы етерлек татырға тура килде уға. Училище бөткән йылды Ринатҡа кейәүгә сыҡты. Тәүҙә ҡәйнәһе уҫал, бигерәк талапсан тойолһа ла, әллә үҙе түҙҙе, әллә бер-береһенә өйрәнеп киттеләр. Әлмира 19 йыл ҡәйнәһе менән бер өйҙә йәшәне, уға ярарға тырышты, күндәм һәм тырыш булды. Ринат төпсөк малай булғас, әсәһе янынан күсеп китергә теләмәне. Ире үлеп киткәс, ике бала менән ҡалған Әлмира ҡәйнә йортон ташлай алманы. Ҡәйнәле-киленле бер-береһенә терәк булып йәшәнеләр шулай. Әбей һуңғы һулышын алғанда янында Әлмира ултырҙы. Килене һәм ейәндәренә риза булып, фатихаларын биреп, баҡыйлыҡҡа күсте Рәхимә әбей. Кешенең ниндәй дәрәжәлә ҡәҙерле булғанын юғалтҡас ҡына аңлайһың. Әбей киткәс, өй бушап ҡалған, йәмһеҙләнеп киткән кеүек тойолдо. Яҡын кеше, кәңәшсе булған икән шул ҡәйнәһе. Кәрәк саҡта әрләгән дә, һине үҙ балаһындай аңлаған да...

Ҡырҡты уҙғансы төҫ ташламаған Әлмира мәрхүм иренә тоғро ҡалды, башҡа ирҙәргә ҡараманы ла, яҡын да юлатманы. Бына әле Ҡөрьән ашында ул ире һәм ҡәйнәһе рухына доға ҡылдырып, уларҙы матур һүҙҙәр менән иҫкә аласаҡ. Табын мул итеп әҙерләнгән. Төрлө бәлештәр, емешеләк, кәнфиттәрҙең ниндәйе генә юҡ. Әбейҙең балалары барыһы ла ҡайтҡайны. Хәйер-саҙаҡалар мул таратылды. Әсә нигеҙен, йорт бәрәкәтен һаҡлап килгән килендәренә рәхмәттәр уҡып таралды туғандар...

...Шул уҡ ауылда ошо уҡ мәлдә тағы ла бер өйҙә аят уҡытыла. 33 йәшендә генә үлеп ҡалған Фәнилдең ҡырҡы бөгөн. Бер-нисә көн элек мәрхүмдең апаһы килененә шылтыратҡайны, килене: "Апай, ҡырҡын үткәрергә аҡсам юҡ бит әле, ит тә бөткән. Ҡыйын булмаһа, ризыҡтарҙы үҙегеҙ алып килегеҙ инде", - тип белдерҙе. Ҡустыһын юғалтыу ҡайғыһынан ныҡлап иҫенә лә килмәгән апаһы аҙыҡ-түлекте мул алды, бер нәмәгә лә аҡсаһын йәлләмәне. Ҡустыһы риза булып, рәнйеп ятмаһын, тип тырышты. Ҡөрьән ашына саҡырылғандарҙың барыһы ла килде. Мулла моңло тауыш менән сүрәләр уҡыны. Әҙәм ғүмерҙәренең ҡыҫҡа булыуын уйлап, ҡайһы берәүҙәрҙең күҙе йәшкәҙәне. Хәйергә яулыҡ-таҫтамалдар таратылды. Яулыҡ таратҡанда бер ҡатын: "Көрән төҫтәге яулыҡ бирҙегеҙ, матур биҙәклеһен йәлләнегеҙ", - тип ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Хәйерҙең ниндәйенә лә риза булырға кәрәклеген аңламайҙыр Алла бәндәһе...

Фәнилдең дуҫтары, синыфташтары ла килгәйне табынға. Ана, иң яҡын дуҫы Әмир һаман шаңҡыуынан арына алмай, ҡараштары бер нөктәгә төбәлгән. Фәнил дуҫының йылмайыуы һаман күҙ алдында тороуын күҙ йәштәре аша әйтеп ҡуйҙы. Икенсегә тол ҡалған Нурсилә генә кисерештәрен һиҙҙермәй. Халыҡ араһында ундайҙарҙы "ҡара тол ҡатын" тип йөрөтәләр. Яҙмыштың уҫал шаярыуымы, башҡа берәй көс менән бәйлеме - йәш ҡатындың икенсе ире лә теге донъяға күсте.

Мәрхүмдең рух-шәрифенә арналған Ҡөрьән ашы тамам булды, туғандары бер аҙ тынысланып, үҙ өйҙәренә таралды. Кисен Нурсилә тыуған көнөнә тип ҡунаҡтар йыйҙы. Шул уҡ көндә тыуған көн үткәреү уның өсөн бик тә уңайлы ине бит. Өҫтәле туп-тулы ризыҡ, аш бешереп аҙапланаһы түгел. Тағы ла өс көндән тол ҡатынға бер ир күсеп килде. Бер-нисә йылдан үҙе лә гүр эйәһе буласағын белһә, моғайын, килмәҫ ине...

**Римма ӘХМӘТЙӘНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Проблемаларығыҙҙы проблема итеп ҡалдырмағыҙ

Улар, хатта ҡолаған хәлдә лә, төп маҡсаттан ситләшмәй. Йоғонтоло лидерҙар был тормошта алға барыу "үрҙән - үргә" принцибы буйынса тормошҡа ашырылғанын аңлай. Төп ҡарарҙы улар күтәрелеш ваҡытында ҡабул итә һәм болғаныш ваҡытында бындай ҡарар ҡабул итеүҙән тыйылып тора. Милли футбол лигаһы һаҡсыһы Боб Чристиан "Спорттан китергә ваҡыт түгелме икән, тигән һорау буйынса ҡарарҙы бер ваҡытта ла күнекмә йыйындары ваҡытында ҡабул итмәйем", тип белдерә. Ул иң яҡшы формала булмаған ваҡыт - "аҡ әләм" күтәреү ваҡыты түгел икәнлеген яҡшы аңлай.

Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар. Яҙыусы-публицист Джордж Мэтью Адаме: "Тормошоғоҙҙа нимә һәм нисек уйлауығыҙҙан да мөһимерәк нәмә юҡ. Был һеҙ күпме аҡса эшләүегеҙгә, ҡайҙа йәшәүегеҙгә, йәмғиәттә тотҡан урынығыҙға, һеҙҙең турала кемдеңдер нимәлер тип уйлауына ҡарағанда ла мөһимерәк", - тигән. Һәр килеп тыуған проблема үҙегеҙҙе яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Ул һеҙҙең нисек уйлауығыҙҙы һәм ниндәй материалдан эшләнгәнлегегеҙҙе күрһәтә.

Проблема менән күҙгә-күҙ тороп ҡалғанда ниндәй хис кисерәһегеҙ? Уға күҙ йомоп, ул үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр, тип өмөтләнәһегеҙме? Уны хәл итер көсөгөҙ юҡ, тип уйлайһығыҙмы? Үткән тормошоғоҙҙа, ниндәйҙер проблеманы хәл итергә тотоноп, һуңынан ҡурҡып, уны ташлап ҡуйғанығыҙ булдымы? Әллә һеҙ теләһә ниндәй проблеманы ла хәл итә алам тип тотонаһығыҙмы? Проблемаларҙы һөҙөмтәле хәл итеү һәләте ҡаршылыҡтарға ҡаршы тороу һәм уларҙы йырып сығыу тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килә. Һәр саҡ, сираттағы проблеманы хәл иткәндән һуң, ошо өлкәлә үҙегеҙҙең оҫталығығыҙҙы арттыраһығыҙ. Әгәр бер ҡасан да проблеманы хәл итеп ҡарағанығыҙ булмаһа, бер ҡасан да уңышһыҙлыҡҡа осрамаһағыҙ, ҡабат-ҡабат еңергә тырышмаһағыҙ, бер ваҡытта ла был өлкәлә оҫта була алмаясаҡһығыҙ.

**Өйгә эш: Проблемаларҙы яҡшыраҡ хәл итергә өйрәнеү өсөн, түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- **Ауырлыҡтар эҙләгеҙ.** Әгәр оҙаҡ ваҡыт проблемаларҙан ҡасып йәшәһәгеҙ, тиҙ генә йәшеренгән урынығыҙҙан сығып, уларҙы эҙләй башлағыҙ. Улар менән көрәштә аныҡ тәжрибә туплап ҡына ауырлыҡтарҙы еңә алыу һәләтегеҙ камиллаша барыр. Тәртип урынлаштырыуҙы талап иткән хәлторошто табығыҙ, бер нисә тормошсан юл табығыҙ һәм уларҙы проблемаларҙы сисеү тәжрибәһе булған лидерға һөйләгеҙ. Уның фекер йөрөтөүе буйынса ауырлыҡтар килгәндә уның нисек уйлауын күрерһегеҙ һәм үҙегеҙ өсөн файҙалы нәмәләр алырһығыҙ.
- **Ысул уйлағыҙ.** Ҡайһы берәүҙәргә төрлө проблемаларҙы хәл итеү бик ауыр һәм улар уның ҡайһы осонан башларға белмәй аптырай. Түбәндәге ысулды ҡулланып ҡарағыҙ: *Асыҡлау* - аныҡ проблеманы табыу өсөн ваҡыт йәлләмәгеҙ. *Анализ* - башҡалар шундай хәлдә ҡалһа, нимә эшләр ине икәнлеген анализлағыҙ. *Ярҙам итегеҙ* - командағыҙ проблеманың барлыҡ аспекттарын да өйрәнһен. *Ижади ҡараш* - "мейе һөжүме" ярҙамында бер нисә юл һайлағыҙ. *Тормошҡа ашырыу* - иң яҡшы юлды һайлап, проблеманы хәл итегеҙ.
- Үҙегеҙҙе проблемаларҙы хәл итә белгән кешеләр менән уратығыҙ. Әгәр проблемаларҙы сифатлы итеп сисә белмәйһегеҙ икән, командағыҙға быны белгән кешеләрҙе саҡырығыҙ. Улар шунда уҡ һеҙҙе "күкрәге менән ҡаплаясаҡ", бынан тыш, уларҙан күп нәмәгә өйрәнәсәкһегеҙ.

# ҒӘҘЕЛ ҠАЛА ТӨҘӨЙӨК!

## НИКИТИН В.И.

Өфө ҡала Советына 14-се һайлау округы буйынса депутатлыҡҡа кандидат



"Әгәр юл ҡорамға илтмәй икән, уның ниңә кәрәге бар?" - был тәрән мәғәнәле хәҡиҡәт "Майбург" проекты өҫтөндә эшләгән ваҡытта тулыһынса асылды, - ти Өфө ҡала округы Советына депутатлыҡҡа кандидат Владислав Никитин. - Беҙ тәүҙән үк торлаҡ майҙанын комплекслы төҙөү идеяһын тормошҡа ашырҙыҡ. Ә комплекслы төҙөлөш нимәне аңлата? Юғары тормош кимәле һәм кешеләрҙең уңайлылығы нимә ул? Ул бары тик торлаҡ йорттарҙың магазин, мәктәп, парковкалар һәм юлдар менән берлегеме? Ә кеше иң мөһим ихтыяжын - үҙенең, ата-олаталарының диненә мохтажлығын нисек ҡәнәғәтләндерергә тейеш?

Һорауға яуап үҙенән-үҙе табылды - "Майбург"тағы төп йәйәүлеләр юлы ҡорамға илтергә тейеш. Ләкин күп милләтле һәм күп конфессиялы республикабыҙҙа, быуаттар буйы мосолмандар һәм православие, иудаизм динен тотоусылар дуҫ, татыу йәшәгән баш ҡалала нимәне һайларға, ҡайһы дингә өҫтөнлөк бирергә?

Шулай яңы ҙур биҫтәнең төҙөлөш проектына йәйәүлеләр-транспорт үҙәген индереү идеяһы тыуа. Ул ике яҡтан да дини-культ ҡорамдарының матур архитектура объекттары менән тамамланырға тейеш. Был район кешеләренә үҙҙәрен һәр саҡ дин, уның гуманлы принциптары һәм ҡиммәттәре менән бәйләнештә булыуын тойорға ла ярҙам итәсәк.

Владислав Никитиндың һүҙе эшенән айырылмай - был уның шәхси һәм һөнәри сифаты. Бер нисә йыл яуаплы вазифаларҙа эшләү уға тәжрибә генә килтереп ҡалмай, ә киң масштабта уйлай, алдан күрә белеү, хәл-торошто төрлө яҡлап баһалау һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү һәләтен үҫтерә.

Республиканың ике төп конфессия етәксеһе - Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты рәйесе, баш мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, Өфө һәм Стәрлетамаҡ митрополиты Никон менән кәңәшләшеү һөҙөмтәһендә үҙенсәлекле юл һайлана - беренсе тапҡыр Өфө тарихында әле саҡ күҙалланған торлаҡ районында мәсет һәм православие сиркәүе торасаҡ.

Буласаҡ мәсет урынына иҫтәлекле билдә һәм буласаҡ сиркәү урынына тәре ҡуйыу ҡышын тормошҡа ашырылһа ла, ошо мөһим ваҡиғала ҡатнашыусыларҙың йөҙҙәренә сыҡҡан шатлыҡты ҡар ҙа, һыуыҡ ел дә ҡаплай алманы. Бынан тыш, тантанаға республиканың тағы бер төп диндәренең береһенең етәксеһен - БР-ҙың Баш Раввины Дан Кричевский ҙа саҡырылғайны. Былар барыһы ла Рәсәй һәм Башҡортостан халыҡтарының күп быуатлыҡ ныҡлы дуҫлығын кәүҙәләндерә. Был проект та ошо традицияларҙы дауам итеүҙең матур бер сағылышы.

Ҡулына мастерок алып, митрополит Никон менән иҫтәлекле билдә ҡуйыу алдынан Шәйхул-Ислам Тәлғәт Тажетдин:

- Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (с.ғ.с.) Мәккә һәм Мәҙинәгә һижрә ҡылғанда, иң беренсе эше итеп мәсет төҙөгән. Ни өсөн ул үҙенә йорт һалмаған һуң? Сөнки мәсеттәр - туғанлыҡ ептәре нығынған урын. Бынан тыш, барлыҡ кешеләр: байы ла, ярлыһы ла, көслөһө лә, көсһөҙө лә Аллаһҡа табыныу өсөн бер рәткә баҫҡан ваҡытта, улар араһында туғанлыҡ хистәре нығына, бер-береһенең хәленә инеү көсәйә. Был йәһәттән мәсет ҡеүәтле социаль әһәмиәткә эйә.

Әйткәндәй, мөфтөй Тәлғәт Тажетдин мәсеттең төп эскизын үҙе эшләй, яңы ҡорамдың образын, манараларының бейеклеген һәм урынлашыуын, уларҙың дәүмәлен аныҡ билдәләй.



Ә яңы мәсет "Майбург"та ғына түгел, баш ҡаланың үҙендә йәшәүсе мосолмандарҙы ла үҙенә саҡырып тороусы үҙәк буласаҡ. Һәм был, ысынлап та, ғәҙел буласаҡ.

"Майбург" һәм унда урынлашҡан ҡорамдар үҙенең волокитаға, кешеләргә һәм йәмғиәткә ҡарата битарафлыҡҡа урын ҡалдырмаған, тормоштоң барлыҡ тармаҡтарында ла, мәҫәлән, торлаҡ-коммуналь хужалығында көнүҙәк булған мәсьәләләрҙән алып, һәр кемебеҙҙең үҙ диненә тоғро булыу ихтыяжына тиклем ғәҙелһеҙлеккә юл ҡуйылмаған тыуған ҡалаһын ихлас яратҡан кешенең һәм гражданиндың ниндәй булырға тейешлеген күрһәтеүсе бер генә миҫал...

Һайлауҙарға үҙ кандидатураһын ҡуйыусы Владислав Никитиндың лозунгыһы тап шулай яңғырай: "Ғәҙел ҡала төҙөйөк!"

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Никитину В. И. в соответствии со ст.65 Кодекса РБ№380-з "О выборах"

# ТВ ПРОГРАММА



## 18 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.05.**

14.05 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". Детективный сериал. 25-я и 26-я серии (16+).
23.30 "Викинги". Исторический сериал (18+).
01.15, 03.05 "Хищник-2". Фантастика (16+).
03.00 Новости.
03.15 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.30.**

14.30, 18.30 Новости.
14.45 "Весело живем" (12+).
14.55 Хоккей. Кубок РБ (12+).
17.30 Новости культуры.
17.45 "Осенние колосья" (12+).
18.45 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - СКА (Санкт-Петербург) (12+).
21.25 "Выборы-2014" (16+).
21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).
22.00 "Следопыт". Пещера "Хазинская" (6+).
22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).
23.00 "Телецентр" (12+).
23.30 "Весело живем" (16+).
24.00 "Еду я в деревню".
00.30 Новости.
01.00 "Встречи на Медео" (12+).
02.15 Н.Асанбай "Райса + Файзи". Спектакль (12+).
05.00 Цикл "Жизнь замечательных людей" (12+).
05.30 "Мелодии души" (12+).
06.15 "Орнамент".
06.30 "Полезные новости" (12+).
06.45 "Замандаштар" (6+).

## 19 АВГУСТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
14.20 "Добрый день" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". 27-я и 28-я серии (16+).
23.30 "Фарго". Сериал (18+).
01.40, 03.05 "Прелюдия к поцелую". Романтическая комедия (16+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).

### БСТ

07.00 "Сәләм!" (12+).
10.00 Мультфильмы.
10.30 "Зеркальце".
10.45 "Царь горы".
11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).
11.15, 06.15 "Орнамент".
11.30, 16.30 Новости.
11.40 "Выборы-2014".
11.45, 01.00 "Сказки старого волшебника" (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).
13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (12+).
14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).
15.15 "Книга сказок".
15.30 "Гора новостей".
15.45 "Акбузат".
16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".
16.40, 21.15 "Выборы-2014" (16+).
16.45 "Дорога к храму".
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.30 Новости культуры.
18.00 "Үткән ғүмер" (12+).
18.45 "Наши годы" (12+).
19.15, 04.30 "Охота на изюбря". Сериал (12+).
20.00 "Правила денег".
20.10 Розыгрыш акции "Счастливый билет" аптечной сети "Фармленд" (16+).
20.30 "Сәңгелдәк".
20.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).
21.00 "Телецентр" (12+).
21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).
22.00 "Уфимское "Времечко".
23.00 "Баик".
24.00 "Еду я в деревню".
02.15 М.Файзи. "Ак калфак" (12+).
04.15 Цикл "Жизнь замечательных людей" (12+).
06.30 "Полезные новости" (12+).

## 20 АВГУСТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (12+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". 29-я и 30-я серии (16+).
23.30 "Фарго". Сериал (16+).
01.20 "Цезарь должен умереть". Драма (12+).
02.45 "Дельго". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Дельго". Окончание фильма.
04.25 "Контрольная закупка".

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 Мультфильмы.
10.30 "Шатлык йыры".
10.45 "Книга сказок".
11.00 "Замандаштар" (6+).
11.15, 17.15, 06.15 "Орнамент".
11.30, 16.30 Новости.
11.40 "Выборы-2015".
11.45, 01.00 "Сказки старого волшебника" (12+).
13.00 "Бэхетнэмэ".
13.30, 14.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).
13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).
14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).
15.15, 16.40, 21.25 "Выборы-2014" (16+).
15.45 "Гора новостей".
16.00 "Семәр".
16.15 "Городок АЮЯ".
16.45 "Здоровое решение" (12+).
17.30 Новости культуры.
17..45 "Алтын тирмә" (6+).
18.30, 22.30 Новости (6+).
18.45 "Наши годы" (6+).
19.15, 04.30 "Охота на изюбря" (12+).
20.00 ФК "Уфа" - наша команда!
20.30 "Сэнгелдэк".
20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).
21.00 "Телецентр" (12+).
21.30 Новости (на русск. яз.).
22.00 "Историческая среда" (6+).
23.00 "Башҡорт йыры" (6+).
23.30 "Автограф" (6+).
24.00 "Еду я в деревню".
02.15 Т.Гарипова "Гильмияза" (12+)
04.15 Цикл "Жизнь замечательных людей" (12+).
06.45 "Замандаштар" (6+).

## 21 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". 31-я и 32-я серии (16+).
23.30 "Фарго". Драматический сериал (18+).
01.20, 03.05 "Ослепленный желаниями". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.25 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### БСТ

07.00 "Сәләм!" (12+).
10.00 Мультфильмы.
10.30 "Шарфест".
10.45 "Цирк в 13 метров".
11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).
11.15, 17.15, 06.15 "Орнамент".
11.30 Новости (на русск. яз.).
11.40, 16.25, 16.40, 21.25 "Выборы-2014".
11.45, 01.00 "Криминальный талант". Худ. фильм (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).
13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).
14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).
15.15 "Ғәләмәт донья".
15.30 "Гора новостей".
15.45 "Шәп арба".
16.00 "Йырлы кәрәҙ".
16.15, 20.15 "Учим башкирский язык".
16.30, 21.30 Новости (16+).
16.45 "Живое село".
17.30 Новости культуры.
18.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"
18.45 "Наши годы" (6+).
19.15, 04.30 "Охота на изюбря". Сериал (12+).
20.00 "Весело живем" (12+).
20.30 "Сэнгелдэк".
20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).
21.00 "Позывной "Барс" (12+).
21.15 "Наука 102".
22.00 "Аль-фатиха".
23.00 "Телецентр" (12+).
23.30 "Автограф" (6+).
24.00 "Еду я в деревню".
02.15 Т.Ганиева. "Тамарис". Спектакль (12+).
04.15 Цикл "Жизнь замечательных людей" (12+).

## 22 АВГУСТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Поле чудес" (16+).
19.50, 21.30 "Точь-в-точь".
21.00 "Время".
23.25 "Агнета: "АББА" и далее..."
00.30 "Тонкая красная линия". Боевик (16+).
03.40 "В наше время" (12+).
04.35 "Контрольная закупка".

### БСТ

07.00 "Сәләм!"
10.00 Мультфильмы.
10.30 "Городок АЮЯ".
10.45 "Ғәләмәт донья".
11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).
11.15, 19.15 Дневник Кубка мира по хоккею среди молодежных клубных команд.
11.30, 16.30 Новости.
11.40, 16.40 "Выборы-2014".
11.45, 01.00 "Криминальный талант". Худ. фильм (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.30, 18.30, 00.30 Новости.
13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).
14.30 Новости (на башк. яз.) (12+).
14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).
15.15 "Зеркальце".
15.30 "Каникулы Нестрогого режима".
15.45 "Байтус" (6+).
16.00 "Сулпылар".
16.15 "Учим башкирский язык".
16.45 "Путь к счастью" (6+).
17.00 "История признания" (6+).
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.30 Новости культуры.
18.00 "Йома".
18.45 "Наши годы" (6+).
19.30 Открытие Кубка мира по хоккею среди молодежных клубных команд.
23.00 "Попкорм" (16+).
23.30 "Народное кино" (12+).
24.00 "Еду я в деревню".
02.15 Спектакль (12+).
04.30 Цикл "Жизнь замечательных людей" (12+).
06.15 "Орнамент".
06.30 "Полезные "Новости" (12+).

## 23 АВГУСТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 06.10 "Убийство в Саншайн-Менор". Худ. фильм (16).
06.00 Новости.
06.45 "Лучшее лето в нашей жизни". Худ. фильм (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Игорь Ливанов. С чистого листа" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Каникулы строгого режима". Худ. фильм (12+).
16.00 Фестиваль бардовской песни.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.20 "Две звезды". Музыкальное шоу.
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым. (16+).
23.10 "КВН". Премьер-лига" (16+).
00.40 "Последствия любви". Криминальная драма (16+).
02.40 "История Антуана Фишера". Худ. фильм (12+).
04.50 "В наше время" (12+).

### БСТ

07.00 Новости (на башк. яз.).
07.15 "Доброе утро!"
08.45 "Сәләм+" (12+).
09.00 Мультфильмы.
09.30 "Здоровое решение" (12+).
10.00 "КЛИО" (6+).
10.45 "Большой чемодан" (6+).
11.15 Дневник Кубка мира по хоккею среди молодежных клубных команд.
11.30 "Аль-фатиха".
12.00 "Следопыт. Пещера "Олимпия" (6+).
12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).
12.45 "Үткән ғүмер" (6+).
13.15, 06.30 "Замандаштар" (6+).
13.45, 18.30, 06.00 "Весело живем" (6+).
14.00 "Дарю песню".
16.00 "Мустай Карим".
17.00 "Году культуры посвящается" (6+).
17.15 "Зекерия Акназаров" (6+).
18.00 "Башкорттар".
18.45 "Полезные новости" (12+).
18.55 Кубок мира по хоккею среди молодежных клубных команд. МХК "Спартак" (Москва, Россия) - "Мальме-Редхокс" (Швеция). (12+).
21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).
22.00 "Живое село".
23.00 "Дарман".
23.45, 04.15 "Праздник любви". Худ. фильм (12+).
01.30 Жемчужины Башкортостана" (6+).
02.30 А.Хусаинов. "Бандабика и Еранса сэсэн" (12+).

## 24 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Лучшее лето нашей жизни". Худ. фильм (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Среда обитания" (12+).
14.10 "Что? Где? Когда?"
15.15 "Молодые миллионеры" (12+).
16.20 "Минута славы" (12+).
17.45 "Куб". Игровое шоу (12+).
18.50 "ДОстояние РЕспублики".
21.00 "Время".
22.30 "Повтори!" Шоу перевоплощений (16+).
00.40 "Жемчужина Нила". Приключения (16+).
02.40 "Приключения хитроумного брата Шерлока Холмса". Худ. фильм (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### БСТ

07.00 Новости (на башк. яз.) (6+).
07.15 "Доброе утро!"
08.30 "Йома".
09.00 "Автограф" (6+).
09.30 Мультфильмы.
10.00 "Физ-ра".
10.30 "Дети-герои".
10.45 "Городок АЮЯ".
11.00 "Бауырһаҡ" (6+).
11.15 Дневник Кубка мира по хоккею среди молодежных клубных команд.
11.30 "Сулпылар".
11.45 "Алтын тирмә".
12.30 Новости недели.
13.00 "Тәмле" (12+).
13.30 "Башкорттар".
14.00 "Дарю песню".
15.55 Кубок мира по хоккею среди молодежных клубных команд.
18.30 Вестник "Газпром трансгаз Уфа".
18.45 "Дорога к храму".
19.15 "История признания".
19.30 Новоселье с "Радугой" (12+).
19.50 Кубок мира по хоккею среди молодежных клубных команд (12+).
22.30 Новости недели (12+).
23.15 "Конкурсный погром" (16+).
23.45, 03.45 "Одно звено". Худ. фильм (12+).
01.00 "Свидание с джазом" (12+)..
02.00 Спектакль (12+).
05.00 Цикл "Жизнь замечательных людей".
06.00 "Попкорм".
06.30 "Здоровое решение" (12+).

✓ *Минеңсә, театр эмоцияларға ҡоролорға тейеш, залдағы тамашасының эске кисерештәренә ҡағылмаһа, уны тетрәндермәһә, күңеленә өмөт сатҡылары һалмаһа, артист үҙенең маҡсатына тулыһынса өлгәшә алмай.*



*БЫЛ ЙЫЛДА...*

# МИЛЛИ РУХҺЫҘ...
## милли театр булмай



**Станиславский, театр гардеробтан башлана, тигән, ә Һеҙҙең өсөн театр нимәнән башлана?**

**Дамир ҒӘЛИМОВ, А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрының художество етәксеһе:** Театрға кейем элгесе лә, тамашасыны үҙенә йәлеп итеп торған матур бинаһы ла, һәләтле актерҙар ҙа, яҡшы репертуар ҙа кәрәк. Шулай ҙа милли театрҙы, беренсе нәүбәттә, милли рух күтәрә. Әгәр ҙә театрҙың үҙ традициялары, милли рухы булмаһа, ул ниндәйҙер күңел асыу урынына ғына әүерелә. Милли театрҙың үҙенсәлеге тап ошонда, рухһыҙ уның ижади юлы оҙайлы була алмай. Сибай театрына эшкә килгән йәш артистарға өлгө булыусы Ғәшиә Абыҙгилдина, Биби Мәһәҙиева, Шәмсинур Сиражетдинова, Ғәшүрә Ирназарова, Закир Ханов кеүек зыялыларыбыҙҙан быуындан-быуынға тапшырыла килгән йолаларҙы өйрәтеүсе, 50-60 йыл сәхнәгә хеҙмәт итеүсе өлкән быуын актерҙарыбыҙ - беҙҙең оло байлығыбыҙ. Тап улар театрҙы көслө итә. Телдең бар зауығын, моңон тойоп, еренә еткереп һөйләнелгән телмәр ҙә - театрҙың йөҙө. Урал аръяғы башҡорттарының теле бик үҙенсәлекле, унда әле лә башҡорт теленең бар нескәлектәре һаҡлана килә, шуға сәхнәлә дөрөҫ һөйләшеү мотлаҡ. Ғөмүмән, сәнғәт ул шулай уҡ тел һаҡсыһы, шуға телгә иғтибарлы булырға кәрәк.

Гоголдең, театр - ул кешеләргә күп изгелектәр килтерә ала торған кафедра, тигән һүҙҙәре бар. Театр - ул, ысынлап та, изгелек, ireклек, ихласлыҡ, ғәҙеллек, идеалдарға хеҙмәт итеү кеүек төшөнсәләр өсөн көрәш майҙаны. Иң мөһиме, ошо хәҡиҡәт онотолорға тейеш түгел. Тап ошо юлдан тайпылмаған өсөн дә милли театрҙарыбыҙҙың бөгөн дә тамашасыһы бар. Тотош Рәсәйҙә театр өлкәһендә барған көрсөктәр шуның өсөн дә беҙҙе урап үтә кеүек. Әлбиттә, башҡорт драматургияһының талғын үҫеше, репертуарҙы тулыландырырҙай әҫәрҙәр һирәк осрауы мәсьәләһе бар. Шулай ҙа, һуңғы осорҙа яңы исемдәр барлыҡҡа килде. Һәр театр драматургтар менән дә эшләргә тейеш. Мәҫәлән, бөгөн билдәлелек яулаған Наил Ғәйетбай, Таңсулпан Ғариповаларҙың ҡасандыр тәүге әҫәрҙәрен Сибай театры ҡуйғайны. Тамара Ғәниеваның "Тамарис"ы иҫ киткес уңышҡа өлгәшкәйне. Әлеге мәлдә Салауат Әбүҙәров менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ, башҡа авторҙарыбыҙ ҙа бар.

Бөгөнгө театр хис-тойғоларға бай түгел, ул тамашасының күңелен асырға ғына тырыша, тигән фекер менән дә килешмәйем. Хатта күңел асыуға ғына ҡоролған сара ла тамашасыны уйландырырға бурыслы. Минеңсә, театр эмоцияларға ҡоролорға тейеш, залдағы тамашасының эске кисерештәренә ҡағылмаһа, уны тетрәндермәһә, күңеленә өмөт сатҡылары һалмаһа, артист үҙенең маҡсатына тулыһынса өлгәшә алмай.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ХОККЕЙ*

# ЮЛАЕВСЫЛАР АЛЫШҠА СЫҒА

**Континенталь хоккей лигаһы чемпионатының 2014-2015 миҙгел уйындары башланыуға ла күп ҡалманы. 3 сентябрҙә Гагарин Кубогының ғәмәлдәге хужаһы Магнитогорскиҙың "Металлург" командаһы үҙ боҙонда Мәскәүҙең "Динамо"һын ҡабул итәсәк. Ә "Салауат Юлаев" хоккей командаһы иһә был миҙгел уйындарын ситтә башлаясаҡ. 4 сентябрҙә юлаевсылар Астанала "Барыс"тар менән көс һынашасаҡ.**

Ғәҙәттә, яңы уйын миҙгеленә хоккей командалары үҙгәртелгән состав менән сыға. Быға аптырарға түгел - һәр команда уйын миҙгелен Гагарин Кубогын яулау менән тамамларға теләй. Ә быһың өсөн командаға уйынсыларҙың иң шәптәрен, состарын һәм оҫталарын йәлеп итеү мөһим. Был эшкә "Салауат Юлаев" етәкселеге һәр саҡ етди һәм яуаплы ҡарай. Юлаевсыларҙың миҙгел барышындағы көслө, тиҙ һәм матур уйындары быға асыҡ миҫал.

2014-2015 миҙгел уйындарында "Салауат Юлаев" командаһы составында 8 яңы хоккейсы уйнаясаҡ. Улар - "Торпедо"нан килгән ҡапҡасы Виталий Коваль һәм һөжүм итеүсе Евгений Скачков, "Себер"ҙән Өфө командаһына күскән һаҡлаусылар Александр Кутузов һәм Иван Лекомцев, элекке "Спартак" уйынсыһы - һаҡсы Денис Бодров, уҙған миҙгелдә "Авангард" һәм "Югра" составындағы һөжүм итеүселәр Дмитрий Семин һәм Игорь Скороходов. Шулай уҡ Финляндия ҡунағы - һаҡсы Илькка Хейккинен. Яңы уйынсылар ҙа, башҡа юлаевсылар кеүек үк, үҙ көйәрмәндәрен табыр һәм командаға оло еңеүҙәр яуларға булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ.

Ҡыҙғанысҡа күрә, команда юғалтыуҙар ҙа кисерҙе. "Салауат Юлаев" составынан үҙ эшенең оҫтаһы ҡапҡасы Андрей Василевский китте. Ул хәҙер карьераһын сит илдә дауам итәсәк. 2009 йылдан алып юлаевсылар менән булған һөжүм итеүсе Сергей Зиновьев менән контракт оҙайтылмау сәбәпле, яңы миҙгелде ул "Сочи" командаһында башлаясаҡ. Шулай уҡ "Сочи"ға күсеүселәр иҫәбендә ҡапҡасы Алексей Волков, һаҡсылар Ефим Гуркин, Виталий Прошкин һәм Никита Щитов та бар. 2014-2015 уйын миҙгелендә элекке юлаевсылар - һөжүм итеүсе Игорь Мирнов "Аҡ барс", һаҡсылар Антон Бабчук "Торпедо", Никита Филатов "Югра" командалары составында уйнаясаҡ. Ә бына көйәрмәндәр яратып өлгөргән һәм шулай уҡ был миҙгелдә "Салауат Юлаев"тан киткән һаҡсы Брент Сопел әлегә артабан ниндәй командала уйнаясағын хәл итмәгән. Өфө командаһы составында матур уйын күрһәткән һәм хоккей яратыусыларға үҙ кеше булырға өлгөргән уйынсыларға яңы командаларҙа имгәнеүҙәрһеҙ уйын миҙгеле теләйбеҙ.

Яңы миҙгел дә, алдағы йылдарҙағы кеүек үк, сағыу һәм юғары профессиональ кимәлдәге уйын минуттары бүләк итеренә шик юҡ. Быға барыһы ла - ял итеп, көс йыйып, бары тик еңеүҙәр өсөн алышҡа сыҡҡан уйынсылар ҙа, яратҡан командаһы өсөн бар күңелдән көйгән көйәрмәндәр ҙә әҙер.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**КХЛ уйындарына тиклем "Өфө-Арена" боҙонда һәм Спорт һарайында Башҡортостан Республикаһы кубогы өсөн алыштар үтәсәк. 14-18 августа буласаҡ уйындарҙа 5 команда ҡатнашасаҡ. Шулай уҡ хоккей һөйөүселәр 22-30 августа үтәсәк йәштәр командалары араһында Донъя кубогы өсөн уйындарҙы ҡарау мөмкинлегенә лә эйә. Унда Рәсәй, АҠШ, Канада, Чехия, Финляндия, Беларусь, Латвия һәм Австриянан иң яҡшы ун команда ҡатнашасаҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТИБЕШКӘНДӘ ЛӘ...
## тиңең менән тибеш

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше мөғжизәләр тыуҙырыр ҡеүәткә эйә булырға хыялланған. Бейек тау башында ошондай һәләтле бер аҡһаҡал йәшәгәнен ишетеп, уны эҙләп киткән. Барып тапҡан һәм уның янында йәшәй башлаған, ҡартҡа төрлөсә хеҙмәт иткән. Ҡарт йәш кешегә бик тә рәхмәтле булған, әммә унан ул белгән мөғжизәләр тураһында һорағанда гел генә: "Мин ябай кеше һәм бер ниндәй мөғжизә лә ҡыла алмайым", - тип яуап бирер булған. Ә йәш кеше үҙенсә һығымта яһаған: "Уның яуабы - аҡһаҡал аҡылының бер билдәһе. Мөғжизәләр ҡыла белгән кеше бер ваҡытта ла "беләм" тип яуап бирмәҫ..." Көн артынан көн үткән. Йәш кеше һаман да аҡһаҡалға хеҙмәт иткән. Берҙән-бер көндө ҡарттың аяҡтарына массаж яһап ултырғанда ул тағы ла баяғы мөғжизәләр тураһындағы һорауын биргән. Ҡарт уның һорауын ишетмәмеш булып, йоҡларға теләүен белдергән һәм массаж яһауҙы туҡтатырға бойорған. Егет тыңларға ла теләмәгән. "Мөғжизәләр тураһындағы серегеҙ менән бүлешмәһәгеҙ, аяҡтарығыҙҙы ысҡындырмайым", - тигән. "Ярай, - тигән аҡһаҡал, - һиненсә булһын. Мин һиңә бик ҡеүәтле бер тылсым доғаһы өйрәтәм. Һин уны ниндәйҙер теләк теләгәндән һуң тығыҙ тапҡыр ҡабатларға тейешһең. Шул саҡта һинең теләһә ниндәй теләгең тормошҡа ашасаҡ..." Йәш кеше шатланып, юлға йыйына башлаған. "Ашыҡма, - тигән шул саҡ аҡһаҡал, - бер шарт бар... Теләгең тормошҡа ашһын өсөн тынлыҡта ғына ултырып, бар иғтибарыңды шул теләгеңә йүнәлтергә тейешһең. Иң мөһиме, һин һары маймыл тураһында уйламаҫҡа тейешһең..." "Ниндәй һары маймыл! - тип ҡысҡырып ебәргән йәш кеше. - Мин, ғөмүмән, бер ниндәй маймыл тураһында ла уйлағаным юҡ!"**

**Йәш кеше юлға сыға. Ул тиҙерәк өйгә ҡайтып етеп, тынлыҡта ултырып, тылсымлы доға ярҙамында үҙенең берәй теләген тормошҡа ашырырға ашыға. Тик... Өйөнә яҡынлашһа, уға тәҙрәнән әллә күпме маймыл ҡарап тора һымаҡ тойола. "Был ниндәй һаташыу?" тип уйлап ала ул, ләкин уны алда тағы ла ныҒыраҡ һаташыуҙар көткән була. Өйгә инеп, тынлыҡҡа сумып, аҡһаҡал өйрәткән доғаларҙы ҡабатлай башлауы була, бар тирә-яғын маймылдар уратып алыуын күрә, уларҙың үсекләп ҡысҡырыуҙарын ишетә. Түҙеп торғоһоҙ була был хәл. Төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡҡас, иртән инде унда бер ниндәй мөғжизә ҡайғыһы ла булмай. Тик йоҡлау ғына була уйында. Әммә маймылдар уны көндөҙ ҙә эҙәрлекләүҙән туҡтамай. Йәш кеше кисен аҡһаҡалдың өйөнә көскә килеп йығыла. Ә уныһы уны көтөп торған була. "Нимә, маймылдар бимазаланымы?" тип көлөп һорай ул йәш кешенән. Егет уға үпкәһен белдерә лә: "Минең аңымды, зинһар, тылсымлы доғағыҙҙан азат итегеҙ. Мине мөғжизә ҡылырға өйрәтеү урынына, аңыма маймыл һындары индереп урынлаштырҙығыҙ", - ти. Аҡһаҡал еңелсә йылмайып, былай ти:" Һин үҙең ғәйепле. Мин һиңә "Бер ниндәй мөғжизә лә белмәйем", тип әйттем бит. Унан тыш, мин һиңә аҡылыңдың ниндәй дәрәжәлә үҫешмәгән һәм баҫылған икәнен күрһәтергә теләнем. Иң тәүҙә, аҡылыңды үҫтереү менән шөғөлләнергә кәрәк һиңә..."**


1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 2579